*"Мин дөрөҫлөктөң һис шикһеҙ еңеп сығасағын, киләсәктең матур буласағын белгән өсөн түгел, ә дөрөҫлөктөң еңеп сығыуы кәрәк булған өсөн, тормошта тик көрәшкәндә генә матурлыҡ тыуҙырып булғанын, кешелек идеалының тормошҡа ашыуын ысын йөрәктән һәм бөтә күңелем менән теләгән өсөн, тик шул юлда ғына файҙалы булыу мөмкин булған өсөн дә ҙур ҡая таштар ҡаплаған, боролмалы-боролмалы, ауыр һәм ҡатмарлы юлды һайлап алдым..."*

***Рәми ҒАРИПОВ.***

***(Был юлдарҙы шағир 18 йәшендә яҙған).***


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

11 - 17 ФЕВРАЛЬ (ШАҠАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№6 (476)



БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ҡыш бабай балаларына...**
тантана ойошторолдо



4-5

**Генерал Шайморатов**



7

**Атайым кеүектәрҙе бөгөп булмай...**



8-9 һындырып ҡына була торғандыр

**Шағир донъяһына сәйәхәт**



11


РӘМИ ТУРАҺЫНДА ҺҮҘ

# ШАҒИР ЕҢЕЛ ЯҘМЫШЛЫ БУЛМАЙ...

**Рәми Ғарипов үҙе ҡыҫҡа ғүмерле булһа ла, оҙон ғүмерле ижад ҡалдырҙы. Рәмиҙең шиғриәте уның үҙенә ҡарағанда күпкә бәхетлерәк булды. Тере сағында ҡағылып-һуғылған шағирҙың шиғриәте хәҙер үҙенең тейешле баһаһын ала бара, уның ысын ҡәҙере арта бара.**

**Тағы ла шуны әйтергә кәрәк. Рәми Ғариповты әле өйрәнәһе лә өйрәнәһе... Уҡыусылар иғтибар итмәй ҡалмайҙар: йыл һайын матбуғатта уның быға тиклем баҫылмаған шиғырҙары донъя күрә. Бына уның аҙ билдәле бер шиғыры:**



Азамат ҒАРИПОВ һүрәте.

*Был кешелек ҡайҙа бара һуң ул?*
*Белһә әгәр ҡайҙа барғанын,*
*Тарихи бер бәхет һанар ине*
*Ярты юлда туҡтап ҡалғанын.*
*Белмәй һаман: үҙен-үҙе алдай,*
*Арта ялған, арта вәхшилек.*
*Аҡыл эшләй аҡылһыҙлыҡ өсөн,*
*Һәләкәтен даулай кешелек.*
*Ер әйләнә шартлап ярылырға...*
*Килһә икән әҙәм ҡулынан,*
*Ул арҡыры сығып ятыр ине*
*Туҡтатырға уны юлынан...*
*Аһ, әйләнәм бер шик ҡолона!*

Шиғыр 1964 йылдың 24 апрелендә яҙылған. Әле донъялар сағыштырмаса һил саҡта, кешелек алдына һәләкәт бөгөнгө кеүек үк ҡот осҡос хәлендә килеп баҫмаған саҡта уҡ Рәми Ғарипов бына ниндәй борсоулы уйҙар менән йәшәгән!

Беҙ шағирҙың нахаҡҡа күргән ауырлыҡтары, уға ғәҙелһеҙ ғәйептәрҙең өйөлгәнлеге тураһында урынлы хәтерләйбеҙ. Ләкин беҙ шуны ла онотмайыҡ: шағир һәр саҡ үҙенә аяуһыҙ булды, ялған менән бер ваҡытта ла килешмәне, бары дөрөҫлөккә табынды. Уға йәшәүе бер ваҡытта ла еңел булманы, сөнки ул еңел-елпе уйҙар менән, ваҡ маҡсаттар менән йәшәмәне, юҡ-бар менән ҡәнәғәт булып, вайымһыҙлыҡҡа бирелмәне.

Шағирҙар, ғөмүмән, еңел яҙмышлы булмай. Уйлап ҡараһаң, ысынында бит улар фажиғәле, трагик яҙмышлы шәхестәр. Шағир һәр ваҡыт үҙ заманы менән бәхәсләшеп, кеше күңеленә, тормоштоң именлегенә янаусы ҡурҡыныстарҙы алдан күреп йәшәй. Шуға ла ул һәр саҡ һыҙлана, шуға ла ул тыныс яҙмышлы, ғәҙәттәгесә бәхетле була алмай...

**Рауил БИКБАЕВ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Милли мәсьәләгә арналған һайлау алды сығышында Владимир Путин, ситтән килгәндәр урындарҙағы йола һәм ғәҙәттәргә ихтирам менән ҡарарға тейеш, тигәйне. Был турала һеҙ ни уйлайһығыҙ?

***Закирйән ӘМИНЕВ, юрист, ғилми хеҙмәткәр:*** Был бик дөрөҫ һәм ғәҙел талап. Был турала шундай юғары кимәлдә һүҙ күтәреү күптән кәрәк ине. Мәсьәлә бик ҡаты ҡуйылды: киләһе йылдан, тине В. Путин, миграция статусы алыу һәм уны оҙайтыу өсөн рус теле, Рәсәй тарихы һәм әҙәбиәте, дәүләт һәм хоҡуҡ нигеҙҙәре буйынса имтихан биреүҙе индерергә кәрәк. Эйе, Рәсәйгә килгәс, уның тарихын да, мәҙәниәтен дә, телде лә белергә тейеш ситтән килгәндәр. Ә беҙҙең Рәсәй ҙур, уның күп милләтле, үҙенсәлекле төбәктәре бик күп. Әйтәйек, шундай төбәктәрҙең береһе Башҡортостанға һуңғы йылдарҙа бик күп сит халыҡ килеп тулды: улар тиҙ генә эш урындары асып ебәрҙе, йә үҙҙәре яллanып эшләй башланы, тотош тип әйтерлек кварталдарҙан торлаҡ һатып алып, һин дә мин йәшәп яталар. Әлбиттә, граждандарҙың йәшәү урынын һайлауға конституцион хоҡуҡтарын тыйып булмай, ләкин мигранттар өсөн урындарҙағы йола, тәртиптәрҙе һанлау буйынса законлы талаптар ҡуйыу бер ҙә генә ғәжәп йәки мөмкин булмаған эш түгел. Юғиһә, күреп, ишетеп, гәзиттәрҙән уҡып торабыҙ: бик иркен тота улар үҙҙәрен, хатта ки кеше үлтереү, көсләү кеүек енәйәт ҡылыуҙан да тартынып тормайҙар. Был бигерәк тә Урта Азиянан килгән йәки "ҡайнар" ҡанлы Кавказ вәкилдәренә ҡағыла. Улар, ғөмүмән, Ер йөҙөндә үҙҙәренән башҡа кеше юҡ, тип уйлай һымаҡ тойолоп китә. Шундай бер бәләкәй генә көндәлек күренеште алып ҡарайыҡ: ғәҙәттәгесә, шау-шыулы вокзалда поезд көтөп ултырам. Шул саҡ ҡулдарын болғай-болғай үҙ-ара һөйләшеп, өс әрмән килеп инде. Вокзалда хәҙер ошо өсәүҙең тауышынан башҡа бер ни ишетелмәҫ булды ла ҡуйҙы, хатта дикторҙың иғландарын да күмеп китте уларҙың ҡысҡырып һөйләшеүе. Әлбиттә, был уларҙың холоҡ, характер үҙенсәлеге, тип әйтеүселәр ҙә булыр, ләкин сит илгә килгәнһең икән, холҡоңдо бер аҙ үҙгәртергә лә кәрәктер ул. Үҙ өйөңдә түгелһең дә... Сит монастырға үҙ уставың менән йөрөмәйҙәр, тип бик дөрөҫ әйтелгән дә бит, тик уны онотоп ебәрәләр шул. Ана шуға ла, үҙҙәренең ҡайҙа килгәнлектәрен "онотоп ебәрмәһендәр" өсөн кәрәк тә ул мигранттар тураһында закон нормалары. Һәр регион үҙ төбәк кимәлендә ошо хаҡта закон акттары ҡабул итергә хаҡлы. Тик шуныһы ҡыҙғаныс: ғәҙел, яҡшы закондар ҡабул ителә лә ул, тик уларҙың үтәлеше менән бер кем дә тип әйтерлек ҡыҙыҡһынмай.

**(Дауамы 2-се биттә).**

"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 10 ЙЫЛ

# КҮПКӘ БАЙЫНЫҠ...

## Белем яғынан да, аҡыл, рух йәһәтенән дә

**Үҙем Ырымбурҙа йәшәһәм дә, төрлө ваҡытта туғандарҙан, таныштарҙан алып, "Киске Өфө" гәзитен уҡып бара инем. Хәҙер инде уны интернеттағы сайт аша уҡыйым.**

Гәзиттең баҫыла башлауына 10 йыл да булып киткән икән. Бер яҡтан, ун йыл тигән ваҡыт арауығы күп тә түгел һымаҡ, әммә баҫманың башҡорт тормошондағы ролен, уның ун йыл буйы башҡарған эшен байҡай китһәң, ай-һай, ошо йылдар эсенә күпте һыйҙырып була икәненә инанаһың. Уны яҙҙырып уҡығандар күпкә байыны, белем яғынан да, аҡыл, тойғо, рух йәһәтенән дә.

Йөкмәткеле, үҙенсәлекле гәзит ул "Киске Өфө". Бер яҡтан, мәсьәләләргә һағыраҡ та ҡараған һымаҡ, икенсе яҡтан, барыбер ишаралап булһа ла кешегә кәрәк фекерҙе еткерә белә - шуныһы менән ҡәҙерле ул. Күп кенә киҫкен мәсьәләләрҙе лә күтәрә гәзит быңдай ишаралап.

Гәзит заман менән бергә атларға тейеш, бәлки, алдараҡ та барырға тейештер. Мин башҡалар тураһында әйтмәйем, ә бына "Киске Өфө" гәзите заман менән бергә атлай, минеңсә. Шуға күрә Өфөләге һәм республикалағы башҡорттар өсөн был гәзиттең тәрбиәүи файҙаһы ифрат ҙур.

Ғәҙәттә шулай була: нәмә тураһындалыр ишетеү менән уның һынланышы күҙ алдына баҫа. Мәҫәлән, "өҫтәл" һүҙе төрлө кешенең күҙ алдына төрлө һынланышта килеп баҫырға мөмкин. Формаһына, тәғәйенләнешенә ҡарап, һәр кем был предметты үҙенсә күҙ алдына килтерә. "Киске Өфө" гәзите, тиһәләр, минең күҙ алдыма шунда уҡ рухты, милли аңды үҫтереүгә йүнәлеш алған бер алыш йыйынтығы килеп баҫа. Кеше ғүмере буйы аҡыл туплай. Беҙ ҙә ошо гәзиттән үҙебеҙгә ҡыҙыҡ булған мәғлүмәт алабыҙ. Гәзиттең милли идея эҙләүе, тәбиғәтте һаҡлау мәсьәләләрен, ғаилә темаларын күтәреүе, мәҙәниәт яңылыҡтары менән таныштырып, уларға үҙенсәлекле ҡараш ташлап, беҙгә милли һынланыш, сағылыш аша еткереүе ҡиммәтле беҙҙең өсөн.

**Дауыт АМАНГИЛДИН.**
**Ырымбур ҡалаһы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Милли мәсьәләгә арналған һайлау алды сығышында Владимир Путин, ситтән килгәндәр урындарҙағы йола һәм әҙәттәргә ихтирам менән ҡарарға тейеш, тигәйне. Был турала һеҙ ни уйлайһығыҙ?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Зәлифә ҠУЛБИРҘИНА, Иранда өс йыл уҡып ҡайтҡан йәш белгес:*** Иранда йәшәү миңә бик оҡшаны. Мосолман илдәрендә генә була торған әҙәп, тәртип, иманлылыҡ әллә ҡайҙан күренеп тора. Ситтән килгән халыҡҡа оло ихтирам менән ҡарайҙар, бик ярҙамсылдар. Улар шулай изгелекле мөнәсәбәттәре менән ситтән килгән кешеләрҙә лә үҙҙәренә ҡарата ихтирам уята беләләр. Әлбиттә, мигранттарға ҡағылышлы ҡайһы бер сикләүҙәр ҙә бар. Мәҫәлән, Иранға яңғыҙ ҡатын-ҡыҙ өсөн юл ябыҡ, ул мотлаҡ хәләл ефете менән килергә тейеш был илгә. Ә беҙгә, уҡырға килеүсе студент ҡыҙҙарға, бәхеткә күрә, был закон ҡағылманы. Теһеран университетының беҙ уҡыған төркөмөндә Американан, Францианан, Кубанан, Таиландтан, Кореянан, Азияның башҡа күп илдәренән студенттар булды. Беҙ ғәрәп, фарсы, инглиз телдәрен өйрәндек. Мосолман илендәге мөхит ана шул төрлө холоҡло, төрлө инаныулы йәштәрҙең бөтәһен бер коллектив итеп берләштерҙе, күңелдәрен изгелек, иплелек кеүек күркәм сифаттар менән байытты. Шуға күрә мин Владимир Путиндың милли мәсьәлә хаҡындағы мәҡәләһендә күтәрелгән мигранттар проблемаһына ҡарата үҙемдең ҡараштт белдерер инем: ситтән килгәндәр урындағы халыҡ менталитетына ҡарап йүнәлеш ала һәм тәртип нормаларын шуға ҡарап көйләй. Әлбиттә, урындарҙа үҙҙәрен ошо ерҙең хужаһы итеп тойған халыҡ ситтән килгәндәрҙе бик яратып бөтмәй - был аңлашыла, ләкин мигранттар ниндәйҙер сәбәп менән йәшәр өсөн тап ошо ерҙе һайлаған икән, быны уларға бер кем дә тыя алмай. Ошонон менән килешергә һәм үҙендә ситтән килеүселәргә өлгө булырлыҡ итеп торорға кәрәктер, тиген уйҙамын.

***Ғилметдин ХАРРАСОВ, хеҙмәт ветераны:*** Владимир Путиндың һайлау алды сығыштары менән ентекләп танышып барам. Әле бына уның милләт мәсьәләһенә ҡағылышлы мәҡәләһен ҡулыма ҡәләм тотоп уҡып сыҡтым, сөнки мәсьәлә бик актуаль. Дөрөҫөн әйткәндә, В. Путиндың милләт мәсьәләһенә мөнәсәбәтен күптән белге килә ине. Мәҡәләне уҡығас, миндә күп кенә һорауҙар һәм ҡайһы бер фекерҙәр тыуҙы. Дөрөҫ, бөтә донъя кимәлендә "бөйөк күсенеүҙәр" процессы бара. Теләйһеңме, юҡмы, был тулҡынды туҡтатыу сараһы юҡ. Ләкин әле Владимир Владимирович билдәләүенсә, был процессы көйләп була торғандыр, тием мин дә. Сөнки, үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ, был хәлдә үҙ йәйына ҡуйһаң, беҙгә тын алырға ла форсат ҡалмаҫ. Белеп ҡалдылар Башҡортостандың йәннәткә тиң ер булыуын. Азиянан да килеп тулдылар, Кавказ халҡын әйтеп торорға ла түгел! Вьетнамдар тамам әрһеҙләште: сифатһыҙ, арзан тауарҙарының хаҡын әллә күпмегә арттырып һатып торалар. Тауарын ҡарап та алмай китһәң, әрләп, һүгенеп тороп ҡалалар хатта. Ә һатыулашыуға ниндәй оҫталар! Шул тиклем ҡара нығыш булыуҙары менән еңде лә инде улар Американы, беҙ нимә инде уларға... Ә балалары менән бергәләп теләнсәләп ултырған, юлда машиналар араһында буталып, хәйерсәләп йөрөүсе сиғандар тураһында ни әйтерһегеҙ? Быңа шундай килмешәктәр беҙҙең рухты, йолаларҙы ихтирам итә буламы? Төкөрөп тә бирмәйәсәктәр! Закон сығарылған хәлдә лә улар күп ваҡыт үтәлмәй. Минең тәҡдим шул: иҡтисади яҡтан файҙа килтермәгән сит төбәк кешеләренә республикабыҙға инеү юлын ябырға! Һәм, ғөмүмән, йән башына ресурстар нормаһын билдәләп, шунан сығып миграция процесын көйләргә ваҡыт еткәндер.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!



Күгәрсен районының башҡорт теле уҡытыусылары.

Гәзитебеҙҙе йыл да алдырған, уға ваҡытында яҙылған, уны аҙна һайын ҡәҙерле ҡунағылай көтөп алған тоғро уҡыусыларыбыҙ барлығын беләбеҙ һәм улар иғтибарына шуны еткерәбеҙ: февраль-март айҙарында 2012 йылдың тәүге яртыһындағы хаҡ менән **(348 һум 24 тин)** 2012 йылдың икенсе яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып буласаҡ. **Һеҙҙе бер аҙ дәртләндереү өсөн шундай тәкдим: февраль айында гәзиткә яҙылып, квитанцияһын редакциябыҙға ебәргән ике уҡыусыбыҙ башҡортса "Көрьән-Кәрим" китабына эйә буласаҡ.** Бәхетегеҙҙе һынап ҡарағыҙ ҡана!

**Һәм тағы.** Эргә-тирәгеҙҙә, таныштоноштарығыҙ араһында теге йәки был сәбәп арҡаһында гәзиткә яҙылып өлгөрмәй ҡалғандар ҙа барҙыр. Уларҙы иҫкәртегеҙсе: 17 февралгә тиклем яҙылһалар, марттан өйҙәренә тағы килә башлар "Киске Өфө". Индексы - 50665. Дүрт айға яҙылыу хаҡы - 232 һум 16 тин.

**Әйткәндәй,** почталар менән гәзиткә яҙҙырыу һәм гәзитте өйҙәргә килтереү буйынса аңлашылмаусылыҡтар килеп тыуһа, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итергә онотмағыҙ.

Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**, **kiskeufa@ufacom.ru**, беҙҙең сайт: **kiskeufa.ru**, блог: **blog.kiskeufa.ru**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов видеоконференция режимында Рәсәй Федерацияһы Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле ҡарамағындағы Советтың эш төркөмөнөң тәүге ултырышын үткәрҙе. Унда "Яңырыу шарттарында Волга буйы федераль округы төбәктәренең агросәнәғәт комплексын үҫтереү тураһында"ғы мәсьәлә ҡаралды.

✓Өфөлә күп балалы әсәләргә наградалар тапшырыу тантанаһы үтте. Наградалар тапшырыу тантанаһына килгән иң ҙур делегация Бөрйән районынан булды - Өфөгә миҙал алыу өсөн һигеҙ күп балалы әсә килгәйне.

✓Мәсетле районы Оло Ыҡтамаҡ ауылында "Байыҡ-2012" республика конкурсының беренсе һайлап алыу туры үтте. Бәйгенең финалында сығыш яһау хоҡуғы өсөн Балаҡатай, Дыуан, Ҡыйғы, Мәсетле һәм Салауат райондары, шулай уҡ Силәбе өлкәһе бейеүселәре көс һынашты. Бейеү конкурсының киләһе һайлап алыу туры 10 февралдә Сибайҙа үтәсәк.

✓VI Ҡышҡы халыҡ-ара балалар уйындары эмблемаһы һәм талисманының иң яҡшы проектына конкурс аҙағына ла етте. Ҡыҙыу фекер алышыуҙан һуң, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған рәссамы Айрат Тереғолов менән "Симай" студияһы етәксеһе Рим Забаров еңеүселәр тип танылған. Улар урталыҡта ҡурай сәскәне төшөрөлгән йондоҙҙо - эмблема итеп, һоро айыуҙы талисман итеп тәҡдим иткән.

✓2013 йылғы Халыҡ-ара балалар уйындарының рәсми сайтында талисманға исем һайлау буйынса тауыш биреү башланды. VI Ҡышҡы халыҡ-ара балалар уйындары талисманы - айыу өсөн тәҡдим ителгән алты исемдең береһе өсөн теләгән һәр кем тауыш бирә ала. Тайыштабан өсөн түбәндәге исемдәр тәҡдим ителде: Айыухан, Фимка, Снежок, Топтыжка, Батыр һәм Яшка. Тауыш биреү 2012 йылдың 29 февраленә тиклем дауам итәсәк.

✓Силәбе өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты башҡорт телендә сыҡҡан китаптар йыйыу буйынса "Китап менән уртаҡлаш" акцияһы иғлан итә. Китаптарҙы, "Силәбе өлкәһе өсөн" билдәһен ҡуйып, Өфө ҡалаһы, Ленин урамы, 50 ("Нефтсе" мәҙәниәт һарайы), 217-се йәки 213-сө бүлмә адресына алып килергә кәрәк.

ШАҢДАУ

# ҮГЕҘҘЕҢ МӨГӨҘӨНӘН ТОТ,

## йыландың башына баҫ...

**Гәзитебеҙҙең "Милли идеяға торош" рубрикаһындағы "Хәҡиҡәт йән һаҡлар..." тигән мәҡәләһендә Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай илдәге генә түгел, бөтә донъя күләмендәге заман афәттәренең береһе - "суицид" (ғәрәпсә - интихар, ә башҡортса - үҙ-үҙеңә ҡул һалыу) тураһындағы оло проблеманы ла телгә алып үтә ("Киске Өфө", 3-сө һан). Ошо хаҡта уҡығас, шундай бер мәрәкә хәл иҫкә килеп төштө.**



Бер батша үҙ биләмәһендәге ҡалалар башлыҡтарынан ул килгәндә үҙен пушкалар залпы менән ҡаршы алыуҙарын талап итә. Бойороғон үтәмәгәне өсөн уларҙы ҡаты язалау менән янай. Ҡала башлыҡтары, әлбиттә, уның был әмерен һәр саҡ үтәй. Әммә бер мәл ҡалаларҙың береһендә был ҡағиҙә үтәлмәй. Батшаның: "Ни өсөн минең әмерҙе үтәмәнегеҙ, ни өсөн мине залпһыҙ ҡаршы алдығыҙ?" - тигән һорауына ҡаршы ҡала башлығы былай ти: "Ғәли йәнәптәре, пушканан залп бирмәүҙең ҡырҡ сәбәбе бар. Шуларҙы һанап китергә рөхсәт ит". Батша рөхсәт биргәс, ҡала башлығы һанай башлай: "Хөрмәтле ғәли йәнәптәре, һеҙҙе залп менән ҡаршы ала алмауыбыҙҙың беренсе сәбәбе - ҡалабыҙҙа бөтөнләй дары запасы бөттө, икенсе сәбәбе..." "Етер, аңлашылды, - ти батша. - Ҡалған утыҙ туғыҙ сәбәбен һанамаһаң да була!.."

Шундай етди темаға һөйләшкән мәлдә ни өсөн был мәрәкә һымаҡ хәлде иҫкә төшөргән был, тип уйлайһығыҙмы? Бына ни өсөн.

Һүҙ башында әйтеп кителгән мәҡәләһендә автор элекке һәм хәҙерге заманды сағыштырыу өсөн иҫ китерлек бер миҫал килтерә: "Ун туғыҙынсы быуат дәүерендә (йөҙ йыл элек, хәҙерге Әбйәлил районы территорияһында бер генә кеше үҙенә-үҙе ҡул һалған булһа (ул да булһа, ситтән килгән башҡа милләт вәкиле), егерменсе быуаттың һикһәненсе йылдарында илебеҙҙә динде бөтөрөп, бәхетле киләсәккә өмөт итеп, коммунизм төҙөп маташҡан осоробоҙҙа йыл һайын етмешләгән башҡорт кешеһе үҙ-үҙен юҡ итә! Сәстәрең түгел, әллә ниміәләрең үрә торор..."

Шунан автор суицидтың ғалимдар тарафынан иҫбатланған сәбәптәрен һанап сыға. Шунан һуң үҙенең фекерҙәрен туплап алып, сәптең нәҡ уртаһына алып килеп сәпәй: "Суицидтың иң төп һәм берҙән-бер сәбәбе - динһеҙлек!" Бөтә донъя ғалимдары, һәр төрлө рәсми һәм йәмәғәт органдары, башҡа бик күптәр баш ватҡан мәсьәләгә яуап итеп, ошо ифрат та ябай, әммә һис кем инҡар итә алмаған хәҡиҡәтте килтерә яҙыусы.

Әле мин бала саҡта ла оло кешеләрҙән: "Әүәле ауылда аҫылынып, йәиһә башҡа төрлө үҙ-үҙен үлтереүе булмай торғайны..." - тип әйткеләгәнен йыш ишетә торғайным. Сөнки барыһы ла Ислам динен тотҡан, Аллаһ собхәнә үә Тәғәләгә ысын күңел менән ышанған боронғо башҡорт ғаиләһендә тыуып үҫкән, балаларҙың теле "әсәй", "мәм-мәм" тигән һүҙҙәр менән бер үк ваҡытта "Аллаһ" тип тә асылған. Үҙебеҙҙе һәм бар донъяны яралтҡан Аллаһтың барлығын, берлеген белеү менән бер рәттән, уны һәр саҡ хәтерҙә тотоуҙың, уға зекерҙәр әйтеүҙең, ғибәҙәт ҡылыуҙың мотлаҡлығын, насар ғәмәлдәр ҡылған өсөн унан ҡурҡырға кәрәклеген балаларының ҡанына һеңдерер барған ата-әсәйҙәр. Алдашыу, урлашыу, кешегә зыян эштәр, зина ҡылыу һымаҡ оло гонаһ һаналған насар эштәр рәтенә тап ошо юғарыла әйтелгән интихар, йәғни суицид та индерелгән. Үҙен-үҙе юҡ иткәндәр өсөн борон зыяраттан да урын бирелмәгән. Бәйғәмбәребеҙ с.ғ.с. хәҙистәренең береһендә әхирәттә улар өсөн Аллаһ мәңгелек йәһәннәм уты әҙерләп ҡуйыуы хаҡында әйтелә. Аллаға ышанған кеше тормошта ниндәй генә ауырлыҡ кисермәһен, әлбиттә, иң беренсе нәүбәттә үҙенең әхирәттәге киләсәген уйлаясаҡ. Был донъянан киткәс тә үҙен ябай уттан әллә күпме тапҡыр көслөрәк һәм ҡурҡынысыраҡ йәһәннәм уты көтәсәген белгән кеше үҙ-үҙенә ҡул һалырҙан алда тап ана шул хаҡта фекер итәсәк. Ә кешене үҙ-үҙенә ҡул һалыуға алып килгән ғалимдар асыҡлаған егерме бер сәбәп - улар сәбәп түгел, ә һылтау, һеҙәмтә генә икәнен ифрат та асыҡ итеп аңлатып бирә Әхмәр Үтәбай. Юғарыла килтерелгән мәрәкә хәлдәге ҡырҡ сәбәптең иң тәүгеһе - дары булмауын төшөрөп ҡалдырып, пушка ни өсөн атмағанын тик ҡалған утыҙ туғыҙ сәбәп менән генә аңлатып маташырға, тап ана шул һылтауҙар хаҡында ғына һүҙ алып барырға ғәҙәтләнгәнбеҙ, йәмәғәт. (Ғалимдар иҫбатлаған егерме бер сәбәп - әлеге батша һанаттырмай ҡалдырған утыҙ туғыҙ сәбәпте хәтерләтте). Үгеҙҙең мөгөҙөнән торға, йәиһә йыландың башына баҫырға кәрәк икәнлекте әллә белмәйбеҙ, әллә белергә теләмәйбеҙ. Мәҡәләһенең һуңында автор тап ана шул юҫыҡта фекер йөрөтә, дөрөҫтәрҙән дөрөҫ һәм ифрат та ябай бер хәҡиҡәтте асып бирә. Әхмәр Үтәбайҙың үтә лә бай фекере менән килешәм һәм киләсәктә лә уға ошондай тәрән йөкмәткеле, файҙалы әҫәрҙәре менән уҡыусыларҙы шатландырып тороуын теләйем.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**
**Сибай ҡалаһы.**

ӘЙТӘГҮР!

# БАРМЫ УЛ МӨХӘББӘТ?

**Ошо көндәрҙә Ғашиҡтар көнө билдәләнә. Ошо уңайҙан гәзит уҡыусыларыбыҙға мөрәжәғәт иттек. Нимә ул мөхәббәт? Ҡайны берәүҙәр иҫбатлауынса, бөгөнгө йәштәр ысынлап та мөхәббәт тойғоһон түгел, ә енси теләкте генә алға ҡуймы? Ҡатнаш никахтарға ҡарашығыҙ нисек?**

**Илнур ХӘТИЙӘТОВ, Белорет районы, 27 йәш:** Мөхәббәт - бер-береһен ысын күңелдән һөйгән ике кеше араһындағы ялҡынлы ут, йәшәү мәғәнәһе, кешелеккә бирелгән оло бүләк. Бөгөнгө ҡайһы бер йәштәрҙең ошо бөйөк хисте енси аҙғынлыҡҡа ғына ҡайтарып ҡалдырыуы үкенесле хәл. Бының сәбәптәре төрлө: берҙән, ул ғаиләлә ысын мөхәббәт өлгөһө күрмәгән. Икенсенән, йәштәштәре араһында "аҡ ҡарға" булып күренмәҫкә тырышыуҙан да киләләр был. Бәлки, улар әле йөрәктәрен өтөп алыр, ҡандарын ҡайнатыр, утҡа-һыуға һалыр мөхәббәттәрен осратмағандыр...

Ғүмерлеккә ҡоролаcаҡ бәләкәй дәүләттең, йәғни ғаиләнең нигеҙе ныҡ булыуҙа никахлашыусыларҙың бер милләттән, бер диндән булыуы мотлаҡ. Ҡатнаш никахлы ғаиләлә кемдер барыбер өҫтөнлөклө роль уйнаясаҡ, ә икенсе яртыһы уға буйһоноп йәшәйәсәк, балалары ла ана шул буйһондоролған яҡтың милләтен һайлаясаҡ. Һәр хәлдә, был башҡорт ире йә ҡатыны файҙаһына түгел икәнен гел күҙәтергә тура килә.

**Марат УСМАНОВ, Сибай ҡалаһы, 30 йәш:** Ер йөҙөндә күпме кеше йәшәй, шунса фекер. Ләкин мин ғалимдар һүҙенә ҡолаҡ һалырға тәҡдим итәм. Антропологтарҙың һуңғы тикшеренеүҙәре буйынса, мөхәббәт - ул бары тик кеше организмында барған химик һәм биологик процестар ғына. Кеше ялҡынлы һөйөү утында янғанда уның мейеһенә эмоциональ күтәренкелек тойғоһо биргән матдә - допамин бүленеп сыға, ул 6 айҙан 3 йылғаса кеше күңелендә "йәшәргә" мөмкин. Һәм ошо ваҡыт арауығы ғаилә ҡороп, балаларға ғүмер бүләк итеү өсөн етә икән. Артабан, миненсә, бары тик бер-береңә өйрәнеү, уртаҡ балалар булыуы, бергә йыйған донъя малын тарҡатмаҫҡа, бүлгеләмәҫкә тырышыу ғына ир менән ҡатынды бер ҡыйыҡ аҫтында тота. Шуға күрә мин мөхәббәтте ниндәйҙер сикһеҙ бейеклеккә һәм юғарылыҡҡа күтәрмәйем. Ошоларҙан сығып, икенсе һорауға яуапты ҡуҙалларға мөмкин, тип уйлайым. Мөхәббәттең асылында ғаилә ҡороп, балаларға ғүмер бүләк итеү концепцияһы ята, тимәк, барыһы ла енси мөнәсәбәткә барып тоташа. Бында ниндәйҙер хилафлыҡ йәки тотанаҡһыҙлыҡ эҙләргә ярамай, сөнки был тәбиғи хәл. Ләкин мөхәббәт һүҙе менән ышыҡланып, енси бәйһеҙлек диңгеҙенә сумғандарҙы йәлләйем, сөнки улар тәндәрен генә түгел, йәндәрен дә ағыулай һәм бысрата. Ҡатнаш никахҡа килгәндә, химик һәм биологик процестың һәр береһе үҙенсәлекле һәм бер-береһенә һис тура килмәгән ике төрлө процесс булараҡ ҡабул ителә. Ҡатнаш никахты ла ошо миҫалдан сығып ҡарағанда, барыһы ла аңлашылалыр, тип уйлайым.

**Гөлфиә ИШҠОЛОВА, Салауат районы, 38 йәш:** Мөхәббәт - беҙҙең барыбыҙҙы ла бәхетле итеүсе, тирә-яҡты изгелеккә һәм әкиәти матурлыҡҡа төрөндөрөүсе изге хис. Кемдәндер шатлығы - минең шатлыҡҡа, бәхетһеҙлеге - минең бәхетһеҙлеккә әйләнә, тимәк, был мөхәббәт. Кемдер мөхәббәттең матурлығын һәм нурын бары тик енси мөнәсәбәттә генә күрә икән, ул кешене йәлләргә генә ҡала, сөнки уның эске донъяһы ярлы һәм мәғәнәһеҙ. Никах - ике йөрәктең ҡауышыуы, тәндәрҙе генә түгел, иң мөһиме, йәндәрҙе бер итеүсе, ә башҡа мөхиттә тәрбиәләнеүсе һәм был донъяға бөтөнләй икенсе күҙлектән сығып ҡараусы икенсе милләт кешеһе менән йәндәрҙең берегеүенә шикләнәм.

**Наҙгөл САФИУЛЛИНА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда "Башҡортостан Уралы" биосфера резерваты ойоштороласаҡ. Был Рәсәй буйынса - 46-сы, Урал зонаһында иһә беренсе объект буласаҡ, йәғни ошондай биосфера ҡурсаулығы ойоштороласаҡ. Уның составына "Шүлгәнташ" дәүләт тәбиғәт ҡурсаулығы, "Башҡортостан" милли паркы, "Мораҙым тарлауығы" тәбиғәт паркы, "Алтын Солоҡ" тәбиғи зоологик заказнигы һәм "Ыҡ" зоологик заказнигы кеүек республиканың биш айырыуса һаҡланған тәбиғәт биләмәһен индереү планлаштырыла.

✓БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары Дәүләт Думаһындағы хеҙмәттәштәренең РФ Хеҙмәт кодексындағы үҙгәрештәргә бәйле башланғысын яҡланы. Үҙгәрештәр мөмкинлектәре сикләнгән балаларҙы тәрбиәләүсе әсәләр һәм аталар хоҡуҡтарын тигеҙләүгә ҡағыла. Ҡануниәттә киләһе мәсьәләне нығытыу мөһим: инвалид бала тәрбиәләүсе атаны, әсәне кеүек үк, эш биреүсе инициативаһы менән эштән сығарыу тыйылһын.

✓Рөстәм Сабитов Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрына етәксе итеп тәғәйенләнде. Рөстәм Сабитов - Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Рәсәй Композиторҙар союзының почетлы ағзаһы.

✓БР Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығында адреслы программа сиктәрендә авария хәлендә тип танылған һәм һүтелергә тейешле йорттар исемлеге билдәләнде. Унда йәмғеһе 45 йорт инган. Авария хәлендәге иң күп йорттар быйыл Өфөлә һүтеләсәк - 19 йорт, Октябрьский ҡалаһында - ете йорт. Туймазыла иҫке алты бинала йәшәгән кешеләр яңы фатир аласаҡ. Исемлеккә Сибай менән Мәләүездәге объекттар ҙа ингән. Быйыл республика халҡы тәүге тапҡыр емерек өйҙәрҙән аҙ ҡатлы йорттарға күсәсәк. Әлегә был исемлектә ни бары ике йорт күрһәтелгән: береһе - Толбазыла, икенсеһе - Баймаҡта.

✓Башҡортостан вуздарының Ректорҙар советы күсмә ултырыштар үткәрергә ниәтләй, был саралар сиктәрендә республика халҡы менән осрашыуҙар планлаштырыла. Атап әйткәндә, вуз етәкселәре Бәләбәй, Дыуан, Дүртөйлә, Шишмә районДарына, Стәрлетамаҡ ҡалаһына барырға планлаштыра. Фекер алышыуҙарҙың төп темаһы - "Башҡортостан Республикаһында юғары белем биреү: традициялар, тәжрибә, инновациялар". Күсмә сессияларҙа Өфөлә белем алыусы студенттарҙың, шулай уҡ тиҙҙән вуздарға уҡырға инәсәк мәктәп уҡыусыларының ата-әсәләре ҡатнашасаҡ.

✓ *Былтыр ун балалар баҡсаһы төҙөкләндерелһә, быйыл тағы ла ун берен сафҡа индереү иҫәптә тотола. Йәш ғаиләләр өсөн хаҡтары юғары булмаған торлаҡ төҙөү мәсьәләһе көн үҙәгендә тора.*



ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ТӨП ЗАРЫБЫҘ...

## балалар баҡсалары

**Көнсығыш экономик-юридик гуманитар академияһының социологик лабораторияһы тарафынан Өфөлә мәктәпкәсә йәштәге балалары булған ата-әсәләр менән социологик һорау алыу ойошторолдо. Сарала 500 ата-әсә ҡатнашҡан.**

2011 йылда муниципаль балалар баҡсаларына йөрөүсе балалар һаны артып, 87,7 процент тәшкил иткән. Сағыштырыу өсөн: 2010 йылда был һан 83,3 процент булған. Шәхси баҡсаларға балаһын ата-әсәләрҙең 6,2 проценты, ә ғаилә баҡсаларына 0,4 проценты йөрөтә. Ваҡытлыса ойошторолған төркөмдәргә йөрөүсе балалар һаны 1,3 процент тәшкил иткән. Ҡалған 4,4 процент ата-әсә балаһын эш ваҡытында ҡалдырып тороуҙың бүтән юлдарын тапҡан.

Мәғлүмәттәрҙән күренеүенсә, мәктәпкәсә белем биреү учреждениеларына түләүле хеҙмәттәр индереү тәҡдимен 60 проценттан ашыу ҡатнашыусы хупланған. Балаларын төрлө яҡлап үҫтереү өсөн ата-әсәләр спорт, сит телдәрҙе өйрәнеү, музыкаль тәрбиә биреү һәм һынлы сәнғәт буйынса түләүле түңәрәктәргә йөрөтөүгә теләк белдергән. Ата-әсәләрҙең 50 проценттан күберәге балаларын мәктәпкәсә белем биреү учреждениеларынан тыш, төрлө үҙәктәрҙә, махсус мәктәптәрҙә шөғөлләндерә. Өҫтәмә белем биреүҙең сифаты ата-әсәләрҙең 70 процентын ҡәнәғәтләндерә.

Ә бына шәхси һәм ғаилә балалар баҡсалары селтәрен үҫтереү мәсьәләһенә ҡарата фекерҙәр төрлөсә: 40 процент - ыңғай, ҡалған күпселеге - ҡаршы һәм муниципаль учреждениеларға өҫтөнлөк бирә. Һорау алыуҙа ҡатнашыусыларҙың яртыһынан күберәге балаларын тулы график менән эшләгән төркөмдәргә бирергә теләк белдергәндә, кемдәрҙер ял көндәрендә генә, йәиһә башҡа һығылмалы графиклы төркөмдәрҙе ҡулайыраҡ күргән.

Мәктәпкәсә белем биреү учреждениеларында ойошторолған туҡланыуҙың сифаты һорау алыуҙа ҡатнашыусы ата-әсәләрҙең 80 процентының күңеленә хуш килгән. Етешһеҙлектәрҙән ассортимент ярлылығы аталған. Шулай ҙа туҡланыу хаҡтарының юғары булыуына дәғүә белдереүселәр һаны күпкә кәмегән.

Сарала ҡатнашыусыларҙың 56 проценты алда әйтелгән учреждениеларҙа ойошторолған медицина хеҙмәтен тейешле кимәлдә тип баһалаған, уларҙың 27 проценты медицина хеҙмәткәрҙәре булмауын, 20 проценттан артығы медицина кабинетының насар йыһазландырылған булыуын билдәләгән. Дөйөм алғанда, балалар баҡсаларында күрһәтелгән медицина ярҙамы менән респонденттарҙың 70 проценты ҡәнәғәт. Ата-әсәләрҙең күпселеге балалар баҡсаларында һауыҡтырыу физкультураһы, массаж, сыныҡтырыу, иммунизацияны һәм башҡа һаулыҡ һаҡлау технологияларын индерергә тәҡдим иткән.

Балалар баҡсаларының матди-техник яҡтан тәьмин ителеше менән 66 процент респондент ҡәнәғәт. Һорау алыуҙа ҡатнашыусыларҙың яртыһынан күберәге финанс ярҙамының уйынсыҡтар, фәнни-методик ҡулланмалар һатып алыуға, бинала капиталь ремонт үткәреүгә, мебелдәрҙе яңыртыуға, балалар майҙансыҡтарын, верандаларҙы яңынан йыһазландырыуға, бүлмәләрҙә косметик ремонт эшләүгә тотонолорға тейешлеген билдәләгән.

ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ҠЫШ БАБАЙ БАЛАЛАРЫНА...

## тантана ойошторолдо

**Яңы йыл -теләктәрҙе тормошҡа ашырыусы, көтөлмәгән яҡшылыҡтар килтереүсе, кемдәргәлер тормошон өр-яңынан ҡороу мөмкинлеге биреүсе, яңы ишектәр асыусы, мөғжизәләргә тағы бер ҡабат инандырыусы байрам. Ә кеше өсөн иң ҙур мөғжизә нимә? Әлбиттә, сабый бала тыуыуы!**

Баш ҡалалағы ошо мөғжизәгә эйә булыусы ун туғыҙ ғаилә өсөн Яңы йыл төнө мәңгелеккә иҫтә ҡаласаҡ. Етмәһә, уларҙың шатлығы баш ҡала кимәлендә, Өфө ҡала округы хакимиәте бинаһында тантаналы билдәләп үтелде. Был йыйылдың тәүге көнөндә донъяға килеүсе балаларҙың ата-әсәләре 8 февраль көндө Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов ҡулынан бүләктәр алды, тәбрикләнде.

Инде ун өсөнсө йыл рәттән уҙғарылған был тантанаға саҡырылған ғаиләләрҙең барыһы ла килде. Һәр ҡунаҡты хакимиәт бинаһының ишек төбөнән үк ҡаршы алдылар. Мөләйем ҡыҙҙар уларҙы тантана уҙасаҡ залға оҙатып ҡуйып, алғы рәттәрҙән урындар тәҡдим итте. Ҡыуаныстары йөҙҙәренә сыҡҡан ғаилә ағзалары ҙур кинәнес менән ҡулдарына тотторолған бүләктәрҙе, сәскә гөлләмәләрен, сағыу итеп биҙәлгән залды байҡай. Улар араһында тәүге сабыйын ҡулдарына тотоп килеүсе йәш ғаиләләр ҙә, инде икенсе бәпестәрен һөйөүселәр ҙә бар. Яҡындарына терәк булып, ғаиләләрҙең шатлығын уртаҡлашыр өсөн килгән олатай-өләсәйҙәр, ғаилә дуҫтары, туғандары ла залдан урын алды.

Бына тантанаға килеүсе ғаиләләрҙе ҡотлар өсөн Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов һүҙ алды:

- Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов 2012 йылды Бәхетле бала саҡ һәм ғаилә ҡиммәттәрен нығытыу йылы, тип иғлан итте, - тине Ирек Ишмөхәмәт улы. - Былай ҙа беҙҙең тарафтан баш ҡалала сабыйҙар күберәк булһын, яҡшы шарттарҙа үҫһен, тәрбиәләнһен, белем алһын өсөн хәлдән килгәндең барыһы ла эшләнә. Әммә быйылғы йылда иғтибар тағы ла артасаҡ. Мәҫәлән, былтыр ун балалар баҡсаһы төҙөкләндерелһә, быйыл тағы ла ун берен сафҡа индереү иҫәптә тотола. Йәш ғаиләләр өсөн хаҡтары юғары булмаған торлаҡ төҙөү мәсьәләһе көн үҙәгендә тора, уны тормошҡа ашырыу өсөн ҡала бюджетынан өҫтәмә аҡса бүлеүҙе күҙ уңында тотоп торабыҙ...

Ирек Ишмөхәмәт улы Яңы йылдың тәүге минуттарында донъяға килгән һәр сабыйға тыуыу тураһында иҫтәлекле танытма, аҡсалата ярҙам һәм бүләк тапшырҙы. Ата-әсәләрҙе тәбрикләп, төрлө конкурстар лауреаттары булған балалар йыр башҡарҙы. Ошо сарандың аҙағында икенсе сабыйҙарын ҡулдарына алған Фәнзилә һәм Альберт Иҫәнғоловтар ғаиләһе менән һөйләшеп алдыҡ.

- Яңы йылда иремде ҡыуандырып, улыбыҙ донъяға килде. Улыбыҙға телевизорҙан ишетеп ҡалып, оҡшатып, Данияр тигән исем ҡуштыҡ. Апайы Әдиләгә иптәш, беҙгә терәк булыр, тип өмөтләнәбеҙ, - тине Фәнзилә Минислам ҡыҙы. - Йәш ғаиләнең хәл итер проблемалары етерлек инде ул. Мин шәфҡәт туташы, ирем төҙөлөштә эшләй, шөкөр, бер бүлмәле фатирыбыҙ бар. Фатирыбыҙҙы киңәйтеү хыялыбыҙ, моғайын, "Әсәлек капиталы" ярҙамында тормошҡа ашыр, тип өмөт бағлап торабыҙ. Күҙ терәп торған ике бөртөк балабыҙҙы оло һүҙен ололап, кесе һүҙенә ҡолаҡ һалып, матди байлыҡ һәм уңайлыҡтарҙы ғына түгел, рухи ҡиммәттәрҙе лә һанларлыҡ итеп тәрбиәләргә тырышасаҡбыҙ. Бөгөнгө байрамды ойоштороғандары өсөн Өфө ҡала округы хакимиәтенә ҙур рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Кешегә күп тә кәрәкмәй, бер йылы һүҙ ҙә етә, тиҙәр. Байрамға килгән һәр ғаилә ҡала тормошонда үҙенең дә урыны барлығына, сабыйҙары киләсәгенә дәүләттең битараф булмауына инанып, күтәренке күңел менән таралышты. Улар инде бынан һуң Яңы йылды ябай байрам итеп ҡабул итмәйәсәк, быйылғы мөғжизә лә, ошоға бәйле әлеге тантана ла ғүмер буйы уларҙың теленән төшмәйәсәк.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**



Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостан умартасылары республикала бөтә Рәсәй умартасылар конкурсын үткәреү инициативаһы менән сығыш яһаны. "Был конкурс мотлаҡ Башҡортостанда үтергә тейеш", - тип иҫәпләй Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге директоры Әмир Ишемғолов. Дөйөм алғанда тармаҡ өсөн үткән йыл уңышлы булған. Статистика мәғлүмәттәренә ярашлы, республика аграрийҙары 5300 килограмдан ашыу тауар балы алған. Башҡортостан бренды булған продукция күләмдәренең артыуына дәүләт ярҙамы саралары булышлыҡ иткән. "Былтыр республика умартасылығы тарихында тәүге тапҡыр умартасылар 24 млн һумдан ашыу субсидиялар алды", - тип билдәләне Әмир Ишемғолов.

✓Башҡортостанда 23 февраль, 8, 9 һәм 10 март ял көндәре булып тора, тип хәбәр иттеләр республиканың Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығынан.

✓"Буласаҡ финансист" конкурсы Башҡортостанда 2012 йылдың мартында "Йәштәр фәне көндәре" республика фестивале сиктәрендә үтәсәк. Бындай иктисади бәйге тәүгә үткәрелә. Бәйгелә ҡатнашыуға төрлө уҡыу йорттарынан мәктәп уҡыусылары һәм студенттар саҡырыла. Бының өсөн Йәштәр финанс үҙәге сайтында (www.mfc-ufa.ru) теркәлеү мотлаҡ.

✓Өфөнөң Киров районында М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты көндәре үтә. Сара сиктәрендә университет вәкилдәре уҡытыусылар, уҡыусылар һәм уларҙың ата-әсәләре менән осраша. Был - социаль акция, сөнки уҡытыусылар һәм уҡыусылар өсөн дәрестәр, Берҙәм дәүләт имтиханына һәм дәүләт (йомғаҡлау) аттестацияһына әҙерлек, юғары уҡыу йортона уҡырға инеү мәсьәләләре буйынса квалификациялы консультациялар бушлай үткәрелә.

✓Өфөлә тәбиғәтте һаҡлау буйынса "Ҡағыҙға - икенсе ғүмер" балалар акцияһының сираттағы этабы старт алды. Уның ойоштороусыһы булып Башҡортостандың "Тәбиғәт" дәүләт унитар предприятиеһы сығыш яһай. Был юлы баш ҡалабыҙҙың Совет районы уҡыусылары акцияла ҡатнашасаҡ. Быға тиклем акция Октябрь, Ленин һәм Дим райондарында үткәрелде һәм 43 тоннаға яҡын макулатура йыйылды. Был 215 ағасты ҡотҡарыуға тиң.

*✓ 4 йәштән өлкәнерәк булған бала янындағы ғаилә ағзаһына шулай уҡ түләүһеҙ койка-урын һәм туҡланыу рөхсәт ителә, әгәр уның ниндәйҙер "медицина күрһәткестәре" булған хәлдә.*

*ИҒТИБАР!*

**Республика башҡорт лицей-интернаты йыл һайын март-апрель айында математика буйынса "Матлет" олимпиадаһы үткәрә. Быйыл уның ситтән тороп ҡатнашыу туры 15 мартҡа тиклем дауам итәсәк.**
**Олимпиада хәрәкәтендә лайыҡлы урын алған был сарала республика мәктәптәрендә белем алыусы 6-сы синыф уҡыусылары ҡатнаша ала. Эштәрҙе рус телендә, ябай шаҡмаҡ дәфтәрҙә башҡарырға. Дәфтәрҙең тышына баҫма хәрефтәр менән уҡыусының фамилияһы яҙыла. Дәфтәрҙең беренсе битенә баҫма хәрефтәр менән: фамилия, исем, атаһының исеме; мәктәптең һаны йәки уның юридик исеме; мәктәптең тулы адресы, индексы, телефоны (код менән); өйҙөң тулы адресы, телефоны, кеҫә телефоны; математика уҡытыусыһының фамилияһы, исеме, атаһының исеме, e-mail; мәктәп директорының фамилияһы, исеме, атаһының исеме, уның ҡултамғаһы, мәктәптең мисәте; уҡыусының йәки уның ата-әсәһенең e-mail-лы яҙыла.**

# "МАТЛЕТ" БӘЙГЕГӘ САҠЫРА

## Беренсе тур мәсьәләләре:

1. Есть 2012 конфет, пронумерованных от 1 до 2012. В какое наибольшее количество ваз можно положить эти конфеты так, чтобы суммы номеров конфет в каждой из ваз было попарно равны?

2. Полтора литра минеральной воды в полтора раз дешевле, чем поллитра сока. Сколько рублей стоит литр минеральной воды, если литр сока стоит 72 рубля?

3. В ряд выписаны цифры: 1234567890. Вставим между ними (в некоторых местах) знаки "+" так, чтобы в сумме получилось трехзначное число. Какое наибольшее число может получиться? (Ответ подтвердить примером)

4. У одного человека было 77 тысяч рублей. Перед смертью он сказал своей беременной жене: "Если родится мальчик, то он должен получить денег в 2 раза больше тебя, а если девочка, то в 2 раза меньше тебя". У нее родилась двойня: мальчик и девочка. Сколько рублей получит мальчик?

5. Из А в Б и из Б в А одновременно выехали навстречу друг другу два грузовика. Ехали они по одной и той же дороге с постоянными скоростями и встретились в полдень, но не остановились, а каждый продолжал свой путь с той же скоростью. Первый грузовик прибыл в Б в 4 часа дня, а второй приехал в А в 9 часов вечера. Сколько часов ехали грузовики до того, как встретились?

6. Два лыжника шли с постоянной скоростью 6 км/ч на расстоянии от 200 метров друг от друга. Потом они стали подниматься в горку, где их скорость упала до 4 км/ч. Потом оба лыжника съехали с горки со скоростью 7 км/ч и попали в глубокий снег, где их скорость снизилась до 3 км/ч. Каким (в метрах) стало расстояние между ними?

7. Как посадить 9 яблонь в 10 рядов по 3 яблони в каждом? (сажать ряды из 4 и более яблонь не разрешается)

8. Хозяйка испекла для гостей пирог. К ней может прийти либо 11, либо 12 человек. На какое наименьшее число кусков ей нужно заранее разрезать пирог так, чтобы его можно было поделить поровну как между 11, так и между 12 гостями?



9. В комнате находятся двенадцать человек; некоторые из них (по меньшей мере один) всегда говорят правду, а остальные всегда лгут. На каждом надета черная или белая шапка. И каждый уверяет, что среди остальных одиннадцати ровно четверо носят черные шапки. Сколько лжецов может быть в комнате? (укажите все возможные варианты)

10. На полу коридора длиной 120 метров лежат 25 ковровых дорожек общей длиной 600 метров. Каково максимально возможное число кусков пола, не застеленных дорожками?

11. Имеется 2011 мешочков с 1, 2, 3, ..., 2010 и 2011 монетами. Каждый день разрешается взять из одного или нескольких мешочков по одинаковому числу монет. За какое минимальное число дней можно взять все монеты?

12. Решите ребус $(Р \text{х} Б+Л+И)^{Т}$=МАТЛЕТ (как обычно: одинаковым буквам соответсвуют одинаковые цифры, разным - разные).

**Яуаптарҙы Өфө ҡалаһы, Ҡулса урамы (Кольцевая), 74, 450032 адресына 15 мартҡа тиклем ебәрергә. Икенсе тур 22 апрелдә лицейҙа үтәсәк. Унда иң белемле 5 ҡыҙ һәм егет аҡсалата призға лайыҡ буласаҡ. Уларҙың уҡытыусыларына ла бүләктәр ҡаралған.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

## ТАБИПТЫ ҮҘЕҢ ҺАЙЛА

**Пациенттарҙың яңы йылдан ҡайһы бер яңы хоҡуҡтары һәм бурыстары барлыҡҡа килде.**

"Рәсәй Федерацияһында граждандарҙың һаулығын һаҡлау нигеҙҙәре тураһында" Федераль закондың 33-сө статьяһына ярашлы, паспортта теркәлгән адресҡа ҡарамайынса, йәшәгән, эшләгән йәки уҡыған урын буйынса дауалау учреждениеһын һәр кемдең үҙенә һайлау хоҡуғы бирелә.

Яңы поликлиникаға теркәлеү өсөн баш табип исеменә ғариза яҙырға кәрәк. Уның өлгөһө түбәндәгесә булырға мөмкин: пациенттың медицина ойошмаһын һайлау хоҡуғын ғәмәлгә ашырыу буйынса "Рәсәй Федерацияһында граждандарҙың һаулығын һаҡлау нигеҙҙәре тураһында" Федераль закондың 21-се статьяһына ярашлы, мине һеҙҙең дауалау учреждениеһына теркәүегеҙҙе һорайым. Ләкин шуны иҫтә тотоу мөһим: законда пациенттың һайлау хоҡуғы табип ризалығын иҫәпкә алыу юлы менән генә ғәмәлгә ашырылыуы хаҡында әйтелә. Пациенттар һаны медицина хеҙмәткәрҙәренә йөкмәтелгән норманан артып киткән осраҡта граждандарҙы теге йәки был поликлиникаға теркәүҙән баш тартасаҡтар.

Үҙегеҙ һайлаған поликлиниканың баш табибына ғариза менән бергә паспорт һәм мотлаҡ медицина страховкаһы полисы (былтыр май айынан медполистың яңы өлгөһө сыҡты) кәрәк. Шул уҡ ваҡытта элек алған полистар ҙа ғәмәлдә ҡала.

## УЙЛАНЫРҒА ВАҠЫТ БАР

**Табиптар билдәләүенсә, яңы йылдың оҙаҡҡа һуҙылған дәртле байрамдарынан һуң, ғәҙәттә, көтөлмәгән ауырға ҡалыу осраҡтарын өҙөргә теләүсе пациенткалар һаны арта. Яңы закон уларҙың ниәтен тормошҡа ашырыуҙы бер аҙ ҡатмарлаштырасаҡ.**

Закон сығарыусылар бының менән ҡатын-ҡыҙға үҙ хәленә уйланыбыраҡ ҡарарға мөмкинлек тыуыр һәм улар аборт эшләтеү ниәтенән кире ҡайтыр, тигән өмөттәләр. Һәр хәлдә, бына шундай сикләүҙәр индерелде был йәһәттән:

1. 7-11 аҙналыҡ ауырлылыҡ осрағында "бер аҙна тынлыҡ" булдырыла, йәғни табип пациентҡа мөрәжәғәт иткән көндән һуң бер аҙна ваҡыт үткәс кенә аборт эшләй ала.

2. 7 аҙнаға тиклемге йөклөлөк осрағында абортты медикаментоз ысул менән ғәмәлгә ашырыу мөмкин булғанда операцияға тиклемге "тәнәфес" ваҡыты - 48 сәғәт.

3. 11-12 аҙнаны тәшкил иткән һуң осраҡтарҙа ауырлы ҡатынға һәм табипҡа шулай уҡ уйлау өсөн 48 сәғәт ваҡыт бирелә (бынан да һуңыраҡ осраҡтарҙа баланы төшөртөү фәҡәт социаль һәм медицина күрһәткестәре буйынса ғәмәлгә ашырыла).

## САБЫЙ МЕНӘН - ДАУАХАНАҒА

**Яңы ҡағиҙәләр буйынса 4 йәшкә тиклемге бала менән больницала уның атаһы йәки ғаиләнең башҡа ағзаһы түләүһеҙ ята ала. Бала янында булған өлкән кеше айырым карауат һәм туҡланыу менән тәьмин ителә.**

Шул уҡ ваҡытта, әгәр ҙә балаға 4 йәш тә 1, 2 йәки 5 ай икән һәм ул өлкән кеше ҡарауына мохтаж булһа, түләргә тура киләсәкме, тигән ризаһыҙлыҡтар ҙа булып алды. Ахыр сиктә закон сығарыусылар шундай ҡағиҙәне раҫланы: 4 йәштән өлкәнерәк булған бала янындағы ғаилә ағзаһына шулай уҡ түләүһеҙ койка-урын һәм туҡланыу рөхсәт ителә, әгәр уның ниндәйҙер "медицина күрһәткестәре" булған хәлдә.

Кәңәш: әгәр табиптар яңы ҡағиҙәләр менән ныҡлап танышып өлгөрмәгән булһа һәм, урын юҡлыҡҡа һылтанып, һеҙҙән түләү талап итһә йәки сабыйығыҙ янында булырға рөхсәт итмәһә һ.б., дауалау учреждениеһының баш табибына йәки бүлексә мөдиренә мөрәжәғәт итегеҙ һәм әлеге "Рәсәй Федерацияһында граждандарҙың һаулығын һаҡлау нигеҙҙәре тураһында" Федераль закондың 51-се статьяһына һылтанығыҙ.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



## Ҡан баҫымы юғары булғанда

Берәр ҡалаҡ бал, сөгөлдөр һуты, кишер һуты, 36 сәғәт төнәтелгән 1 стакан керән (хрен) һуты, 1 лимон һутын бергә ҡушырға. Көнөнә өс тапҡыр, ашар алдынан 1 сәғәт элек 1-әр ҡалаҡлап эсергә. Дауаланыу ай ярым булырға тейеш.

## Йөрәк тибеше тигеҙ булмаһа

Ярты килограмм лимонды ваҡ ҡына турап, 1 стакан бал, төйөлгән 20 өрөк төшө менән болғатырға, йылы урында (ҡараңғы булһын) 3 көн төнәтергә һәм иртәле-кисле 1-әр ҡалаҡ ҡабул итергә.

## Ҡолаҡ шаулауы

Ҡолаҡ гел шаулап торһа ла, ҡыйын була. Бының өсөн шундай дауа бар:

1 ус кипкән әнисте (укроп) ярты литр һыуға һалып, термоста ярты сәғәт төнәтергә, һөҙөргә, көнөнә 3 тапҡыр, ашар алдынан ярты сәғәт алда яртышар стакан эсергә.

Ҡолаҡ шаулаған ваҡытта баш та ауыртһа, башты йөн билбау менән ҡыҫып бәйләргә кәрәк.

## Һеңер тартышҡанда

Яңылыш баҫҡанда һеңер тартылыусан була, ҙур имгәнеү булмаһа ла, көслө ауыртыу, шешеү ҙә барлыҡҡа килә.

❖ Бер йомортҡа һарыһына 1 балғалаҡ скипидар һалып, күперткәнсе болғатырға, 1 ҡалаҡ алма һеркәһе өҫтәргә. Шуны ауыртҡан ергә һөртөп, йөн яулыҡ менән урарға кәрәк. Дауаны 3-4 тапҡыр ҡабатлағас та, ауыртыу баҫыла.

❖ 1 ҡалаҡ балға аҙ ғына аш һеркәһе ҡушып болғатырға ла, шуны кәбеҫтә япрағына һалып, ауыртҡан ергә ҡуйырға, йылы әйбер менән урарға. Ауыртыу бер төн эсендә баҫыла.

## Ашҡаҙан ауырыуына дауа

Бер киҫәк аҡ икмәкте 1 балғалаҡ ауыл майында ҡыҙҙырып һыуытҡас, ярты сәғәткә һыулы стаканға һалып ҡуйырға, килеп сыҡҡан төнәтмәне көнөнә 3-4 мәртәбә эсергә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

ҺАБАҠТАР



# ҒҮМЕР БУЙЫ ӨЙРӘНӘБЕҘ

## Шөкөрана ҡылам тормошҡа

**Йәшәй-йәшәй шуға инанаһың - тормошта бер нәмә лә осраҡлы түгел икән. Теге йәки был хәлгә, күренешкә аптырап, уйлана башлаһаң, уның тамырҙары тәрән үк төшөп китә, үҙеңдән-үҙең асыш яһайһың, һығымталарға киләһең. Был һәр кемгә хас күренеш. Халыҡ педагогикаһы тигән нәмә лә шулай барлыҡҡа килгәндер, күрәһең. Ә тәрбиә бер ваҡытта ла артыҡ булмай, кеше ғүмере буйы уҡыу, өйрәнеү, фекер төйнәү, асыш яһау өҫтөндә. Донъя шуныһы менән дә мауыҡтырғыстыр инде...**

Тамам аҡса ҡолона әйләнгән кешеләрҙең күңелдәре ҡатып, үҙҙәре роботҡа әйләнгән һымаҡ. Донъяға һумдар аша ғына ҡараған кешеләрҙең күҙе был тормоштоң тәүматурлығын, асылын күреүҙән мәхрүм. Ә тормош шул тиклем матур. Ана, бөгөн ҡырау төшкән. Шул ҡырауҙы ҡыштырлата баҫып, тыштан сығып утын алып индем. Мейесемдә гөрөлдәп янған ут тауышы бер моң кеүек ишетелә. Ул мине дәртләндереп ебәрҙе, хатта ҡушылып көйләй башланым.

Тәҙрәнән тышҡа баҡтым. Ай, донъяның хозурлығы! Ағастарға ҡунған бәҫтәр көмөш төҫкә инеп баҙрай. Ҡояш нурында гәлсәр кеүек йымылдайҙар.

Шөкөр итә белеү - ҙур нәмә, тиҙәр. Эйе, шулай икәненә ышандым. Шөкөр итергә өйрәнгәс, күңелде юҡ-юҡта кимергеләгән көнләшеү тигән нәмәнән ҡотола төштөм. Шөкөр итергә өйрәнгәс, донъям бермә-бер яҡтырып, киңәйеп китте. Күңелем дә сафлана, иркенәйә төштө.

Һәр тыуған имен көнгә ҡыуанам. Баламдың: "Әсәй, хәлең нисек?"- тип көнөнә әллә нисә шылтыратып, өҙөлөп тороуынан ҡанатланам. Әсәйемдең: "Балам, хәлдәрең нисек?"- тип әленән-әле шылтыратып алыуына шөкөрана ҡылам. Уларҙың һәр икеһенә, шулай уҡ туғандарыма көнөнә әллә нисә тапҡыр һаулыҡ, бәхет, шатлыҡтар, именлек теләйем.

Баҡтиһәң, был донъяла аҡсаң иҫ китмәле күп булмаһа ла, бик ныҡ бәхетле булыр сәбәптәр бихисап икән. Хоҙайҙың биргәндәренә шөкөрана ҡылып, үҙең дә ҡыймылдаһаң, бәхет артыҡ оҙаҡ көттөрмәйҙер һымаҡ... Үҙеңде бәхетле итеп тоя, һәр нәмәнән шатлыҡ, кинәнес таба белеү ҙә мөһим икән донъяла.

Ә үтә байҙарҙың, ғәҙәттә, күңеле уйлы, йөҙө борсоулы. Сөнки теге байлыҡты нисек тә юғалтмаҫҡа, арттырырға, кәметмәҫкә кәрәк. Был ауыр йөктәре иңдәрен дә, күңелдәрен дә баҫа. Шуға улар тамсы тауышынан да, мейестәге ут тауышынан да йәм таба белмәй, быға ваҡыттары ла юҡ. Ул тауыштарҙы ишетмәйҙәр ҙә... Күңел һуҡырайыуы күҙ һуҡырайыуҙан күпкә ҡурҡынысыраҡ.

Күҙҙәре бөтөнләй күрмәһә лә, үҙ йүнен үҙе күреп, хатта тоҫмал менән билмәндәр эшләп ашап ултырған бер инәйҙе беләм. Шулай уҡ бөтә һаны теүәл, үҙе айыу тотоп ауыҙлыҡларҙай бәғзе бер ир-егеттәрҙең ябай ғына ҡаршылыҡ алдында ла баҙап ҡалғанын күргәнем бар. Хатта бәләкәй генә һынауҙы ла күтәрә алмай, үҙ теләктәре менән донъянан киткәндәре лә юҡ түгел. Ә теге инәйгә табиптар әллә ҡасан уҡ "хөкөм" сығарған - күҙҙәре бүтән бер ваҡытта ла күрмәйәсәк. Ләкин, дөм ҡараңғылыҡта йәшәһә лә, яҡтылыҡҡа өмөтөн юймаған... Әҙәм балаһын шөкөр итә белеү һәм өмөт йәшәтә, күңел матурлығы, сабырлыҡ бөйөк һәм көслө итә, ахыры...

**Таңһылыу БАҺАУЕТДИНОВА.**
**(Дауамы бар).**

ТӘБИҒӘТ МӨҒЖИЗӘЛӘРЕ

**Әллә Бөрйән урмандарында ҡош-ҡорт ҡалмаған инде, бына әле машинала нисәмә саҡрым юл үттек, исмаһам, бер ҡош, бер йәнлек осраһасы, тип ихлас көрһөнөп ҡуя ҡайһы бер ситтән килеүселәр. Улар ҡыҙыҡ ҡына фекер йөрөтә шул. Йәнәһе лә, улар урман юлы буйлап машинала елдергәндә йәнлектәрҙең ҡайһы берҙәре шаптырлап урманға ҡасырға, ҡайһылары, киреһенсә, ҡала кешеләрен күреп ҡалайым, тигәндәй, югереп килеп сығырға тейеш. Йә булмаһа, ана, талғын ғына күтәрелеп һуйыр осоп китә, ағас ботағында ултырған сел-ҡорҙар күҙ ҡыҫып ултырып ҡала, юл ситендә кемуҙарҙан ҡуяндар ағас кимерә, бүре яй ғына урманға инеп бара, һәр олонда тиерлек тумыртҡалар тырылдығын сыға. Айыу китеп... әй, ул йоҡлай бит әле. Хөрриәт, урман тулы йәнлек икән дәһа Бөрйәндә. Ошолай уйлай һәм ошоларҙы күрергә теләй сит тараф кешеһе.**

# ҠАРАБАШ ТУРҒАЙ...

## тыуған төйәгенә иң тоғро ҡош



Әммә...Урманды зоопарк һымаҡ күҙ алдына килтерергә ярамай. Ысын тәбиғәттә һәр йән эйәһенә һәр ваҡыт уяу, йылғыр, йүнсел, сос, һиҙгер, хатта хәйләкәр булыу кәрәк. Һәр үткән машинаға югереп сыға башлаһаң, Аллам һаҡлаһын, атып та йығырҙар, һалып та алырҙар.

Йәнлек-ҡоштар тормошон аңлау өсөн аяҡтарға саңғы кейеп, урманға юлланайыҡ әле. Тып-тын урман ҡаршы ала һине. Бына, ниһайәт, ниндәйҙер ҡош тауышы ҡолаҡҡа салынып ҡалғандай булды түгелме... Эйе, шығыр-шығыр килгән саңғы тауышын тәү башлап ишеткән ҡош башҡаларын шулай иҫкәртә һала. Хәүеф барлығын белгән ҡоштар, бар эштәрен ташлап, бер аҙға тынып ҡала. Уларҙы тынысландырыр өсөн беҙгә лә ағас олонона һөйәлергә ваҡыттыр. Шығырлап килгән тауыш башҡа ишетелмәгәс, ҡоштар бер аҙ тыныслана төшә. Бер аҙҙан урман тағы йәнләнә төшкәндәй була. Ара-тирә ҡоштар тауыш бирә башлай. Күп тә үтмәй, урман үҙ тормошо менән йәшәп алып китә.

Бына эргәгә генә бер ҡошсоҡ килеп ултырҙы. Ҡарабаш турғай ул. Ултырҙы тип тә әйтеп булмай әле. Был ҡошсоҡ бер урында бер ҙә сыҙап ултыра алмай. Олон буйлап бер менә, бер төшә, ботаҡтарға ултыра, баштүбән аҫылынып тора. Шулай аҙыҡ эҙләй ул. Йәй көнө аҙыҡты ағас олонона йәшереп китергә ярата ул. Бына әле лә шуны эҙләп йөрөүе. Үҙе йәшергән аҙыҡты таба алмаһа, насип итһә, иптәшенекен табыр. Барыбер бергә ашарға бит. Йәй көнө үк бер төркөм ҡошсоҡтар урманда үҙ биләмәһен булдыра, шунда аҙыҡ туплай, шул биләмәлә ҡыш көнө туйына.

Ишғәле Нурғәлиевтың "Ҡарабаш турғай" исемле әҫәре иҫкә килеп төштө. Аяуһыҙ заманға тура килгән яҙмышын автор бушҡа ғына ошо ҡошсоҡ менән сағыштырмағандыр. "Ҡарабаш турғай кеүек (мәҙәни) ашау тәртибен белгән ҡошто күргәнем юҡ. Нисек кенә күмәк булмаһындар, бирелгән аҙыҡты сиратлап килеп алалар, икенсе урында иркенләп ашайҙар. Ҡарабаш турғай тамаҡ ҡәҙерен белеп ашаған кешегә оҡшаған", - тип яҙа ул.

Иҫләүҙәргә бирелеп торған арала ҡарабаш турғай үҙ төркөмөнә ҡушылып осоп та китте. Ошо төркөм әле үҙ биләмәһен байҡап сығыу, уға башҡаларҙы индермәү эштәре менән мәшғүл.

Ҡарабаш турғай беҙгә бәләкәйҙән таныш. Бына әле халыҡ мәҡәле иҫкә төшә: "Һауалағы торнаға ышанып, ҡулыңдағы сәпсекте (ҡарабаш турғайҙы) ысҡындырма". Мәғәнәһе аңлашыла, буғай.

Ҡарабаш турғай, ҡарындыҡты (тәҙрәне) ҡуймай,
һин дә егет, мин дә егет, кәләш алып булмай...-

тип таҡмаҡлай торғайнылар элек. Һуңғы ике юл ир балаға кесе йәштән үк ғаилә ҡороу кәрәклеген иҫкәртеп тора, буғай. Тәүге юлдар беҙҙең геройға ҡағыла. Ҡарабаш турғайҙы өй эргәһенә аҙыҡ табыу мәшәҡәттәре алып килә. Борон, быяла тәҙрә булмаған осорҙа, уны алыштырған ҡарындыҡты суҡып, бер аҙ тамаҡ ялғап алғандыр инде. Хәҙер ҙә килә улар өй эргәһенә. Һыуыҡ ҡыш көндәрендә, бигерәк тә селлә осоронда улар кеше ярҙамына мохтаж булып китәләр. Асыҡ ҡалған соланға инеп, аҙыҡ эҙләп йөрөгән мәлдәрендә йыш ҡына осратабыҙ беҙ уларҙы. Бындай ауыр саҡта беҙ тағараҡтар элеп, унда ем һалып, ҡышлаусы ҡоштарға ҙур ярҙам күрһәтәбеҙ.

Бына әле февраль айы тыуҙы. Тап ошо ваҡыт ҡарабаш турғайҙар ишен эҙләй башлай. Сама менән ай урталарынан башлап йырлап таныша улар. Үҙ иштәрен тапҡан ҡошсоҡтар оя ҡора башлай. Бер аҙна эсендә оя төҙөлөп тә бөтә. Апрель айында инә турғай йомортҡа баҫырға ултыра. Ике аҙна самаһы баҫа ул. Яңы тыуған балаларын әсәһе үҙ йылыһы менән йылытып ултырырға мәжбүр. Был осор уларҙы "атай" ашата. Яҡынса аҙна самаһы үткәс, балаларын икәүләп ҡарай башлайҙар. Уларға аҙыҡ бик күп кәрәк. Көнөнә 400 тапҡырлап ашай был ҡошсоҡтар. Атай менән әсәй балаларын өс аҙналыҡ булғансы үҙ ҡарамағынан ташламай бына шулай туҡтауһыҙ ашата. Ғаилә ишле генә. Бер баҫҡанда 15-кә хәтлем балалары була. Июнь айында тағы бер оя ҡошсоҡ баҫып сығаралар. Шуға күрә ҡарабаш турғайҙар бик тиҙ үрсеп китә. Ҡышҡы осорҙа төрлө зарарлы бөжәктәрҙе ашап, урманға файҙа килтерәләр.

Ҡарабаш турғайҙар "йырсы" ла улар. Уларҙың "репертуар"ында 40-ҡа яҡын көй иҫәпләнә икән! Шулай ҙа беҙ уларҙың һайрауына артыҡ иғтибар итмәйбеҙ, буғай. Был турала Мостай Кәрим үҙ шиғырында иҫкә алып китә.

... Йырлап ебәрҙе был, осоп ҡунғас тәҙрә ҡырына.

Эй йырлай ҙа! Ләкин бисараның ҡолаҡ һалыусы юҡ йырына.

Минең уйымса, ауыр ҡыштың (ауыр тормоштоң) бар михнәттәрен беҙҙең менән бергә үткәргән ҡарабаш турғайға (ябай кешеләргә) иғтибар итмәйбеҙ, тип әйтмәксе була шағир. Унық фекеренсә, нишләптер, һыуыҡ ҡышты йылы яҡта үткәргән сыйырсыҡ һайрап ебәреү менән беҙ уның менән һоҡлана башлайбыҙ.

Ә бер аҙҙан йылы елдәр иҫте, яландарҙы ҡарҙан ҡотҡарып.

...Әҙер яҙға килгән сыйырсыҡты, кәпәс сөйөп, шул саҡ ҡотлаһыҡ...

**Әғләм ШӘРИПОВ.**
**Бөрйән районы.**

✓ *Ябай ауыл егеттәренән ҡыйыу һәм оҫта һуғышсылар тәрбиәләй алыу ғына ла үҙе бер батырлыҡҡа тиң эш. Ә бит был егеттәр араһынан 78 Советтар Союзы Геройы сыҡҡан!*

ЙӘШӘГӘН БИТ БАТЫРҘАР!

# ГЕНЕРАЛ ШАЙМОРАТОВ

**Кем ул Шайморатов? Уның батырлыҡтары тураһында беләбеҙме? Республика Хәрби дан музейының ғилми хеҙмәткәре, Башҡортостан Республикаһының Журналистар союзы ағзаһы, БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Фәрит Вәхитовтан ошо һорауға яуап биреүен үтендек. Ул беҙгә түбәндәгеләрҙе һөйләне:**



- 1941 йылдың 25 декабрендә 112-се башҡорт кавалерия дивизияһы менән идара итеү йөкмәтелгәс, Миңлеғәле Минһаж улы тәүҙән үк шуға иғтибар итә: дивизия һалдаттарының күпселеген бер ниндәй хәрби әҙерлеге булмаған крәҫтиәндәр һәм эшселәр тәшкил итә. Офицерҙар араһында ла кавалеристар бик аҙ, күбеһе пехотанан күсерелгән, атта сабыу, ҡылыс һелтәү тигән нәмә улар өсөн бөтөнләй ят шөғөл. Шуға ла ул иң тәүҙә офицерҙарҙан һалдаттарҙы кавалерия алымдарына яҡшылап өйрәтеүҙе, кисекмәҫтән күнекмәләр эшләй башлауҙы талап итә. Ябай ауыл егеттәренән ҡыйыу һәм оҫта һуғышсылар тәрбиәләй алыу ғына ла үҙе бер батырлыҡҡа тиң эш. Ә бит был егеттәр араһынан 78 Советтар Союзы Геройы сыҡҡан!

112-се кавалерия дивизияһы ойошторолғас, ул 8-се кавалерия корпусына ҡушыла. Ошо корпус составында шайморатовсылар Сталинград өсөн барған ҡаты бәрелештәрҙә ҡатнаша. Командир үҙен был һуғышта оҫта стратег, хәйләкәр хәрби начальник итеп күрһәтә. 8 февралдә ул етәкләгән 112-се дивизияның корпус составында Ростов өлкәһе менән сиктәш Украинаның Ворошиловград (хәҙерге Луганск) өлкәһендәге дошман тылына 70 саҡрымға үтеп инеүе, һис шикһеҙ, Шайморатовтың тағы бер батырлығы, тип һаналырға лайыҡлы.

Ворошиловград ҡалаһын азат итеү операцияһында 8-се кавалерия корпусына "Дебальцево-Ворошиловград" тимер юлын ҡулға төшөрөү бурысы йөкмәтелә. Уңышлы башлана операция: беҙҙекеләр тимер юлын яулап ала, 20 урындан емереп, уны сафтан сығара, фашистарҙың ҡотон ала. Немец фельдмаршалы Манштейн үҙенең "Ҡулдан ысҡынған еңеүҙәр" исемле китабында был рейд тураһында бик бошоноп яҙа. Гитлерға докладында ул тылға дошман кавалерияһы корпусы үтеп инеүе, уны юҡ итеү бик ауырға төшөүе тураһында билдәләй. Әлбиттә, еңеүе тураһында "күпертеп" тә ебәрә. Ысынында, корпусты юҡ итә алмай дошман. Бер танк дивизияһы, 2 пехота дивизияһы менән уратып алып, корпусты йә тереләй алырға, йә бөтөнләй юҡҡа сығарырға тигән маҡсат менән ҡыҫым яһаһа ла, беҙҙекеләр көслөрәк булып сыға. Шулай ҙа фашистарҙың пропаганда гәзиттәре бер-нисә тапҡыр: "Сталиндың гвардия кавалерияһы ҡыйратылды", - тип яҙа яҙыуға, әммә дөрөҫлөккә тап килмәгән был һүҙҙәр ҙә тиҙҙән фашлана.

Ысынында, корпус бер ниндәй матди ярҙамһыҙ ҡалһа ла, төшөнкөлөккә бирелмәй. Дивизия иһә Дебальцево ҡалаһынан 4 саҡрым ситтәрәк Чернухино ауылында урынлаша. Тәбиғәт шарттары һуғыш алып барыу өсөн бик уңайһыҙ була: ышыҡланыр урын юҡ - тирәяҡта тик асыҡ яландар, ташлы ҡалҡыулыҡтар ғына. Был урындар - ҡаршы яҡ армияның тәрән тылы. Совет һалдаттарына тылдан ярҙам өҙөлгәнлектән, ҡорал-яраҡ, аҙыҡ-түлек, фураж юҡлығы офицерҙарҙы тағы ҙур һынау алдына ҡуя. Офицерҙар яҡындағы ауылдарҙан ярҙам һорай. Башҡорт генералы атлы ғәскәр өсөн уғата кәрәк булған дағалар йүнләй, сөнки аңлай: атлы ғәскәр өсөн дағалар бик мөһим. Ул яҡын-тирәләге ауылдарҙан тимерселәрҙе саҡыртып, дивизия аттарын дағалата.

Был рейд ваҡытында ҡылыс һәм штык менән генә ҡоралланған кавалеристар тарафынан 4,5 мең фашист һалдаты юҡ ителә. Дивизияла 5 мең кеше булһа, рейдта шәхси составтың яртыһы ғына ҡатнаша. Тимәк, 2,5 меңдән дә кәмерәк кавалерист 28 танкты, 70 мотоциклды, 50 артиллерия орудияһын, 35 минометты, 50 пулеметты, 2 бронепоезды юҡ итә, шулай уҡ пленға эләккән беҙҙең һалдаттарҙы көнбайышҡа алып китеп барған дошман эшелоны туҡтатыла, тотҡондар ҡотҡарыла.

Бында дивизия командиры, шулай уҡ ошо рейд алдынан ғына корпус командиры урынбаҫары вазифаһына тәғәйенләнгән Шайморатовтың өлөшө баһалап бөткөһөҙ. Корпус командиры Борисов иҫерек булғанға күрә, урынбаҫары Шайморатов корпусты дошман ҡамауынан сығарыу планын үҙе әҙерләй һәм юғалтыуҙарһыҙ тиерлек корпусты бер төн эсендә тәрән тарлауыҡ эсенән ситкә күсереүгә өлгәшә. Әммә бик уңышлы башланған рейдты юғалтыуҙарһыҙ тамамларға насип булмай гвардия генерал-майорына. Быға корпус командирының иҫерек килеш бирелгән тағы бер фарманы ҡамасаулай. 23 февраль көндө таңғы биштә Шайморатовты саҡыртып алып, Борисов: "Ни өсөн алға хәрәкәт итмәйһең?" - тигән урынһыҙ һорау ҡуя. Ул урынбаҫарының, разведка үткәрергә, көстәрҙе бергә туплап, түңәрәк буйынса оборона ойошторорға кәрәк, тигән тәҡдимен ҡабул итмәй һәм алға барырға, дошман оборонаһын өҙөргә, тигән бойороҡ бирә. Устав буйынса бойороҡ мотлаҡ үтәлергә тейеш, шуға ла Шайморатов хәрәкәтте башларға мәжбүр була. Үҙенең штабы менән уртанан, ә ҡалған ғәскәрҙәр ике яҡ флангыларҙан рус ғәскәрҙәре яғына үтеп сығыу операцияһын башлай. Туҡтауһыҙ һуғыштар алып барыуҙан хәлдән тайған күп кенә кавалеристар өсөн был көн үлемесле тамамлана: күп һалдаттар, шул иҫәптән бер-нисә офицер һәләк була. Разведка ебәреп өлгөрмәгәнлектән, Шайморатовтың штабы йырып сығырға уйлаған урынға 36 дошман орудиеһы ҡуйылған булыуын белмәй ҡалалар. Уратыуҙан сыҡҡан саҡта Шайморатов һәләк була, Борисов пленға эләгә. Шайморатовты һаҡлаған 11 һалдат та шул ерҙә батырҙарса һуғышып, башын һала. Гвардия генерал-майоры Шайморатовтың нисек үлеүен күрһәләр ҙә, офицерҙар рапортҡа ни тип яҙырға белмәй: Борисовтың аҡылһыҙ бойороғо тураһындағы мәғлүмәт "өҫкә" ишетелеп ҡуймаһын тип ҡурҡып, комдивдың хәбәрһеҙ юғалыуы тураһында хәбәр таратып тороуҙы ҡулайыраҡ һанайҙар. Ошо арҡала Шайморатовтың нисек һәм ҡайҙа үлеүе 1948 йылда эксгумация эшләгәнгә тиклем сер булып ҡала. Ошо сәбәптәр арҡаһында Советтар Союзы Геройы исеме лә уға бирелмәй ҡала...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Республикала "Комдив Шайморатов. Геройҙың ҡайтыуы" тигән акция ойошторолдо. Уның маҡсаты - легендар 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы командиры, генерал Миңлеғәле Шайморатовҡа "Рәсәй геройы" исемен биреүгә өлгәшеп, тарихи ғәҙеллекте тергеҙеү. Акция инициаторҙары республика муниципалитеттарына һәм дәүләт власы органдарына был проектты хуплаһындар өсөн хаттар ебәрҙе. Был проектты хуплаған ҡултамғалар 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы музейында туплана. Адресы: 450095, Өфө ҡалаһы, Левитан урамы, 27. Телефондар: (347) 227-52-02, 227-47-57.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**яҙып алды.**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



# РӘСӘЙҘЕҢ ДИНИ СӘЙӘСӘТЕ

**Рәсәй Хөкүмәтенең XVII-XVIII быуаттарҙа Башҡортостанда тормошҡа ашырған дини сәйәсәтен шартлы рәүештә дүрт этапҡа бүлергә мөмкин.**

Беренсе этап: XVI быуаттың икенсе яртыһы - XVII быуаттың 80-се йылдары башы. Ул башҡорт ырыу берләшмәләре вәкилдәренең Иван IV менән Мәскәү подданстволһын үҙ иректәре менән ҡабул итеү тураһындағы килешеү шарттарын үтәү осоро. Башҡорт илселәренең төп шарттарының береһе - дин азатлығы була һәм батша уны раҫлай. Ошо осорҙа башҡорттарҙың аҫабалығы, үҙидаралығы һаҡлана, Ислам диненең позициялары нығытыла.

Икенсе этап: 1861 йылда шәйех Сәйет Садиирҙың ихтилалы башланыуҙан алып, башҡорттарҙың 1735-1740 йылдарҙағы ҡораллы сығышына тиклемге осор. Был үҙәк властың әүҙем дини сәйәсәткә күсеп, Башҡортостанда христианлаштырыу эштәре алып барыу ваҡытына тура килә. 1681 йылда Өфөгә махсус епископ тәғәйенләнеүе хәүеф менән ҡабул ителә. Сит дин кешеләрен христианлаштырырға ҡушыу тураһындағы хәбәр XVII быуаттың 80-се йылдарындағы рус-башҡорт һуғышына сәбәп була ла инде.

Һуғыш тамамланғандан һуң суҡыныусыларға льготалар биреү дауам итә, уларҙы ялсы итеү тыйыла, уларҙың быға тиклем булған ғәйептәре ғәфү ителә. Әммә улар сиркәү ҡанундарын үтәүҙән баш тарта. Бының өсөн улар ҡаты язаға тарттырыла, әммә быға яуап итеп, сиркәүҙәрҙе һәм диндарҙарҙың өйҙәрен яндырыуҙар башлана, халыҡ ихтилалға күтәрелә. Бәғзеләр ғүмерен һаҡлап ҡалыу өсөн православие ҡабул итә, ләкин улар кире мосолман диненә күсһә, уларҙы утта яндыралар. Шуға ҡарамаҫтан, XVII быуаттың тәүге сирегендә Башҡортостанда суҡыныусылар 300 генә йорт иҫәпләнә.

Өсөнсө этап: 1736-1789 йылдар. Батша хөкүмәтенең Ислам диненә иң ҡаныҡҡан мәле. Мәжүсиҙәрҙе һәм мосолмандарҙы суҡындырыу көс ҡулланыу ярҙамында тормошҡа ашырыла. Суҡыныу хаҡына бушлай икмәк бирелә. Мосолман руханиҙарының ҡаршылығы һындырыла. Улар инде етди оппозиция булып тормай.

Дүртенсе этап: XVII быуаттың 80-се йылдарынан 1861 йылға тиклем арауыҡ. Был осорҙа хөкүмәт Өфөлә Ырымбур магометан диниә назаратын асып, Ислам диненә үҙенең ҡарашын ҡырҡа үҙгәртә. Быға эске һәм тышҡа факторҙар йоғонто яһай. Беренсеһе - башҡорттарҙы хәрби-казак ҡатламына күсереп, уларҙан хөкүмәттең сәйәсәтен тормошҡа ашырыусылар яһау була.

Нисек кенә булмаһын, хөкүмәттең дини сәйәсәте башҡорттарҙың ҡаты ҡаршылығына дусар була. Халыҡ үҙенең дини ихтыярынан баш тартырға, икенсе диндә ҡабул итергә теләмәй. Быны инде башҡорттарҙың үҙҙәренә генә хас рухи донъяһын һаҡлап ҡалырға тырышыу менән аңлатырға мөмкин. Башҡорт халҡының христианлаштырыу сәйәсәтенә ҡаршы күтәрелеүе уларҙы рухи һәм социаль ҡол итеүгә ҡаршы көрәш ул.

✓ *1969 йылда, миңә өс йәш булғанда, атайымдың "Аманат" тип исемләнгән шиғырҙар китабы баҫылып сыҡҡан. Уның гонорарына атайым ике ҙур әйбер - пианино һәм телевизор һатып алған.*



**Февраль башҡорт донъяһына Рәми Ғариповты биргән ай, ағайҙы беҙҙең аранан алып киткән ай ҙа февраль. Быйылғы февралдә шағирға 80 йәш тулған булыр ине… Ошо ваҡиға уңайы менән Рәми Ғариповтың балаларын - Өфө ҡалаһының 2-се художество мәктәбе директоры Азамат ҒАРИПОВ менән Ғ. Әлмөхәмәтов исемендәге Республика гимназия-интернатының директор урынбаҫары Гөлнара ҒАРИПОВАны редакциябыҙға саҡырҙыҡ һәм уларҙың аталары тураһындағы хәтирәләрен тыңланыҡ.**

# АТАЙЫМ КЕҮЕКТӘРҘЕ

## һындырып ҡына

**▸ Атай-әсәйҙәр, ғәҙәттә, балаларын да үҙ һөнәрҙәре тирәһенә йәлеп итеүсән. Рәми ағай ҙа һеҙҙе, моғайын, ижад кешеләре итеп күрергә теләгәндер. Һәр хәлдә, һеҙҙең сәнғәт донъяһында хеҙмәт итеүегеҙ, берегеҙҙең - рәссам, икенсегеҙҙең музыкант булыуығыҙ юҡҡа ғына түгелдер?**

**АЗАМАТ:** Атайым һүрәт төшөрөүемде хуплай ине. Был оҫталыҡ атайымдың үҙендә лә, уның бер туған ҡустылары Рауил менән Урал ағайҙарҙа ла бар ине. Салауат ағайым да оҫта ғына рәссам ине, тик ул икенсерәк йүнәлештәге һөнәр һайланы. Алтынсы класта уҡығанда атайым мине танылған рәссам Әхмәт Лотфуллиндың оҫтаханаһына алып барғайны. Шунда Әхмәт ағай минең һүрәттәремде ҡарап, кәңәштәр бирҙе. Рәссам үҙе лә беҙҙең өйгә йыш килә ине, уның гел генә, хатта сәй эскәндә лә блокнотына нимәлер сыймаҡлағаны иҫемдә ҡалған. Минең дә бәләкәй саҡтан үҙем менән блокнот йөрөтөү ғәҙәтем булды, унда мин йәнһүрәттәр төшөрә инем. Ул блокноттарым ҡайҙалыр юғалып бөттө инде хәҙер.

Рәссамдар, ғәҙәттә, ниндәйҙер бер аныҡ йүнәлештә эшләй бит инде, ә мин иһә иллюстрацияны үҙ иттем. Китаптар араһында үҫтем һәм бөгөн дә уҡытыу эше менән бергә китаптарҙы һүрәттәр менән биҙәйем.

Минең ижадсы, рәссам булып формалашыуыма башҡортса уҡыуым да ҙур йоғонто яһағандыр, тим. 1968 йылда Өфөләге 91-се мәктәптә башҡорт класы асылғайны. Баш ҡалалағы беренсе башҡорт класының уҡыусыһы булдым мин. Ә 3-сө класҡа иһә беҙ яңы асылған 20-се ҡала башҡорт мәктәбенә уҡырға барҙыҡ. Ошо мәктәптәге үҙенсәлекле мөхит үҫтерҙе, тәрбиәләне, илһөйәр итте беҙҙе. Иң мөһиме, бында табылған дуҫтар ҙа бер көнлөк йә бер айлыҡ түгел, ә мәңгелек. Беҙ бөгөн дә аралашып, бер-беребеҙгә терәк булып йәшәйбеҙ.

**ГӨЛНАРА:** Әйткәндәй, 20-се ҡала башҡорт мәктәбен асыуҙа беҙҙең атайҙың да роле ҙур. Оло ҡаршылыҡтарға ҡарамайынса, баш ҡалала милли интеллигенцияның балаларын уҡытыу өсөн мәктәп астырыуҙы юллап йөрөгән бер нисә кеше араһында атайым да була.

Беҙ ғаиләлә өс бала үҫтек, өсөбөҙ ҙә был тормошта үҙ юлыбыҙҙы тапҡанбыҙ. Беҙҙең ғаиләлә юғары белем алыу мотлаҡ тип һаналды. Азамат ағай тәүҙә педагогия училищеһының художество-графика бүлеген, аҙаҡтан пединститутта ошо уҡ бүлекте тамамланы. Атайым да, әсәйем дә Азамат ағайымдың рәссам булыуын теләй ине. Әммә ағайымды күберәк педагог эше үҙенә ылыҡтырҙы һәм бөгөн мин быны юҡҡа түгел икәнен күрәм. Уны уҡыусылары шул тиклем ярата, ихтирам итә. Үҙең белгәнде башҡаларға тапшырыу һәм унан оло ҡәнәғәтлек алыу - үҙе ҙур бәхет.

Минең музыка юлынан китеүем тураһында һөйләгәндә, бер ваҡиғаны мотлаҡ иҫкә алырға кәрәктер. 1969 йылда, миңә өс йәш булғанда, атайымдың "Аманат" тип исемләнгән шиғырҙар китабы баҫылып сыҡҡан. Уның гонорарына атайым ике ҙур әйбер - пианино һәм телевизор һатып алған. Былай ҙа осон-осҡа ялғап йәшәгән мәлдә пианино һатып алсы әле! Был инструментты барыһы ла яратты һәм бөтәбеҙ ҙә унда уйнап ҡарай инек. Ғөмүмән, беҙҙең өйҙә гел музыка яңғырап торҙо, әсәй йырлап ебәрә торғайны.

Минең музыкант булып китеүем барыһы өсөн дә көтөлгән хәл булғандыр, атайым да теләгәндер быны, тим. Беренсе класҡа уҡырға 20-се ҡала башҡорт мәктәбенә барһам да, 2-се кластан Өфө сәнғәт академияһы эргәһендәге Урта махсус музыка мәктәбендә уҡый башланым. Унан һуң Өфө сәнғәт институтының фортепьяно бүлегендә уҡыным. Уҡып йөрөгәндә үк Музыкаль тәрбиә биреү мәктәбендә (хәҙерге Ғ. Әлмөхәмәтов исемендәге Республика гимназия-интернаты) эшләй башлағайным, 26 йыл инде ошонда эшләйем. Тәүҙә концертмейстер булдым, һуңғараҡ уға уҡытыу эше өҫтәлде, хәҙер килеп директор урынбаҫары вазифаһын йөкмәйем.

**АЗАМАТ:** Салауат ағайыбыҙ 8-се класты шулай уҡ 20-се ҡала башҡорт мәктәбендә тамамланы. Ағайымдың холҡо бик үҙенсәлекле, үҙенә лә, башҡаларға ла талапсан, ғәҙел, тура һүҙле. Бала саҡта ҡурайҙа бик шәп уйнай ине, шуға ла 8-се класты тамамлағас, атайым уның Өфө сәнғәт училищеһына ҡурай класына уҡырға инеүен бик теләгәйне лә, әммә әсәйебеҙҙең һүҙе өҫкә сыҡты: ағайым радиотехник техникумды һайланы. Ул гел эшләп үҫте, йәй буйына археологик экспедицияларға йөрөнө. Әле лә хәтеремдә, беренсе эш хаҡына үҙенә сәғәт, миңә саңғы, атайға, әсәйгә бүләктәр һатып алғайны. Шулай итеп, минең алтынсы класта бик шәп йүгереү саңғыларым булды, быны өсөн ағайыма ныҡ рәхмәтлемен. Ул беҙгә аҙаҡтан да матди яҡтан ныҡ ярҙам итте. Уҡыуҙы тамамлағас та Мәсетле районы Оло Ыҡтамаҡҡа эшкә китте. Салауат ағай тәбиғәте менән ауыл малайы булды. Егерме йәшендә район элемтә бүлеге начальнигы итеп тәғәйенләнгәс, үҙен тулыһынса эшкә екте. Эшкә сәмсел ине, ялҡауҙарҙы, эскелек менән мауығыусыларҙы бөтөнләй яратманы. Һуңынан уны Учалы районына эшкә күсерҙеләр, ул әлеге мәлдә Учалы районында йәшәй. Күп балалы атай, бәләкәй улы Юлай Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында туғыҙынсы класта уҡып йөрөй. Атай үлгән йылда ағайым Мәсетлелә эшләп йөрөй ине. Көндәлектәрендә яҙыуынса, һуңғы тыуған көнө менән атайҙы Салауат ағайҙан башҡа бер кем дә ҡотламаған...

**▸ Замандаштары Рәми ағайҙы үҙ милләте, теле, халҡы яҙмышы һәм намыҫы өсөн утҡа-һыуға инер ҡыйыу кеше итеп белә. Яҙғандарының гәзит-журналдарҙа баҫылмауы, эшкә ҡабул итмәүҙәр, шул арҡала матди мохтажлыҡта йәшәү - былар барыһы ла уның ошо ҡыйыулығына, тура һүҙлегенә, көрәшсе рухына бәйле лә инде. Ә бына Рәми ағайҙың улдарында ла бармы икән бындай ҡыйыулыҡ?**

**АЗАМАТ:** Белмәйем, беҙҙең ҡыйыулыҡты атайҙыҡы менән сағыштырып буламы икән? Атайым бит милләттең яҙмышы хәл ителгәндә партияның Өлкә комитетындағы иң юғары түрәләргә лә тураһын ярып әйтеүҙән ҡурҡмаған. Беҙҙә лә бар ул ҡыйыулыҡ, тик уны күберәк көнкүреш кимәлендә генә ҡулланырға тура килә. Ҡайһы саҡта был ҡыйыулыҡ ҡыҙыулыҡҡа ла алып килә. Мәҫәлән... Бер саҡ улым менән ҡунаҡта булдыҡ та, Галле урамы буйлап башҡортса һөйләшә-һөйләшә китеп барабыҙ. Йәлилгә ул саҡта өс йәштәр тирәһе генә булғандыр. Беҙҙең арттан бер ҡатын менән ир кеше килә. Беҙгә төбәп тороп: "Килеп тулдылар бында ауылдан башҡорттар..." - тигәнерәк һүҙ ысҡындырҙы былар. Ҡыш ине. Йәлилде ситкә этәрҙем дә, ир кешене иңбашым аша көрткә ташлап, өҫтөнә менеп ултырҙым. Чечен булып сыҡты был, "Хәҙер бысаҡты сығарам, үлтерәм", тип ҡысҡыра. "Һин кемдең икмәген ашайһың, кемдең һыуын эсәһең, етмәһә, үҙең дә ситтән килгәнһең", тип, ауыҙына аҙыраҡ ҡар тултырып, "аңлатыу эштәре" алып барырға тура килде. Ә улым быларҙың барыһын да ишетеп торҙо бит, аҙаҡтан: "Атай, беҙҙең дә бәке бар ҙа инде", - тигән була. Уның өсөн милләтенде мыҫҡыл итеүселәргә яуапһыҙ ҡалырға ярамағанлығын аңлатыусы һабаҡ булды инде был.

**ГӨЛНАРА:** Әйткәндәй, Азамат ағайҙы пединститутта уҡыған сағында "Аҡыл, намыҫ, выждан" тип йөрөтәләр ине. Мин үҙем дә асылыма ҡаршы килгән ваҡиғаларҙа ҡатнашыуҙан ҡырҡа баш тартам һәм: "Беҙҙә, ғариповтарҙа, былай эшләмәйҙәр", - тип аңғартып ҡуям.

**▸ Рәми ағай баҡыйлыҡҡа күскән мәлдә берегеҙгә - ун алты, икенсегеҙгә ун йәш кенә булған. Ә шулай ҙа атайығыҙ менән үткәргән мәлдәрҙе, ҡайһы бер атай һабаҡтарын хәтерләйһегеҙҙер?**

**АЗАМАТ:** Атай беҙгә бер ваҡытта ла тауыш күтәрмәне. Ҡаты ғына итеп бер әйтеп ҡуя ине, әлбиттә. Салауат ағайым төрлө этлеккә оҫта ине. Уға мин дә ҡушылып китәм. Ләкин язаһы ағайыма түгел, миңә эләгә. Берәй эш боҙғаныбыҙҙы белеп ҡалһа, атайым кем ғәйепле икәнен тикшереп-нитеп тормай, мөйөшкә мине баҫтыра ла ҡуя. Беҙҙең ғаиләлә "Быны мин эшләмәнем" тип аҡланып тороу йә алдашыу ғәҙәте юҡ ине. Үҙем ағайым өсөн яза үтәп торам, үҙем илайым, "Бына мин үлһәм, минең нисек ғәҙел булғанымды аңларһығыҙ, үкенерһегеҙ әле", тип уйлаған булам эстән генә.

Атайымды гел өҫтәл артында яҙышып ултырған килеш күрә инек беҙ. Уның бушты-бушҡа ауҙарып диванда ятҡанын күргәнем булманы, ятһа ла, ҡулында йә гәзит, йә журнал, йә китап булыр, янында ҡәләмдәре аунап ятыр ине. Беҙҙең өй китапханаһындағы китаптарҙың барыһы ла төҫлө ҡәләмдәр, ручкалар менән һыҙғыланып бөткән. Әле яңыраҡ Толстойҙың көндәлектәрен асһам, бер ҡағыҙ бите килеп сыҡты. Унда атайҙың ҡулдары менән: "Шағир үҙенең тормошонан иң яҡшы нәмәләрҙе ала ла, үҙенең әҫәрҙәренә һала. Шуға ла уның әҫәрҙәре матур, ә тормошо насар була",- тип яҙылған. Ысынлап та, беҙгә атай йылыһы бик етмәгәндер ҙә инде. Атай был донъянан киткәндә туғыҙынсы класта уҡый инем. Хатта бер ултырып, атай менән ул булып һөйләшмәгәнбеҙ ҙә, тигән үкенеү йәшәй күңелдә. Йәмәғәт кешеһе булды, сәйәсәттән дә алыҫ торманы. Уның кеүек үтә ғәҙел, дөрөҫлөктө генә яҡлаусыларҙы бөгөп булмай, һындырып ҡына була торғандыр. Атайым бөтәһенә лә бер төрлө ҡараны, үҙенә лә, дуҫтарына ла талапсан, ҡаты булды, көндәлектәрендә улар адресына ла ҡаты ғына әйтелгән урындар бар.

**ГӨЛНАРА:** Салауат ағайымдан һуң ғаиләбеҙҙә Лилиә тигән ҡыҙ бала тыуа, ләкин ул йәше лә тулмайынса, ауырып үлеп ҡала. Шуға ла мин тыуғас, атайҙың бөтөн һөйөүе миңә күсә. Мин быны бик яҡшы тоя һәм белә инем. Малайҙар менән ул ҡатыраҡ булды, ни тиһәң дә, ир тәрбиәһе бирергә тырышҡандыр. Ағайымдар менән тартҡылашып, үсегешеп китәбеҙ ҙә, мин атайҙың бүлмәһенә инеп йәшеренәм, ә ағайымдарға унда инергә ярамай. Бәләкәй саҡта миңә атайҙың бүлмәһендә йоҡлап китеү оҡшай ине. Уның ҡулдары менән йомшаҡ



*Атайымды гел өҫтәл артында яҙышып ултырған килеш күрә инек беҙ. Уның бушты-бушҡа ауҙарып диванда ятҡанын күргәнем булманы, ятһа ла, ҡулында йә гәзит, йә журнал, йә китап булыр, янында ҡәләмдәре аунап ятыр ине. Беҙҙең өй китапханаһындағы китаптарҙың барыһы ла төҫлө ҡәләмдәр, ручкалар менән һыҙғыланып бөткән. Әле яңыраҡ Толстойҙың көндәлектәрен асһам, бер ҡағыҙ бите килеп сыҡты. Унда атайҙың ҡулдары менән: "Шағир үҙенең тормошонан иң яҡшы нәмәләрҙе ала ла, үҙенең әҫәрҙәренә һала. Шуға ла уның әҫәрҙәре матур, ә тормошо насар була",- тип яҙылған. Ысынлап та, беҙгә атай йылыһы бик етмәгәндер ҙә инде. Атай был донъянан киткәндә туғыҙынсы класта уҡый инем. Хатта бер ултырып, атай менән ул булып һөйләшмәгәнбеҙ ҙә, тигән үкенеү йәшәй күңелдә.*

***✓ Атай беҙҙең менән башҡортса ғына һөйләште. Башҡортса һүҙҙәрҙән махсус һүҙлек төҙөп бирә лә, һөйләшкәндә минең был һүҙҙәрҙе ҡулланыуымды көлөмһөрәп тыңлай ине.***

# БӨГӨП БУЛМАЙ...

## була торғандыр

**АЗАМАТ:** Атайым тураһында әллә ни күп нәмә лә һөйләй алмайым. Эйе, ул хөрмәтләүгә, ғорурланыуға лайыҡлы шағир кеше. Был йәһәттән Висенте Уйдобронын "Шағир - ул Алла; шағир ямғыр тураһында йырларға түгел, ә ошо ямғырҙы үҙенең шиғырҙарында яуҙыра алырға тейеш", тигән һүҙҙәре бар. Бына кем ул шағир! Ул - ижадсы. Ә беҙҙә, үкенескә күрә, шиғырҙар тотош декларациянан тора. 50-се йылдарҙағы, шулай уҡ 30-сы йылдарҙағы шиғырҙарҙы бөтөнләй уҡыуы мөмкин түгел. Мин Есенинды ла ҡабул итә алмайым. Бына япондарҙың шиғриәтен яратам. Һин телең осонда бал, лимон тәмен тояһың, йөрәгең дөпөлдәп тибә башлауын ишетәһең, йәғни, шиғыр кешегә ниндәйҙер мәғлүмәт еткерергә түгел, ә уның күңелендә тойғолар уятырға тейеш. Атайымдың бер нисә шиғырын мин ошолай ҡабул итәм. 19 йәшемдә уның, әйтәйек, "Ҡыш әкиәте"н уҡыһам, ваҡыт үтеү менән "Диңгеҙ ҡыҙы"ндағы тыуған ил-әсәнең һүҙҙәре йәки ҡобайыр жанрында яҙылған әҫәрҙәре күңелемә үтеп инеп тетрәндерҙе.

**▸ Башҡорт әҙәбиәте донъяһында "Рәми мәктәбе" тигән төшөнсә бар. Рәми ағайҙың ни тиклем көслө шәхес булғанлығын күптәрҙең уның эргәһенә һыйынып, таяныс табып йәшәүенән дә аңларға була. Ысынлап та, ул үҙенән бигерәк башҡаларҙы яҡлаған, ҡурсылаған бит. Ғөмүмән, бөгөн дә, шағирҙы күреп белмәүселәр өсөн дә "Рәми мәктәбе"нән өйрәнәһеләр бик күп...**

**АЗАМАТ:** Ул дуҫтары тураһында "минең Динисем", "минең Сафуаным", "Рауилем", тип кенә һөйләй торғайны. Рауил Бикбаевты иң талантлыһы тип иҫәпләне, шуға ла ул уны гел яҡланы. Улар ҙа үҙ сиратында рәхмәтле була белде, атайҙың исемен оноттормау өсөн генә түгел, ә ғаиләбеҙҙе күтәреү өсөн дә әллә күпме ярҙам иттеләр.

Беләһегеҙме, ваҡытында үлә белергә лә кәрәк. Ғайса бәйғәмбәргә лә үҙенең тормош идеяһын, тормош фәлсәфәһен башҡаларға еткереү өсөн үлергә кәрәк булған бит. Атайым да шиғырҙарында үлем тураһында күп яҙған, тимәк, үҙ үлемен дә алдан тойған булһа кәрәк. Хатта ғүмеренең һуңғы мәлендә башҡортсаға тәржемә иткән Ғүмәр Хайямдың һуңғы робағийы ла үлем тураһында: За что же ты убил меня, владыка вечный...

**ГӨЛНАРА:** Атайҙың Ғүмәр Хайям тәржемәләрен үҙ ҡулы менән яҙып, тегеп, китап итеп төпләп ҡуйған ҡулъяҙмаһы һаҡлана архивында. Был китаптағы ошо һуңғы робағи ул үлер алдынан ғына унда яҙып ҡуйылған...

**АЗАМАТ:** Гөлнара әйткән ошо үҙе тарафынан тулыһынса тиерлек төпләп ҡуйылған ҡулъяҙманы нәшер иттерә алһам, минең атайым алдындағы бер бурысым үтәлер ине. Әҙәбиәтселәр, тәржемәселәр өсөн бик кәрәкле һәм ҡиммәтле баҫма булыр ине ул. Ә әлегә атайҙың юбилейына арнап, "Китап" нәшриәте уның фотоальбомын әҙерләй.

***Салауат ағайымдан һуң ғаиләбеҙҙә Лилиә тигән ҡыҙ бала тыуа, ләкин ул йәше лә тулмайынса, ауырып үлеп ҡала. Шуға ла мин тыуғас, атайҙың бөтөн һөйөүе миңә күсә. Мин быны бик яҡшы тоя һәм белә инем. Малайҙар менән ул ҡатыраҡ булды, ни тиһәң дә, ир тәрбиәһе бирергә тырышҡандыр. Ағайымдар менән тартҡылашып, үсегешеп китәбеҙ ҙә, мин атайҙың бүлмәһенә инеп йәшеренәм, ә ағайымдарға унда инергә ярамай. Бәләкәй саҡта миңә атайҙың бүлмәһендә йоҡлап китеү оҡшай ине. Уның ҡулдары менән йомшаҡ ҡына итеп битемдән һыйпап йоҡлатыуы хәтерҙә ҡалған. Бүлмәгә гел ҡуйы тәмәке төтөнө таралыр ине, сөнки атай күп тарта торғайны. Ул үлгәс тә мин оҙаҡ ҡына тәмәке төтөнөндә атайҙың еҫен тоя торғайным.***

ҡына итеп битемдән һыйпап йоҡлатыуы хәтерҙә ҡалған. Бүлмәгә гел ҡуйы тәмәке төтөнө таралыр ине, сөнки атай күп тарта торғайны. Ул үлгәс тә мин оҙаҡ ҡына тәмәке төтөнөндә атайҙың еҫен тоя торғайным.

Атайым яҙышып ултырған саҡта уның тубығында ултырғанымды хәтерләйем, күрәһең, был мин бөтөнләй бәләкәс саҡта булғандыр. Аңлайыммы, аңламайыммы, атай өсөн мөһим булмағандыр, ул миңә Есенин, Пушкин шиғырҙарының русса вариантын, шунан үҙенең тәржемәһен ҡысҡырып уҡый ине. Был ижади кухняның эсендә булыу тойғоһо минең күңелемә шул тиклем һеңеп ҡалған һәм мин ҡайһы бер шиғырҙарҙы ятлап алып, һөйләп тә йөрөй инем. Атай беҙҙең менән башҡортса ғына һөйләште. Башҡортса һүҙҙәрҙән махсус һүҙлек төҙөп бирә лә, һөйләшкәндә минең был һүҙҙәрҙе ҡулланыуымды көлөмһөрәп тыңлай ине.

**ГӨЛНАРА:** Тәржемәләр тураһында һөйләшә башлағас, тағы шуны әйтәйем. "Минең антологиям" китабында баҫылған тәржемәләренең тәүге сығанаҡтарын эҙләп, әсәйем менән китапханаларҙа ла күп ултырырға тура килде. Шунда атайымдың ниндәй нескә тәржемәсе булыуын күрҙем дә инде. Хәҙер мин, бер битендә - атайҙың тәржемәһе, икенсе битендә төп нөсхәләге шиғырҙарҙы биреп, китап сығарһаң ине, тигән хыял менән янам

**АЗАМАТ:** Ысынлап та, атайымдан өйрәнәһеләр, фәһем алыр нәмәләр күп. Ул тәбиғәте буйынса шундай ипле, һаҡсыл, теүәл кеше ине. Нәшер ителгән һәр китабының ҡулъяҙмаһы китап итеп тегелгән, яҙыуы ла ипле, матур. Ҡыҫҡаһы - эстет. Әгәр ҙә мөмкинлеге булһа, ул бик фырт кеше булыр ине, тип уйлайым.

**▸ Рәми ағай күберәк киләсәк өсөн ижад иткән бит. Күп әҫәрҙәрен тере сағында бер ҡайҙа ла баҫтыра алмаған, әммә быны менән ижадтан һүрелмәгән, яҙған да яҙған. Атайығыҙҙың архивында әлегә һеҙҙең ҡул теймәгән ҡулъяҙмалар тағы бармы?**

**АЗАМАТ:** Бар, әлбиттә. Башҡортостандың халыҡ шағиры булараҡ, уның әҫәрҙәренең тулы йыйынтығын сығарғанда шәп булыр ине, ҡул теймәгән ҡулъяҙмаларын да шунда өҫтәргә мөмкин булыр ине. Әле дуҫым Юлай Әбсәләмов менән бер план өҫтөндә уйланабыҙ. Атайҙың архивын электрон версияға күсереп, бөтөн донъяға күрһәтергә ине.

**ГӨЛНАРА:** Әсәйебеҙ ҙә атайҙың архивы өҫтөндә күпмелер ваҡыт эшләп өлгөрҙө. Уның бала саҡ көндәлектәрен тулыһынса китап итеп баҫтырып сығарыу тураһында хыялланғайны, был йәһәттән эш башланғайны ла. Тик... Атайҙың үлемен бик ауыр кисерҙе һәм ошо хәлдән оҙаҡ сыға алмай йөрөнө шул әсәйебеҙ.

Ҡасандыр әсәй Эдвард Радзинскийҙан шундай фекер күсереп алғайны, быны русса әйтһәк, дөрөҫөрәк яңғырар кеүек: "Поэту должно повести не с женой, а вдовой". Әсәй атай өсөн шундай тол ҡатын булды һәм үҙе үлгәндән һуң да Рәми һүҙенең шул тиклем көслө яңғырауында уның роле лә бар, тип уйлайым. Башҡорт йәмәғәтселеге алдына сығып, илай-илай атайым тураһындағы иҫтәлектәре менән уртаҡлашыуы, башҡортса уның шиғырҙарын һөйләүе әле лә күҙ алдымда. Әсәйем ижади шәхес ине, ул үтә көслө ҡатын ине. Әсәй тоғролоҡ, оло мөхәббәт символы ла. Әйткәндәй, уны, рус ҡатынын, башҡорт йәмәғәтселеге яратып, үҙ итеп ҡабул итә ине. Әсәйем үҙен ысын башҡорт ҡатыны итеп тойоп йәшәне. Ейәнейәнсәрҙәре менән мотлаҡ башҡорт телендә аралашырға тырышты, "Башҡортса һөйләшегеҙ, һеҙ бит Рәми балалары", тип әйтеп кенә тора ине.



**▸ Әйткәндәй, Рәми ағайҙың ейән-ейәнсәрҙәре, һеҙҙең балаларығыҙ, олаталары менән ғорурланамы? Ағайҙың шиғри талантын дауам итерҙәй бәләкәй Рәмиҙәр юҡмы араларында?**

**АЗАМАТ:** Минең улым Йәлил 20-се башҡорт ҡала гимназияһында унынсы класта уҡый һәм хәҙер олатаһының кем икәнлеген аңлар йәштә инде. Ул бәләкәстән спорт менән шөғөлләнде. Әле һуңғы арала уның поэтик һәләте асылып, "рэп" тигән жанрҙа шиғырҙар ижад итеү менән мауығып китте. Мин, әлбиттә, уның яҙған әйберҙәре менән ҡыҙыҡһынам, поэзияға ла ылыҡтырырға тырышам, шулай уҡ шиғыр яҙыуҙың, етмәһә, Рәми Ғариповтың ейәне булыуҙың оло яуаплылыҡ икәнен иҫенә төшөрөп торам. Ә ҡыҙым Шәүрә һәләттәре буйынса миңә тартҡан. Рәссамдарға хас яҡшы сифаты бар: физиологик кимәлдә кешенең характерын тотоп ала белә. Уның бер ҡыҙыҡ ғәҙәте бар: өйгә ҡунаҡтар килһә, иҙәнгә ултырып ала ла, беҙ сәй эскән арала уларҙы һүрәткә төшөрә. Ул һүрәт төшөрөүҙең күберәк техник яғына иғтибар итә һәм күберәк компьютер графикаһы менән булыша. Әле ул 20-се гимназияның 5-се класында белем ала һәм яңыраҡ дуҫ ҡыҙы менән анимацион йәнһүрәт төшөргәндәр. Ошондай ҡыҫҡа ғына, әммә философик әҫәр төшөрөү - ун йәшлек балалар өсөн үҙе үк оло уңыш.

**ГӨЛНАРА:** Шәүрә бик тыныс һәм маҡсатлы ҡыҙыҡай, мин киләсәктә олатаһының архивы менән тап ул булышыр, тип уйлайым. Минең ике ҡыҙым бар, икеһе лә музыка менән шөғөлләнәләр. Өлкәне Айшә - туғыҙынсы класта, бәләкәсе Рәмилә бишенселә уҡый. Һәләттәре буйынса атайға Рәмиләм күберәк оҡшағандыр, төрлө сараларҙа олатаһының шиғырҙарын яттан һөйләп йөрөй, үҙенең дә шиғыр яҙыу һәләте бар. Ғөмүмән, әлегә нимәлер күҙаллау иртә, киләсәк күрһәтер.

**▸ Рәми ағайҙы күреп белгән дуҫтары, замандаштары күңелендә шағир яҙмышы тураһындағы үкенес барыбер ҙә үҙен белгертә. Ә һеҙҙә бармы ул үкенес, яҙмышҡа үпкәләү? Ғөмүмән, Рәми Ғариповтың улы йә ҡыҙы булыу ауырмы, еңелме?**

**АЗАМАТ:** Беҙ бик ауыр йәшәнек, тип һөйләй ине әсәйебеҙ. Әммә беҙ, балалар, уны һиҙмәнек тә. Бала саҡта нимә кәрәк инде? Ҡышын берәй кеҙа кейеп алаһың да, йүгереп тик йөрөйһөң. Атайымдың: "Был ниндәй оятһыҙ, үтеп сығып булмаған хәйерселек һуң ул..." - тип асырғанғанын бер аҙ иҫләйем. Көндәлектәрендә лә был турала яҙылған.

Атай үлгәс, Дим буйында әсәйгә баҡса өсөн ер бирҙеләр. Мин унда бәләкәй генә йорт төҙөп ҡуйҙым. Их, ошо йортҡа мейес сығарып ҡуйып, шунда атайҙы йәшәтһәң ине, тигән хыял миндә гел булды. Мин уны тәрбиәләр, ҡарар инем, ә ул үҙенә оҡшаған эше менән шөғөлләнер ине, тим. Юғиһә, балыҡты һыуҙан тартып алып, үҙенең тәбиғи мөхитенән айырғандар ҙа, ул әйҙә боҙға һуҡҡыланған да һуҡҡыланған. Беҙ бит таланттарҙы һаҡлай белмәйбеҙ. Әгәр ҙә уның тормошонда ауырлыҡтар, эҙәрләүҙәр, мәхрүмлектәр, был тиклем һынауҙар булмаһа, башҡалар һымаҡ шыма ғына йәшәһә, атай ниндәй булыр ине икән, тип тә уйлайым ҡайһы саҡта. Юҡ, ул барыбер кемгәлер яраҡлашып йәшәй алмаҫ ине, ә ундайҙар мотлаҡ һәләкәткә дусар була. Ярһыу тау йылғаһында тулҡындар һуғыуҙан шымарып бөткән таштар була, тулҡындарға ҡаршы торған, мәғрүр ҡаяға әүерелгән таштар ҙа була. Атайым беҙҙең күңелдә, халыҡ күңелендә ана шул мәғрүр ҡая һымаҡ. Йылға тигәс, атайымдың, яҡшылыҡ эшлә лә, таш аҫтына һал, балыҡ белер, балыҡ белмәһә, халыҡ белер, тип ҡабатлағаны иҫкә төшә. Эйе, уның эшләгән эштәрен халыҡ белә. Теле асылырасылмаҫтан балалар уның "Туған тел" шиғырын һөйләй, йәштәр теленән дә төшмәй уның шиғырҙары. Тимәк, атайым юҡҡа ғына йәшәмәгән.

**ГӨЛНАРА:** Беҙ атайыбыҙҙың кем икәнен белһәк тә, бер ҡасан да уның исемен ниндәйҙер маҡсатта ҡулланып йөрөмәнек. Беҙ үҙебеҙҙе үҙебеҙ булдырҙыҡ, хатта эшләгән урынымда 30 йәшкә тиклем минең Рәми Ғариповтың ҡыҙы икәнемде белмәнеләр.

**АЗАМАТ:** Рәми Ғариповтың улы булыу еңел түгел, киреһенсә, оло яуаплылыҡ, тиер инем мин. Минән, ни өсөн Константин Райкин, Андрей Тарковскийҙар кеүек, һин дә атайыңдың фамилияһын, юлын дауам итмәнең, тиеүселәргә минең яуабым юҡ. Ундай амбициям юҡ, баш аша йөрөй белмәйем, талантымды тыныс баһалайым. Рәми Ғариповтың улы булған өсөн генә мине юғарыраҡҡа күтәреүҙәренә мин бер ҡасан да риза булмаҫ инем. Баһалауҙар һинең үҙ һәләттәрең менән тап килергә тейеш - был фекеремдән кире ҡайтасағым юҡ...

**Гөлфиә ЯНБАЕВА
әңгәмә ҡорҙо.
Ләйсән НАФИҠОВА
яҙып алды.**

## МОСТАЙ НӘСИХӘТТӘРЕ



# ИҢ ҘУР БАЙЛЫҒЫМ - ҺҮҘ, унының ла халыҡтыҡы...

- "Өйҙәге ҡунаҡ ситтәге батшанан өҫтөнөрәк".
- "Саф гәрәбәгә туҙан ҡунамы һуң?"
- "Дөрөҫлөк барын бар ҙа... Әммә ул һәр кемгә тейеп бармай..."
- "Иман, намыҫ туған тел менән һеңә кешегә".
- "Бер бушлыҡ менән икенсе бушлыҡты тултырып булмай".
- "Бөгөнгөң ныҡлы булмаһа, кисәгенең дә, иртәгәнең дә мәғәнәһе ҡалмай".
- "Тере кешенең баһаһы юғары саҡта ғына үлем тетрәткес була".
- "Яҡшы аттар менән затлы ҡатындар бер рухтан ярала".
- "Тамыры баҡыр ағастың сатыры алтын булмаҫ".
- "Елгә ҡаршы барыу түгел, ел ыңғайына йөрөү яҙмыштарҙан яҙҙыра".
- "Сит йәндәргә йән ҡушып булмай".
- "Язалайһы килгән ҡолона Хоҙай оҙон ғүмер түгел, оҙаҡ ҡартлыҡ бирер икән".
- "Әсә үҙ йөрәгендәге өмөт менән хәүефте бергә ҡушып, тығыҙ ай ҡарынында йөрөгән балаға күсереп, донъяға тапшыра икән".
- "Көйөнә килтереп баҫа алмаҫлыҡ эшкә тотоноу мәғәнәһеҙ нәмә".
- "Тормош көйөнә" баҫып атламағандың юлы уңыусан".
- "Был донъяла кешенең кескәй генә шатлығын да, оло бәхетен дә яман тоҙаҡтар аңдып тора".
- "Бәғзе берәүҙәр, бармаҡтарына шырау керһә лә, йыһан күкрәгенә хәнйәр ҡаҙалған һымаҡ һөрәнләй".
- "Ни өсөн ғәләм хужаһы, йыһан шаһы, бөтә тереклекте бар итеүсе ҡөҙрәтле Тәңребеҙ, әҙәм балаларын юлдан яҙҙырыусы харам ризыҡтар татытып, гонаһтар ҡылдырып, уларҙы аҙҙырыусы яуыз шайтанға сыҙап тора икән?"
- "Шайтан ҡотортоуы арҡаһында бәндәләр яҙыҡҡа сумалар ҙа, ярлыҡау ялбарып, ҡурсалау өмөт итеп, Хоҙайға килеп һыйыналар. Уға табыналар".
- "Күңел үҫтереү тигән нәмә ул - һинең бөтә ҡылыҡтарыңды маҡтап, хуплап тороу түгел, ә юҡ-бар ғәйеп өсөн башҡа һуғып кәмһетмәү".
- "Бала бәғеренә бөртөк-бөртөк һалынған йәбер орлоғо юҡҡа сыҡмай, тора-бара үҫенте бирә һәм башҡаларҙы йәберләүгә, рәнйетеүгә йүнәлтелә".
- "Ялған хөкөм менән айырым әҙәмдәрҙең генә түгел, хатта ныҡлы йәмғиәт ҡоролошоноң да башына етеп була".
- "Ҡеүәтле дәүләттәрҙе көслө шәхестәр туплай, төҙөй, уларҙы уҡ булдыҡһыҙ, башһыҙ етәкселәр емерә йәки емерелеүгә сәбәпсе була".
- "Бер кешенең халыҡ өҫтөнән хакимлығы, уның сикләнмәгән хөкөмө ҡурҡыныс ҡына түгел, һәләкәтле".
- "Әйтелмәй ҡалған рәхмәт - түләнмәй ҡалған бурыс ул".
- "Аумаҡайҙарға көслөләр генә түгел, көсһеҙҙәр ҙә таянмаҫҡа тырыша".
- "Кеше ҡулы менән кеше туҡмама".
- "Кешеләр бер-береһен йышыраҡ күтәрешһәләр, үкенестәре әҙерәк ҡалыр ине..."
- "Кеше бер юлы ғына бабайға әйләнмәй ҙә..."

**Ғайса ИШМӨХӘМӘТОВ әҙерләне.**




Әй, һиңә хәбәр һөйләгән мин иҫәр! - Үпкәләгәндәй иткән Нур, ары һүҙ көрәштерергә теләмәй, ҡулына гәзит эләктереп, ҡыштырҙатырға тотондо, хәлбүки оҙаҡҡа түгел, үткелеккә сыҡты, стенаға беркетелгән телефондың трубкаһын алды ла кәрәкле һандарҙы йыйырға кереште:

- Ғәфүр, һаумы? Ни эштәр бөтөрөп ятаһың?

Теге оста көтөлмәгән шылтыратыуға аптыраңҡыраған тауыш ишетелде:

- Ә-ә-ә, ҡорҙаш, шәпме? Эштәргә килгәндә, ығырлап-шығырлайбыҙ әҙләп, баҙарға сығып, баҡса емешен аҡсаға алыштырып ултырҙым. Нимә менән булһа ла шөғөлләнергә кәрәк бит, көн дә үтә, әҙләп кеҫәгә лә тама, оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы, баҙар иҡтисадына яраҡлашып йәшәп ятыла. Үҙең нимә ҡыйратаһың?

- Артыҡлап ҡыйратҡан нимә юҡ, БАМ-дың исемлегенә яҙылдым.

- Ул быуат төҙөлөшөн онотоп барыла ине, хәтергә төшөрҙөң әле.

- Ниндәй төҙөлөш тағы, беләһең килһә, пенсионерҙарҙың маршруты өс йүнәлештә: балнис, аптека, магазин!

- Минең йомоштар әлегә баҙар, алыш-биреш, магазин тирәһендә сыуала.

- Баҙарсының һанаулы ваҡытын оҙаҡ алмай ғына һорайым әле, трестың юбилейы икәнлеген беләһеңме?

- Ниндәй юбилей? Кисә генә шул тирәгә барып әйләнгәйнем, өндәшмәнеләрсе.

- Ә бына мин исемлектә бармын.

- Дә-ә-ә, - тип һүҙҙы теге ос, уйланыңҡырап та торҙо шикелле. - Атҡаҙанғанды түгел, прастуй эштә эшләп ялға сыҡҡан ташсыны саҡырғандар, шунының сәйер. Белешеп, төбөнә төшөргә кәрәк.

- Ҡасанға әйткәндәр?

- Ике аҙна самаһы ваҡыт бар әле.

- Иртә өндәшеүҙәре лә аңлашылып бөтмәй... Йә, ярай асыҡлармын да еткерермен. Моғайын да, шуның өсөн шылтыратҡанһыңдыр бит инде?

- Шуға шул. Ярай хуш.

Залға сығып, гәзит-журналдарға яңынан иғтибарын йәлеп итергә тырышһа ла тынғылыҡ тапманы, Ғәфүрҙең: "Иртә өндәшеүҙәре аңлашылып бөтмәй", - тип әйтеүе күңелен тағы ла елкендереп ебәрҙе. Арҡаһын диванға терәп ҡайҡайҙы, ә мейеһен һаман да һораулы уйҙар йыбырлата. Ошоға саҡлы йыйын-табындарҙы үҙһенмәй ине, нишләп әле көтмәгәндә тоҡанып китте? Әллә был ысынлап та ҡартайыу ғәләмәтеме? Кеше олоғайған һайын уға бала фиғеле инә тигәндәре дөрөҫтөр. Үткәндә ейәне тыуған көнө менән ҡотлап открытка ебәргәйне, күҙҙәренә йәш эркелде, уны күрһәтмәҫ өсөн ҡарашын йәшереп башын эйгәйне, быны күреп өлгөргән Разияһы кеткелдәп көлдө лә ебәрҙе: "Китсе, ҡарт, ҡотлау алып та йәшкәҙәп ултыраһың, олоғайыуың шулмы, әллә ысынлап та тиленәнә башланыңмы?" "Бер ҙә тиленәнмәйем, әлегә үҙ аңымдамын. Ата-әсәһе иҫәнән сығарған саҡта Рәмилдең онотмай ҡартатаһына ҡотлау ебәреүе ҙур эш. Тимәк - белекле, кеселекле, иғтибарлы. Теге кеҫә телефонынан смс тигән ғәләмәтте лә оҙатмаған, шылтыратманы ла, иллә килешле итеп яҙып, боронғоса открытка һалған. Ызнашит ул ҡартатаһын ярата һәм хөрмәт итә..." - тип яуапланы.

Тағы кемдәрҙе саҡырғандар икән? Моғайын да штукатурсы Бибинурға өндәшкәндәрҙер, ул да унан ике йылға ҡалып хаҡлы ялға сыҡты. Йәнә маляр Тәслимәгә, шунан ташсы Биктимергә, Рафаилға саҡырыу ебәргәндәрҙер... Улар тотоп торҙо бит уның бригадаһын, нисәмә йыл республика профсоюздарының күсмә байрағын ҡулдан ысҡындырманылар, һәммәһе лә "Социалистик хеҙмәт ударнигы" исемен лайыҡлы йөрөттө... Трестың элекке начальнигы Болдырев Иван Федоровичты ла саҡырырҙар ине лә, ул элекке йыл оҙаҡ ауырығандан һуң үлеп ҡалды, эшсән, аҡыллы, киң ҡарашлы ойоштороусы булды. Уны эшкә алғанда Болдырев баш прораб ине, шунан начальник урынбаҫары, ары начальник итеп үрләттеләр. Тотонған шөғөлөнә бөтмөр, оҫта ҡуллы Нурҙың кешеләр менән етәкселек итеүгә барымы юҡ кимәлендә ине, мәгәр Иван Федорович тәжрибәһеҙ йәш егеттә шул һәләтте тойомлап, уға ышаныс күрһәтеп, яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алып, алдынғы бригадаға бригадир итеп тәғәйенләне. Үҙенсәлекле, үҙ һүҙле, тырыш һәм шул уҡ ваҡытта аҙым һайын бола күтәрергә әҙер бригадаға юлыҡты ул: теленән дә, ҡулынан да эш килгән Бибинурҙы, Нестор Махно ҡушаматлы Ҡылый Биктимерҙе генә алып ҡара...

Шул саҡ уйын бүлеп, телефон шылтыраны. Ғәфүр икән:

- Ҡорҙаш, был мин әле тағы... Һинең йомошто йомошлап йөрөгән көн. Трест идаралығы урынлашҡан офисҡа барып әйләндем, юбилей үткәреүҙәре раҫ. Мине саҡырмауҙарын да асыҡланым, кем төҙөлөшкә нигеҙ һалған, шуларҙы ҙурлаясаҡбыҙ, тине профком рәйесе. Балыҡ тәрәнде, кеше ҡулай урынды һайлай, тигәндәй, арыу эш эҙләп, төҙөлөш тресының бухгалтерияһына килгәнсе байтаҡ урындарҙы ҡыҙырып ташланды шул, уны һиңә һөйләп-аңлатаһы түгел. Стаж да самалы булғас, миңә өндәшмәҫкә ҡарар ҡылғандарҙыр, күрәһең. Ары профком хужаһы менән һөйләшергә форсат сыҡманы, ҡайҙалыр ашыға ине, һинең турала белешергә итеп ауыҙымды асҡайным, потом, тип кенә ҡуйҙы. Уның ҡарауы, профкомдың секретаренән ҡайһы бер мәғлүмәтте һыҡтым: кисәлә бүләкләнеүселәр күп буласаҡ, тине, ҡайһы берәүҙәргә "атҡаҙанған"ды ла бирәләр икән. Шыпырт ҡына өҫтәл ҡырында ятҡан исемлеккә лә күҙ аттым, Мәхмүтов тигән фамилия ла күренеп ҡалды, ә бына исем-шәрифен абайлап өлгөрөлмәне. Һин түгелме икән ул, ә?

Көтөлмәгән яңылыҡтан тертләп китте Нур, тик үҙен ҡулға алып өлгөрөп, вайымһыҙ яуапланы:

- Нимә унда әҙәм ышанмаҫты лыбырҙайһың? Аяҡ күтәреп өйҙә ятҡанға миҙал таҡҡандарын күргән юҡ әле ошоға тиклем.

Ғәфүр ҙә ҡуйырҙан ҡуймай:

- Хәтерләйһеңме, пенсияға сығырҙан алда һиңә атҡаҙанған төҙөүсе исеменә дөкәминт тултырғайнылар?

- Тултырһалар ҙа үткәрмәнеләр бит. Начальник урынбаҫарына бирҙеләр ҙә, тресығыҙға бер генә квота ине, тинеләр.

- Ана шул дөкәминт ятып-ятып өҫкә ҡалҡып сыҡҡандыр әлеге мәлдә, яйы ла тап килеп тора, төҙөлөшкә һикһән йәш.

- Бүләкләү өсөн минән башҡа ла таҙ бөтмәгәндер!

- Миҙал тураһында хәбәр һалғасың әйтәйем, һуғыш осорондағы наградалар бөгөн ҡалҡып сыға, эйәләрен таба. Тәк што, һиңә миҙал тағыуҙары вполне вазмужна!

- Әлләсе...Бер ҙә генә лә ышанғы килмәй.

- Ғүмерең буйы шулай йомортҡанан йөй эҙләп икеләнгәнең инде. Иҫкәрттем, ҡалғанын үҙең ҡара, кеше араһына иҫке-моҫҡондо кейеп барып, һүҙҙең рәтен белмәй хәбәр һөйләп торма, тиеүем. Сығыш яһарға тура килһә, иң башта министрлыҡ башлығына рәхмәт күндер, шунан ары түбәнерәктәрен теҙ, ҡала хужаһы, төҙөлөш начальнигы ла онотолмаһын, һәр береһе ҡолағын ҡарпайтып тыңлай, исемдәре яңғырамаһа үпкәләй һалып баралар. Ҡайһы бер тантаналар ғүмерҙә бер тапҡыр ғына була, ул күк ҡабағы асылғандай балҡып китә лә һүнә, өлгөрөп ҡалһаң, өлөш эләгә, өлгөрмәһәң, һемәйеп ҡалаһың. Ярай, ҡорҙаш, белгәнемде өйрәттем, минән ҡалманы. Бирәйбә. - Трубкала ҡыҫҡа гудоктар ишетелде.

Тамам тыныслығын юғалтты Нур, киске сәй янында ла өндәшмәй уйланғандай итеп ултырҙы, йоҡларға ятҡас та бер нисә тапҡыр балконға сығып тәмәке быҫҡытып инде, шунан әүелийей башлаған ҡатынының май ҡунған бөйөрөнә ҡағылды:

- Һөйләшәһе-кәңәшләшәһе бар ине...

- Таптың ваҡыт, йоҡларға ятҡас. Сәй эскәндә ауыҙыңа йөҙөк йәшермәҫкә ине. Хәҙер килеп ете төн уртаһы ауышҡас, кәңәш кәрәк булып киткән. Мин һинең һымаҡ эшһеҙме! - тине Разия.

- Эшем эйәһе! - Яндырай холоҡло Нур елтәңләп сисенеп ташлап түшәккә ятты, юрғанды башынан аша тартты ла һыртын ҡуйҙы.

- Һеркәһе һыу күтәрмәй берәүҙең, йә, һөйлә, тыңлайым. - Һәр нимәнең төбөнә төшөп өйрәнгән Разия сыҙап ятамы инде, ҡатын-ҡыҙ ҡыҙыҡһыныуы еңеп ҡайырылды ла Нурҙың арҡаһына танауын терәне. - Миңә алмашҡа йәш кәләш алмаҡсыһыңмы әллә?

- Әрәмтамаҡты аҫырағаның да еткән. Йоҡла!

- Дежурство мәлендә ял эләкмәне шул, шуға ғына мыжыуым. Йә, ас серең де?

- Һиңә лә еңелдән түгел инде, артың ауырайған күптән, йәштәр ише осопҡунырлыҡ йәштә түгелһең. Күпме әйтәм, ял ит, тип. Икебеҙгә килгәндә бергә ҡушһаҡ, бирешмәҫ инек әле. - Нур ҙа ыңғайға төшкәндәй итте.

- Минең янбашта эшең булмаһын, йәме! - Разия түшәктән ҡабарып күренгән тирмәндәй осаһын юрған тартып боҫормаланы. - Илаһым, ғүмер буйы һүҙҙең рәт-сүрәтен белмәнең инде.

- Һүҙҙең рәтен белгән Ғәфүргә кейәүгә сығырға ине, йәш саҡта инәлеп,

күпме артындан ҡалмай тағылды. Бөгөнгә көндә пенсиялағы бухгалтер ҡатыны булып, рәхәтлек сигер инең. Өҫтәүенә, килеп тороп һаҡсыл, һәммәһен дебет-кредитҡа һалып, иҫәпләп, экономлы йәшәй.

- Ҡартайып теше төшкәнсе ҡуймаҫ инде. Шуны һөйрәй ҙә сығарасы.

- Сүтәки, әйт әле, нишләп Ғәфүрҙе түгел, мине һайланың йәш саҡта?

- Төпсөнмә, унының үҙем беләм!

- Белгәнгә һорайым да инде.

- Ҡартатай булғас, үҙенде маҡтатҡың килеп киттеме? Йә, маҡтайым улайһа: һин аҡыллы, гүзәл, эшһөйәр, ғаилә тип йәшәйһең. Ризаһыңмы? - Разияны шулай тине лә иренең ҡултыҡ аҫтына башын йәшерҙе.

- Бына бит, маҡтап ебәргәйнең, йәнем ирәмһеп китте. - Нур ҙа ҡатынының йомшаҡ көүҙәһен үҙенә тартып, юрған аша арҡаһынан тупылдатып һөйҙө. Тын ята биргәс, башлағанын яңыртты:

- Бая телефундан кем менән һөйләштем, беләһеңме?

- Һөйәркәң түгеллеген тучны беләм.

- Ғәфүр менән һөйләштем!

- Шунан? Һаман да шул бер балыҡ башымы?

- Әйҙә, арҡыры-торҡоро һөйләшмәйек, тыңлап бөт башта. - Нур хәбәренең мөһимлеген белдерергә теләп, тороп уҡ ултырҙы. - Элекке эш урынынан саҡырыу алдым, тигәйнем бит әле. Ғәфүр шуны белешкән. Тегендә ҙурҙан ҡубып үткәрмәкселәр икән юбилейҙы. Миңә лә награда тапшырыуҙары ихтимал.

- Буш хәбәрҙер, ҡарт-короно бүләклӛй һалып бармайҙар, йәнә, ялда ятҡандарҙы ҙурлау йолаһы бармы икән ул хәҙер?

- Кирегә һаплама инде, Разия! - Күңеленә инеп ояларға өлгөргән өмөтән һүңдергеһе килмәгән Нур ҡабаланып бүлдерҙе. - Ә нишләп ул саҡта исемлеккә минең фамилия теркәлгән?

- Кем әйтте?

- Кем булһын, Ғәфүрең инде.

- Нишләп ул минеке булһын? Ул буш ҡыуыҡҡа ышанғансы, яҙғы боҙға таяныуың хәйерлерәк.

Һуңғы әйтелгәндәргә ҡәнәғәт ҡалған Нур дәртләнеп уҡ китте:

- Әйҙә, былай итәбеҙ, ошо тантанаға Камилды, Данилды саҡырабыҙ, ул елгыуарҙарҙың ҡайтып күренмәгәненә нисә йыл, исмаһам, хәлде белеп китерҙәр. Раушания ҡыҙым менән Рөстәм кейәүҙәргә хәбәр ебәрербеҙ, Рәмилде лә үҙҙәре менән алһындар. Һин ризамы, ҡарсыҡ?

- Һин тигәндә мин ни...

- Әләйгәс, былай итәйек, ҡунаҡ килгәндә донъяңдың күрмәлекле булыуы фарыз, обойҙарҙы, тәҙрә ҡорғандарын яңыртайыҡ, аш, ванна бүлмәләренә кафель йәбештерәйек, кер йыуыу машинаһын Раушания мәктәпте бөтөргән йылды алғайныҡ, яңыртайыҡ шуны. Телевизор ҙа нух заманынан эшләп тора, шыйыҡ плазмалы, тигәндәре арыу тиҙәр түгелме һуң?

- Бынысама аҡсаны ҡайҙан табырбыҙ?

- Әҙерәк төйнәнгән, теймәҫлек запаска тигәне кассала ята түгелме, шунан әҙерәк кредит алып ебәргәндә...

- Ҡунаҡтарҙы һыйлауҙы ла хәл итергә кәрәк бит.

- Арыу ғына ресторан табып, ундағы хаҡтарҙы ҡарап ҡайтырға тура килер.

- Мулыҡма, йәме, ресторанға барып, унда ярты мөлкәтте ҡалдырып китәһем юҡ! Фатирҙы ремонтлайыҡ, тиһең бит, ризамын, тимәк ҡунаҡтарҙы ла ошонда һыйларбыҙ, зал иркен үк булмаһа ла, күңел һыйһа, урын етә ул, ят кешеләрҙе саҡырмайбыҙ әле.

- Үҙебеҙҙекеләр ҙә ул. Тик Рөстәм кейәү фән кандидаты, Камилдың ҡатыны урыҫ, Данилдыҡы сүселдәк татар...

- Булһын, моғайын, улар ҙа ожмах баҡсаһында тыумағандарҙыр. Ҡыҙыбыҙға яратып өйләнеп, уларыбыҙға тиңһенеп кейәүгә сыҡҡас, беҙҙе лә, йәшәгән еребеҙҙе лә үҙ итергә бурыслылар.

**(Дауамы бар).**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ШАҒИР ДОНЪЯҺЫНА СӘЙӘХӘТ

**9 февралдә Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры коллективы Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың тыуыуына һикһән йыл тулыу айҡанлы "Февраль. Буран... Шағир донъяһына сәйәхәт" тип аталған яңы тамаша тәҡдим итте. Был тамашаны ижад итеүгә, ойоштороуға туранан-тура ҡатнашлы булған ижадсыларға үҙ хистәре, тәьҫораттары, шағирға мөнәсәбәте тураһындағы фекерҙәре менән уртаҡлашыуҙарын һорап мөрәжәғәт иттек.**



Шамиль Яубаҫаров фотоһы.

**Хөрмәт ҮТӘШЕВ, тамашаның режиссеры, Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең халыҡ артисы, С.Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты:** Рәми Ғарипов - башҡорт мәҙәниәтендә айырым бер күренеш. Уның ижады ла, шәхесе лә, яҙмышы ла, шиғырҙары ла - барыһы ла уникаль. Шуға күрә лә театр коллективы шағирҙың 80 йыллыҡ юбилейын үҙенсәлекле, күркәм бер сара менән билдәләү тураһындағы идеяны күтәреп алды. Театрҙың, әлбиттә, үҙ үҙенсәлектәре һәм ҡанундары бар. Рәми ағайҙың рух бөйөклөгөн һәм эске кисерештәрен тулыраҡ сағылдырыу өсөн уның үҙе яҙған көндәлектәрен файҙаландыҡ. Шағирҙың көндәлектәрен һәм архив материалдарын уҡыһаң, уның рух ныҡлығына хайран ҡалырлыҡ. Уларҙы, ғөмүмән, тыныс ҡына уҡып булмай. Теге йәки был шиғырының тыуыу тарихын ғына түгел, бала ғына кешенең ни рәүешлерәк оло шәхескә әүерелеүен күҙәтеү ҙә бик ҡыҙыҡлы һәм фәһемле. Был тамаша, дөйөм алғанда, театрыбыҙҙың оло ағайыбыҙ рухы алдында баш әйеүе булды. Артистарыбыҙҙың һәр ҡайһының тамашаны күтәреү өсөн ҙур тырышлыҡ һалыуы, шағирҙың ижадын һәйбәт белеүе һоҡландырҙы хатта. Бигерәк тә йәш быуын өсөн әһәмиәтле спектакль килеп сыҡты. Ябай ғына ауыл малайының ни тиклем маҡсатҡа ынтылышлы булыуы, ҙур теләк-ынтылыштар менән янып йәшәүе һәм, ахыр килеп, шиғырҙары телдән төшмәгән оло шағир дәрәжәһенә күтәрелеүе - ниндәй һоҡландырғыс өлгө бөгөнгө йәштәргә.

**Зөһрә БУРАҠАЕВА, сценарий авторы, Рәми Ғарипов һәм Шәйхзада Бабич премиялары лауреаты:** Рәми Ғарипов исеме минең тормошомдан айырылғыһыҙ. Атайым, ғалим-геолог Диҡҡәт Бураҡаев менән улар бер ваҡытта балалар йортонда белем алғандар, артабан бер ваҡытта Мәскәүҙә уҡығандар, дуҫ булғандар. Әсәйем менән атайымдың туйында Рәми Ғарипов шаһит булған, ошо тантанаға арнап яҙған шиғыры ла бар. Әсәйем- яҙыусы Мәрйәм Бураҡаева, Рәми Ғарипов, шағирә Кәтибә Кинйәбулатова заманында бергәләп "Башҡортостан ҡыҙы" журналын ойоштороғандар, бергә эшләгәндәр. Шуға ла бала саҡтан Рәми ағай тураһындағы иҫтәлектәр менән үҫтем, үҫкәс инде уның шиғырҙары менән таныштым. Тора-бара ул минең иң яратҡан шағирыма әйләнде. Мин Рәми Ғарипов уҡыған мәктәптә лә белем алдым, уның кеүек Мәскәүҙәге Әҙәбиәт институтын тамамланым. Артабан шағирҙың ҡатыны Надежда Васильевна менән берлектә Рәми Ғариповтың ун дүрт йәштән алып ун һигеҙ йәшенә тиклем яҙған көндәлектәрен нәшергә әҙерләү, шағирҙың архивы менән яҡындан танышыу - былар барыһы ла миңә ошо оло шәхесте тәрәнерәк аңларға ярҙам итте. Бынан биш йыл элек Рәми Ғариповтың хөкүмәт кимәлендәге юбилейына сценарий әҙерләгәндә лә, киностудияла төшөрөрмөн тип, өс сериялыҡ телефильм өсөн сценарий яҙғанда ла шағирҙың көндәлектәрен, шиғырҙарын ҡат-ҡат уҡырға тура килде. Шуға ла театр етәкселеге миңә был тамашаға сценарий яҙырға тәҡдим иткәс, ваҡыт бик аҙ биреләүгә ҡарамаҫтан, был яуаплы эшкә тотондом.

**Артур ҠӘБИРОВ, Рәми Ғарипов ролен башҡарыусы:** Бынан ун йыл элек мин Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында уҡыным. Шағирҙың етмеш йыллығына ҡуйылған тамашала Рәми булып уйнаным. Шағир кеүек, Мәскәүҙә белем алдым һәм Мәскәү минең дә рухты нығытты. Тамашала Рәми Ғарипов исеменән әйтелгән һәр һүҙ минең тойғоларым, эске донъямдағы кисерештәрем менән тап килә. Бәлки, мин үҙ фекерҙәремде улай асыҡтан-асыҡ әйтә лә белмәйемдер, әммә эстән шулай уҡ телем, халҡымдың киләсәге, тип янам. Өйҙә лә башҡортса ғына һөйләшеүҙе мотлаҡ тип ҡуйғанмын. Улым Тимерханға хәҙер инде өс йәш, ҡатыным Лилиә лә, Рәмизең Надяһы кеүек, миңә фекерҙәш. Сәхнәлә Рәми Ғариповты уйнау - оло бәхет һәм бик-бик ҙур яуаплылыҡ.

**Фирғәт ҒАРИПОВ, Рәми Ғарипов ролен башҡарыусы:** Рәми ролен уйнағанда үҙемдең күңелдә лә бик күп хистәр ҡайнай, бик күп яңы фекерҙәр тыуа. Шағирҙың яҙмышына, ижадына битараф ҡалыу мөмкин түгел. Һоҡландыра ла ул, ниндәйҙер үкенес тә тыуҙыра. Ҡайһы саҡ ҡапма-ҡаршылыҡлы, үкенесле уйҙар тынғы бирмәй. Уның замандаштары араһында әле лә иҫән булған һәм әллә ни ҡыйынлыҡтар кисермәй йәшәгәндәр ҙә байтаҡ таһа. Ни өсөн Рәми Ғарипов алдына тауҙай ауырлыҡтар өйөлгән, ни өсөн ул был донъянан бик иртә киткән? Ул тиклем асыҡтан-асыҡ һөйләмәй, ҡайһы саҡта өндәшмәй ҡалып, үҙен һаҡлап йәшәһә, күберәк әҫәрҙәр ижад итһә, нимә булыр ине? Ул саҡта ул Рәми булып ҡалыр инеме һуң? Әллә заман намыҫы булып, ундай кешеләр дәүләп яңырға тейеш микән? Шулайҙыр. Рәми Ғарипов тел өсөн, халыҡтың киләсәге өсөн көрәш өлгөһө булып тора бит бөгөнгө замандаштарға.

**Илшат ЯХИН, тамашаның композиторы:** Миңә икенсе ҙур шәхескә бағышланған тамашаға композитор булыу бәхете тейҙе. Тәүгеһе - "Зәки Вәлиди" спектакле ине. "Февраль. Буран..." тамашаһын эшләүе еңел булды, күрәһең, Рәми ағайҙың һәйбәт кеше булыуы ла, уның үҙенсәлекле ижади мираҫы ла быға булышлыҡ иткәндер. Көйҙәр, йырҙар тыуып ҡына торҙо. Әгәр элек мин Рәми Ғариповтың ижады менән генә таныш булһам, тамашаны эшләгәндә уның тормошо менән дә ныҡлап таныштым һәм таң ҡалдым. Уның башҡортлоғо, илһөйәрлеге, телһөйәрлеге - иҫ китмәле күренеш бит! Рәми Ғарипов хаҡлыҡты, дөрөҫлөктө юғары ҡуйған, һәм унһыҙ үҙенең ижадын да, булмышын да күҙ алдына килтермәгән. Шағирҙың шул замандарҙа тотош системаға ҡаршы тороуы, дауылдарға ҡаршы ҡурҡмай барыуы мине һоҡландыра, унан үрнәк алып, шулай уҡ янып ижад итеүгә илһамландыра.

✓ *Ғәҙәттә, кеше көн һайын кофе, сәй, тонусты күтәреүсе башҡа төрлө эсемлектәр, шоколадтан байтаҡ ҡына кофеин ҡуллана. Шуныһын да белеп ҡуйығыҙ: ҡара сәйгә ҡарағанда уның йәшелендә кофеин күберәк.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ИЗГЕЛЕК ЭШЛӘҮ...
## кәйефте күтәрә

■ Көслө стресс кисергәндән һуң, кеше шунда уҡ ятып йоҡлаһа, ул уны еңелерәк кисерәсәк. АҠШ-ның Массачусетс университетында үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, бындай ваҡытта иң яҡшы һәм тәьҫирле дарыу булып йоҡо тора. Әгәр ҙә кеше юлда берәй хәл-ваҡиғаның шаһиты булған йәки үҙе аварияға эләккән икән, йоҡлап алғандан һуң уның эмоциональ торошо күпкә яҡшырасаҡ.

■ Нью-Йоркта урынлашҡан медицина үҙәктәренең береһендә кеше өсөн иң зыянлы һөнәрҙе асыҡлағандар. Үҙенең эш сәғәттәрен калориялы һәм туҡлыҡты аҙыҡтар араһында үткәреүсе ашнаҡсы һөнәре сәләмәтлеккә иң насар тәьҫир итеүсе һөнәр тип табылған. Бигерәк тә ҙур рестарандарҙа эшләүсе ашнаҡсыларға еңелдән тура килмәй, ябай кеше көнөнә 2 меңдән 3 мең калорийға тиклем ҡулланһа, улар 4 мең калорий "ашай".

■ Башҡалар өсөн изге эштәр эшләп, беҙ үҙебеҙ өсөн ыңғай тойғолар алабыҙ, кәйефебеҙ, үҙ-үҙебеҙгә ҡуйған баһабыҙ күтәрелә. Хәҙер ғалимдар изгелек эшләүҙең депрессия кеүек аффектив хәлдәрҙе дауалауҙа терапевтик баһаһы барлығын иҫбатлаған. Бындай ауырыуҙарҙы дауалау менән шөғөлләнгән белгестәр әйтеүенсә, изге эштәр эшләү иң һөҙөмтәле һәм осһоҙло дарыу һанала. Кемгәлер ниндәләлер ярҙам итеү һөҙөмтәһендә кеше 10 минут самаһы юғары кәйефтә йөрөй. Хроник депрессиялы кешенең хәлен яҡшыртыу өсөн ошо ла етә, ти табиптар.

■ Арҡаға ятып йоҡлау төнгө ял өсөн иң идеаль вариант һанала. Бындай поза арҡа һәм муйында ауыртыу барлыҡҡа килеүҙән һаҡлай, йыйырсыҡтар булдырмай. Шулай уҡ ҡабырғала йоҡлау яҡшы. Ауырлы ҡатындарға табиптар һул ҡабырғаларында йоҡларға кәңәш итә. Иң зарарлы поза - эскә ятып йоҡлау. Йыйырсыҡтарҙан тыш, муйын һәм арҡа йәрәхәте алыу ҡурҡынысы бар, бынан тыш, арҡа һәм быуындар бөтөнләй ял итмәй.

■ British Medical Journal журналы, фармацевтик компаниялар матди килем табыу өсөн "уйлап тапҡан" ауырыуҙарҙың һаны 200-ҙән ашып киткән, тип билдәләй. Уларҙың күбеһе организмын йәш итеп һаҡлап ҡалырға теләүсе хәлле кешеләр өсөн тәғәйенләнгән. Иң күп "ауырыуҙар" Америкала уйлап табыла. Табиптар тормошо тураһындағы популяр сериалдарҙан күренеүенсә, әгәр ҙә мәктәптә бала үҙен әүҙем тота, күп йүгерә һәм уҡырға теләмәй икән, мәктәп психологы уны хроник психик ауырыуҙар исемлегенә яҙып ҡуйыуы ла ихтимал. Бындай балаларға мотлаҡ транквилизаторҙар һәм стимулләштереүсе дарыуҙар тәғәйенләнә. Дөйөм алғанда, Америкала йәшәүсе һәм "әүҙем тормош" алып барыусы һәр икенсе кеше антидепрессант курсы үтә. Ә Рәсәйҙә был ысул менән башлыса косметик компаниялар аҡса эшләй. Шулай уҡ остеохондроз кеүек ауырыуҙарҙы дауалаусы препараттар һатып алыу өсөн Рәсәй ярты йыл эсендә 12 миллион һумдан ашыу аҡса тотона. Реклама маҡтаған антибактериаль һабын менән салфеткалар ҙа ысынбарлыҡта беҙҙең ҡулдарҙағы бактерияларҙың һанын кәметмәй.

*ТАБИП КӘҢӘШ БИРӘ*

**Ҡышҡы осор йылдың иң ҡараңғы миҙгеле, тип йөрөтөлә. Ысынлап та, ҡояш һүрәнәйә, эңер бик иртә төшә - ҡыҫҡаһы, тәүлектең дүрттән өс өлөшө ҡараңғылыҡта үтә. Шуға күрә лә ҡыш - йоҡларға яратыусылар өсөн бик уңайлы осор. Һәр кемгә мәғлүм булыуынса, ҡышҡы йоҡо айырыуса "тәмле" була. Иртәнсәк тороуы ҡыйынлаша, ҡайһы берәүҙәрҙе көн оҙоно йоҡо баҫып интектерә. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, кешелектең байтаҡ өлөшө йоҡоһоҙлоҡтан яфалана. Уның сәбәптәре ниҙә һуң? Йоҡоһоҙлоҡтан ҡотолоу саралары бармы? Һәм, ғөмүмән, йоҡо кеше тормошонда ниндәй роль уйнай? Ошо һәм башҡа ҡайһы бер һорауҙарға Өфө ҡалаһының 5-се ҡала клиник больницаһы врач-психотерапевты Резедә НАГАЕВА яуап бирә.**



# ИҢ СИФАТЛЫҺЫ...
## төн уртаһына тиклемге йоҡо

**➔ Йоҡоға әүәҫлек буйынса кешеләрҙе "өкөләр" һәм "һабан турғайҙары"на бүлеп йөрөтөү нигеҙлеме? Йоҡоноң сифаты менән кешенең характер үҙенсәлектәре араһында бәйләнеш бармы?**

- Йоҡо кешегә һыу һәм һауа кеүек кәрәк. Сөнки ул туранан-тура организмдың иммун системаһы менән бәйле. Кеше йоҡоһоҙлоҡтан ни тиклем күберәк яфаланһа, ҡандағы иммун күҙәнәктәре шул тиклем аҙыраҡ була. Йоҡлаған ваҡытта организм ял итә, яңыра, көс туплай. Йоҡо шулай уҡ нервылар системаһы менән дә тығыҙ бәйле. Англия лабораторияларының береһендә йәшлек һәм матурлыҡ серҙәренең иң мөһиме йоҡо ла булыуын да асыҡлағандар. Бында дөрөҫлөк барҙыр, моғайын, сөнки йоҡоноң сифаты иң тәүҙә һаулыҡ торошонда ғына түгел, кешенең ҡиәфәтендә, йөҙөндә лә сағыла. Кеше үҙен сәләмәт тойһон өсөн йоҡоға күпме ваҡыт бүлергә кәрәк һуң? Белгестәрҙең ҡайһы берҙәре, кеше йоҡоға үҙ ғүмеренең өстән бер өлөшөн сарыф итә, тип раҫлай. Шул уҡ ваҡытта 2-4-әр сәғәт кенә йоҡлап та, үҙҙәрен арыу-талыуһыҙ, эшкә һәләтле тойған кешеләр ҙә күп.

Өс йәшкә тиклемге балалар өсөн, мәҫәлән, 12 сәғәт йоҡо норма иҫәпләнһә, ун йәштәгеләргә 9 сәғәт тә етә. Ә, ғөмүмән, кеше олоғая барған һайын, уға оҙайлыраҡ йоҡо талап ителә. Төнгө тип кешеләр ("өкөләр") була, уларҙың эш һәләттәре тап төнгө ваҡытта яҡшы һөҙөмтә бирә, был фәнни яҡтан да нигеҙләнгән. Әлбиттә, кәрәк икән, улар "һабан турғайы"на ла әүерелә ала, ләкин нигеҙҙә улар өйрәнелгән ҡалыптарына тоғро ҡалыусан. Шуны ла иҫтә тоторға кәрәктер: иң сифатлыһы - төн уртаһына тиклемге йоҡо. Шулай уҡ көн дә бер үк ваҡытта ятыу һәм тороу ҙа мөһим. Фәҡәт шул саҡта - йоҡо режимын һаҡлағанда ғына йоҡоһоҙлоҡ кеүек яфанан ҡотолорға була.

**➔ Йоҡоһоҙлоҡ сирме? Сәбәптәре һәм уны иҫкәртеү саралары ниндәй?**

- Йоҡоһоҙлоҡ, йәғни белгестәр телендә инсомния менән яфаланыуҙы сир тип әйтеп булмаһа ла, ҡайһы саҡ ул ниндәйҙер сирҙең күрһәткесе булыуы ихтимал. Йоҡоһоҙлоҡ менән бик күп кеше интегә, йыш ҡына уның сәбәптәре иҫәбенә стресс, хәүеф йәки депрессияны индерергә була. Йыш ҡына психик йәһәттән сәләмәт кеше лә тормош ҡыйынлыҡтарына осраған мәлдәрҙә ҡыҫҡа ваҡытлы, ләкин киҫкен йоҡо боҙолоу хәлендә ҡалырға мөмкин. Ә даими рәүештә йоҡоһоҙлоҡҡа тарыусылар өлкән йәштәге кешеләрҙең өстән бер өлөшөн тәшкил итә, йәғни 10-15 процентҡа яҡын кеше хроник йоҡоһоҙлоҡтан яфа сигә. Өлкән йәштәге ирҙәрҙең 25 проценты, ә ҡатын-ҡыҙҙарҙың 50 проценты йоҡолары менән ҡәнәғәт булмауын белдерә. Пациенттарҙың 25 проценттан ашыуы йоҡо дарыуын даими рәүештә йәки йыш ҡуллана. Нисек кенә булмаһын, йоҡоһоҙлоҡ сәбәптәрен бары тик табип ҡына асыҡлай ала һәм тейешле дауаланыу ысулын тәғәйенләй.

Йоҡоһоҙлоҡ сәбәптәре күп төрлө. Әйтеп кителеүенсә, иртәгәһе көндә буласаҡ эшлекле осрашыуҙар, имтихандар, күп кеше алдында яһаласаҡ сығыш йә булмаһа спорт ярыштары - ҡыҫҡаһы, алда торған мөһим ваҡиғалар кешене ҡыҫҡа ваҡытҡа йоҡонан яҙҙырыуы ихтимал. Бындай ваҡиғалар һуңынан еңел үтеп китә, онотола. Ә хроник йоҡоһоҙлоҡ сәбәптәрен тәрәндәнерәк эҙләргә тура килә. Ғөмүмән, аҙнаһына ике тапҡырҙан да артығыраҡ насар йоҡлайһығыҙ икән, шул уҡ ваҡытта көндөҙ йоҡо баҫһа, иғтибарығыҙҙы туплау ауырлашһа, көйәләнеүсән була башлауығыҙҙы һиҙһәгеҙ, табипҡа мөрәжәғәт итергә кәрәк. Ә инде бындай хәлегеҙҙе үҙегеҙ ҙә ҡулға алырлыҡ тип иҫәпләйһегеҙ икән, түбәндәге сараларҙы ҡулланып ҡарағыҙ:

• Иң беренсе йоҡо режимын һаҡлауға иғтибар итегеҙ. Биологик сәғәтегеҙҙең норманан тайпылмауын теләһәгеҙ, көн дә (хатта ял көндәре лә) бер үк ваҡытта ятып, нисә сәғәт йоҡлауығыҙға ҡарамаҫтан, бер үк ваҡытта торорға ғәҙәтләнегеҙ.

• Йоҡо ваҡытын кәметегеҙ. Кеше ғәҙәттә йоҡоға кәрәгенән артығыраҡ ваҡытын бүлергә ярата. Был аңлашыла ла: йоҡо, халыҡ әйтмешләй, балдан татлы, тик йоҡоһо ҡасҡан кешеләр өсөн түгел, әлбиттә. Шуға күрә күпмелер ваҡытҡа иртәрәк тороу киләһе йоҡо мәлен сифатлыраҡ итәсәк.

• Бер ваҡытта ла үҙегеҙҙе ирекһеҙләп йоҡларға мәжбүр итмәгеҙ. "Әгәр берәй ғәмәлегеҙ килеп сыҡмай икән, шуны уҡ ҡат-ҡат эшлә", - тигән ҡағиҙә был осраҡ өсөн түгел. Йоҡлай алмайһығыҙ икән, көйәләнмәгеҙ, үҙегеҙгә берәй шөғөл табығыҙ: китап уҡырға, телевизор ҡарарға йәки музыка тыңларға мөмкин.

• Йоҡоһоҙлоҡтан ҡурҡмағыҙ. Күптәрҙә "әүенгә" китер алдынан, тағы йоҡлай алмам инде, тигән сираттағы ҡурҡыу тойғоһо башлана, шуға күрә үҙеңде яҡшы,тыныс "тулҡынға" көйләй белергә өйрәнегеҙ.

• Йоҡлар алдынан мөһим мәсьәләләр хәл итмәгеҙ.

• Даими рәүештә физик күнегеүҙәр менән шөғөлләнеүҙе һәйбәт ғәҙәтегеҙгә әүерелдерегеҙ. Уның өсөн күп ваҡыт кәрәкмәй: аҙнаһына 3-4 тапҡыр 30-60 минут буйына шөғөлләнегеҙ. Бының өсөн иң һәйбәт ваҡыт - 17-20 сәғәттәр араһы.

• Ғәҙәттә, кеше көн һайын кофе, сәй, тонусты күтәреүсе башҡа төрлө эсемлектәр, шоколадтан байтаҡ ҡына кофеин ҡуллана. Шуныһын да белеп ҡуйығыҙ: ҡара сәйгә ҡарағанда уның йәшелендә кофеин күберәк. Шуға ла ятыр алдынан кофеинлы эсемлек һәм ризыҡтан баш тартығыҙ.

• Ас ҡарынлай йәки, киреһенсә, ныҡ туйған килеш йоҡларға ятмағыҙ. Йоҡларҙан 2-3 сәғәт алда туҡланыу яҡшыраҡ. Кискелеккә ашҡаҙан-эсәк трактында газ барлыҡҡа килтергән йәшелсәнән шулай уҡ баш тартығыҙ. Иң һәйбәте - банан йә берәй алма ашап ятығыҙ.

• Тауыш, тәҙрә аша йәки күрше бүлмәнән төшкән яҡтылыҡ, өйҙәге һауа температураһы ла йоҡо сифатына ныҡ тәьҫир итә. Бындай нәмәләр ҡамасаулаһа, йоҡо урынын фатирҙың иң тыныс урынында һайлағыҙ, тәҙрәләргә ауыр ҡорғандар элегеҙ. Бүлмәлә йылылыҡ 20 градустан да артыҡ булмаһын.

**➔ Ҡайһы берәүҙәр йоҡлай алмаһа, шунда уҡ ниндәйҙер дарыу эсергә тотона. Шул уҡ ваҡытта беҙ мөғжизәле хазина - халыҡ медицинаһы сараларын онотоп та ебәрәбеҙ. Ошо йәһәттән ниндәй кәңәштәр бирер инегеҙ?**

- Дөрөҫ әйтәһегеҙ, халыҡ аҡылы - хазина. Бер яҡтан, халыҡ аҡылы шуға ла ишаралай: әгәр күңелең тыныс, выжданың таҙа булһа, йоҡоһоҙлоҡ тигән дошман һине бер ваҡытта ла әсире яһай алмай. Ләкин донъя бит ул - беҙҙең күңел йә выжданға бәйле булмаған башҡа бик күп сәбәптәр, хәлдәр килеп сығып ҡына тора. Шуға ла һәр кемгә лә медитация алымдарын үҙләштереү зыян итмәҫ ине. Үҙ-үҙеңде яҡтыға, яҡшыға, изгелеккә көйләү, аят, доғалар уҡыу күңелде бик тынысландыра. Йоҡо алдынан бал ҡушып йылы һөт йә мәтрүшкә сәйе эсеү файҙалы. Яңыраҡ бер пациентым шундай кәңәше менән уртаҡлашып китте. Бәлки, кем өсөндөр файҙаһы тейер:

• Аптеканан арыҫлан ҡойроғо, энәлек (боярышник), бесәй үләне (валерьяна), пион төнәтмәһе һәм корвалол һатып алығыҙ ҙа шуларҙың бөтәһен бер быяла һауытҡа бушатығыҙ һәм бутағыҙ. Йоҡлар алдынан көн дә 1-әр балғалаҡ ошо төнәтмәне 3 ҡалаҡ ҡайнатып һыуытылған һыуға һалып эсегеҙ. Йоҡоғоҙ тыныс булыр.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА**
**әңгәмәләште.**

*БЕҘҘЕҢ ЗАМАН ГЕРОЙЫ*

# ТҮШ КЕҪӘБЕҘҘӘ ЛӘ...

## рухыбыҙҙа ла Рәми шиғырҙары



**Рәми Ғариповтың шиғырҙары айырыуса йәштәр күңеленә яҡын һәм бөгөн улар шағирҙа үҙ фекерҙәшен, яҡын тиңдәш дуҫын, кәңәшсеһен күрә. Йәштәр, үҫмер ҡыҙҙар-егеттәрҙең шағирҙы замандаш, тере шәхес итеп күҙ алдына килтереү тойғоһо ҡайҙан килә? Рәми Ғарипов йәш быуындың иң яратҡан шағиры булыуын нисек аңлатырға? Был хаҡта ҡыҙҙар-егеттәр үҙҙәре әйтер.**

**Ләйсән ЗАКИРОВА, БДУ студенты:** Рәми Ғарипов ижадында тап йәштәрҙе ҡыҙыҡһындырған темалар, һорауҙар сағылыш таба. Ул - мөхәббәт, йәшлек, студенттар тормошо, яҡты киләсәк тураһындағы хыялдар. Икенсенән, шағир ябай тел менән яҙа. Әҫәрҙәрендә ҡатмарлы, аңлашылмаған һүҙҙәр юҡ. Көндәлек тормошта бөтәбеҙ ҙә ҡулланған һәм тәү ҡарашҡа ябай ғына булып күренгән һүҙҙәрҙе шағир иҫ киткес оҫталыҡ менән шундай матур шиғри телмәргә әйләндерә. Шуға улар еңел генә ятлап алына, хәтерҙә тиҙ ҡала. Өсөнсөнән, Рәми Ғарипов шиғырҙарын ситтән күҙәтеүсе булып ҡына яҙмай, һәр юлын, һәр һүҙен ул күңеле аша үткәреп, үҙе кисереп кенә тыуҙыра. Белмәйенсә яҙмай, белеп яҙа. Ижадында тормош ысынбарлығы күренә. Һин күргән-кисергәндәрҙе шағир әле генә ҡағыҙға теркәп ҡуйған кеүек. Шуға ҡыҙҙар-егеттәр Рәми Ғариповты уҡығандан һуң кемгәлер тойғоларын уртаҡлашҡан, серҙәре менән бүлешкән һымаҡ хис кисерә. Йәштәрҙең күбеһе шағирҙың тормош юлын да, бәлки, белмәйҙер. Әммә ижадынан уның ниндәй шәхес булыуын күҙ алдына килтерәләр. Шағирҙың шәхси сифаттары иһә ҙур һоҡланыу тойғоһо уята, шуның менән дә ул яҡын беҙгә. Һәм йәштәр Рәми Ғариповҡа оҡшарға, унан өлгө алырға тырыша. Ул ысын мәғәнәһендә беҙҙең заман геройы.

**Айгөл ЙӘМИЛЕВА, БДПУ студенты:** Рәми Ғариповтың шиғырҙар йыйынтығын гел үҙем менән алып йөрөйөм. Ауыр саҡтарҙа, эс бошҡанда, уның китабын ҡулыма алып шиғырҙарын уҡыһам, көс ингәндәй була. Башҡа бик күп йәштәр ҙә, Рәми Ғариповтың ижадына мөрәжәғәт итеп, шундай тойғолар кисерәләр. Сөнки шағирҙың әҫәрҙәре яҡтылыҡ, киләсәккә ышаныс менән һуғарылған. Өҫтәүенә, шағир үҙе ысын романтик булған. Был уның шиғырҙарынан асыҡ күренә. Ә романтика йәштәр күңеленә бик яҡын тойғо, улар гел шуға тартыла. Тимәк, шағирҙың ижады йәштәр күңеленә ауаздаш.

Шиғырҙары туранан-тура шәхси сифаттарына бәйле. Шуға күрә йәштәр Рәми Ғариповтың ижадын ғына түгел, үҙен көслө һәм бөйөк шәхес булараҡ та ярата. Уны бөтәһе лә ысын ир-уҙаман тип белә. Ҡыҙҙарға егетлеге, үткерлеге оҡшайҙыр. Ә егеттәр уны халҡы өсөн үҙен ҡорбан иткән беҙҙең заман геройы тип күҙ алдына килтерә, ошо идеаль образда рухланыу сығанағы таба.

**Илмир ЮЛДАШБАЕВ, физик-программист, аспирант:** Рәми Ғариповтың һәр шиғырында тиерлек азатлыҡ тойғоһо ярылып ята. Йәштәргә ул шуныһы менән яҡын, актуаль. Элек билдәле шағирҙарҙың әҫәрҙәрен дәфтәрҙән дәфтәргә күсереп ҡулдан-ҡулға йөрөткәндәр. Хәҙер дәфтәрҙе компьютер алыштырҙы. Һәм тап Рәми Ғариповтың шиғырҙары интернет селтәрендә "ҡулдан-ҡулға" күсеп йөрөй. Кем интернет менән дуҫ, белә: йәштәр үҙҙәре шағирға арналған бит асҡан. Унда яңынан-яңы шиғырҙар индерелеп тора. Шулай уҡ был интернет-биттә уның һүҙҙәренә яҙылған йырҙарҙы, ғөмүмән, Рәми Ғарипов менән бәйле булған мәғлүмәттәрҙе табырға була. Шулай ҡыҙҙар-егеттәр шағирҙың мираҫын туплай, ижадын популярлаштыра. Рәми Ғариповтың электрон китабы ла бар. Күбеһе уның шиғырҙарындағы айырым фекер-юлдарҙы тормош девизы итеп ала.

Күптәр кеүек үк, мин дә Рәми Ғарипов ижадына мәктәп йылдарында ғашиҡ булдым. Бөгөн дә ул шиғырҙарҙан айырылмайым. Китаптарын нисә ҡат уҡып сыҡҡанмындыр, үҙем дә әйтә алмайым. Эштән, уҡыуҙан арып ҡайтҡан саҡтар була. Шунда Рәми Ғариповтың шиғырҙары хис-тойғоларҙы, уйҙарҙы тәртипкә килтерергә ярҙам итә. Егеттәребеҙгә уның дөрөҫлөккә тоғро ҡалыуы, үҙ һүҙен һүҙ итеү кеүек сифаттары өлгө булып тора.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Рәми Ғарипов - азатлыҡ йырсыһы, йәшлек йырсыһы. Шуның менән йәштәр күңелен арбай ул. Шағир арабыҙҙа юҡ тип әйтергә тел әйләнмәй. Ул һәр саҡ беҙҙең менән - ижады менән йөрәктәребеҙҙә йәшәй. Мәңге йәш булып...**

**Мөнир ИҠСАНОВ яҙып алды.**

*МӨҒЖИЗӘЛӘР ЗАМАНЫ*



# КОСМОЭНЕРГЕТИКА ҺӘМ СӘЛӘМӘТЛЕК

## Вампирлыҡ (убырлыҡ) тураһында

Энергетик убырлыҡ - башҡаларҙың энегияһы иҫәбенә икенсе берәүҙең туйыныуы. Ғәҙәттә, нимәнәндер яфаланыусылар, мыжыҡтар, ҡәнәғәт булмаусылар, зарланыусылар һәм асыулы кешеләр вампир була.

Уларҙың маҡсаты бер - үҙ ауранды туйындырыу! Үҙенең "бәхетһеҙ тормошо" тураһында һөйләп, убырҙар теләктәшлек эҙләй. Сөнки теләктәшлек, хәлдәренә инеү, йәлләү улар өсөн шәп аҙыҡ булып тора. Әммә илаһи, таҙа энергияны тартып алыу мөмкин түгел. Бары тик бысраҡ энергияны ғына үҙенә тартырға мөмкин. Шуға күрә, убырҙарҙан ҡурҡырға ярамай.

Әгәр кеше (вампир) яҙмышына зарлана икән, тимәк, ул Аллаһҡа зарлана. Был тормошта нимә генә булһа ла Аллаһ ихтыяры менән тормошҡа аша. Һеҙгә бындай һөйләшеүҙе нимәгә дауам итеп торорға? Уларға үҙҙәренең кире уйҙары, эмоциялары, теләктәре арҡаһында ыҙа сигә икәнен аңлатығыҙ. Сағылыш законына ярашлы, барыһы ла кире ҡайта! Рухи әҙәбиәт тәҡдим итегеҙ, ни тиклем зарланалар, шул тиклем проблемаларын нығыталар, матдиләштерәләр икәнлеген аңлатығыҙ.

Бәхетһеҙ кеше үҙенең тормошон үҙгәртмәй, яфаланыуҙарының сәбәбен алып ташламай тороп, зарҙары туҡтамаясаҡ. Тап шуға күрә зарланыу файҙаһыҙ ғына түгел, хәүефле лә.

Бер кемде лә йәлләргә ярамай, һәр кем нимәгә лайыҡ - шуға эйә. Аллаһ ғәҙел! Әгәр һеҙҙең йәлләү тойғоһо булмаһа, вампирҙар яҡын килә алмаҫ.

Беҙҙең уйҙарыбыҙ матди. Әгәр кемдер зарланһа, мәҫәлән, ҡайһылыр ере ауырта, башҡалар ирекһеҙҙән уның шул ағзаһын сирле итеп күрә һәм, үҙҙәре лә аңламаҫтан, проблеманы матдиләштерә. Шуға күрә зарланыу хәүефле. Кем яҙмышына зарлана, шул уны ҡатмарлаштыра ғына икәне күптән билдәле.

Беҙ, үҙебеҙ ҙә аңламаҫтан, ҡайһы бер үлгән кешеләрҙе лә убырға әүерелдерәбеҙ - ерләү ваҡытында илауыбыҙ, әйбер йыртыуыбыҙ, сәс йолҡоуыбыҙ менән үлгән кешенең эфир тәне тарҡалыуына тотҡарлыҡ итәбеҙ, уны Ергә яҡын тотабыҙ. Үлгәндәр (дөрөҫөрәге, уларҙың сираттағы тәнде ҡалдырып киткән йәне) икенсе өлкәләрҙә булырға тейеш.

Убырҙарҙың сафын тулыландырырға ҡайһы бер халыҡтарҙағы мәжүсилек йолаларын башҡарыу, йәғни үлгәндәрҙе ашатыу - уның ҡәберенә ризыҡ һәм эсергә ҡалдырыу, иҫкә алыуҙар үткәреү, кеше үлгән бүлмәгә икмәк һыныҒы һалыу, бер рюмка шарап ултыртыу ҙа булышлыҡ итә. Шулай итеп "тамағы туйҙырылған" мәйет вампирға әүерелә һәм тереләрҙе үҙе тураһында уйлатырға, ыҙаларға, төштәренә инеп, үҙ-үҙенә "аҙыҡ" табырға тейеш була. Һөҙөмтәлә төрлө ауырыуҙар, мал-тыуарҙың сирләүе барлыҡҡа килә. Ғайса бәйғәмбәрҙең әйткәндәрен иҫегеҙҙән сығармағыҙ: "Тереләр хаҡында хәстәрлек күрегеҙ, ә үлеләргә тыныслыҡ кәрәк!"

Некротик бәйләнештәр (үлгәндәргә бәйлелек) сеанстар ваҡытында тулыһынса юҡҡа сыға, һеҙ үҙегеҙ ҙә үлеләрҙе ебәрергә тейешһегеҙ. Әгәр некротик бәйләнеш бар икән, үлгән кешенән ғәфү итеүен һорарға һәм үҙегеҙгә лә уларҙы ғәфү итергә, мөхәббәт менән өйҙәренә - Аллаһҡа ебәрергә кәрәк! Уларҙы был мөмкинлектән мәхрүм итмәгеҙ, сөнки уларҙың Һеҙҙе йәлләп эргәгеҙҙә ҡалыуы, шуның менән үҙҙәре лә яфаланыуы, тереләргә лә зыян килтереүе мөмкин. Онотмағыҙ, тормош мәңгелек, үлем - йәндең сираттағы тапҡыр өйгә ҡайтыуы ғына.

**Рауфан МОРТАЗИН.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Квант һикереүе ғалимдарҙы уҙып китә

Һеҙ үҙегеҙҙең аңығыҙҙы матди донъя төрмәһенән азат иттегеҙ. Бер нисә йыл айырылышып торғандан һуң, Аллаһы Тәғәлә менән ҡабат бәйләнеш булдырҙығыҙ. Заманында унан алыҫлашҡайнығыҙ, хәҙер үҙаллы кире ҡайтып, Аллаһы Тәғәләнең ярҙамын алдығыҙ. Аңығыҙ азат ителде - башығыҙға гениаль уйҙар килеүен көтөгөҙ!

"Гений" термины "джинн" һүҙенән барлыҡҡа килә. Фәрештәләр, феялар кеүек үк, ендәр ҙә Аллаһы Тәғәләнең ҡушҡанын үтәй. Улар уның бойороҡтарын тормошҡа ашыра. Улар кәрәкле кешеләр менән осрашыу кеүек көндәлек йәки лотереяла отош кеүек мөғжизәле ваҡиғалар ҙа булыуы мөмкин. Һеҙ - гений, йәғни ен! Үҙегеҙҙе гений кеүек тотоғоҙ, бөтөн донъя һеҙҙеке буласаҡ. Генийҙар үҙҙәрен нисек тота һуң? Улар проблеманы таный, уға тотона һәм зирәклеккә ярашлы эш итә.

Медитация һеҙҙең өсөн ғәҙәтигә әүерелде. "Уңайлы итеп ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ һәм өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ... " - иҫләйһегеҙме? Күнекмә артынан күнекмә үткәреп, быны һеҙ 50 тапҡырҙан артыҡ эшләнегеҙ. Хәҙер медитация мөғжизәле тормошоғоҙҙоң бер серенә әүерелде. Был "тиҙ ярҙамға" мөрәжәғәт иткәнгә, йәшерен төймәгә баҫып хеҙмәтселәрегеҙҙе саҡырыуға, банкта эшләгән туғаның булыуына ҡарағанда яҡшыраҡ.

Күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ, өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ һәм ыңғай картина күҙаллағыҙ - тап ошо аҙымдар генийҙың зирәклегенә килтерә. Моғайын, һеҙ: "Оһо, бына мин нимә уйлап таптым!" - тип ҡысҡырып ебәрерһегеҙ. Оялмағыҙ, дауам итегеҙ. Илаһи көс мин-минлектән азат, шуға ла һеҙгә бүләк иткән идеяһын үҙегеҙҙеке кеүек ҡабул итеүегеҙгә ҡаршы килмәй.

Ваҡыты-ваҡыты менән низер хәл итеү башҡа кешеләргә, башҡа ваҡытҡа ҡарауы мөмкин. Был осраҡтарҙа уй йәки зирәклек хатта медитация ваҡытында ла килмәүе ихтимал. Әммә хаталанмағыҙ, Аллаһы Тәғәлә һеҙҙе онотто тип яңылышмағыҙ. Донъяла бер үк ваҡытта бер нисә тәгәрмәс әйләнеүен аңлағыҙ.

Ауыр мәсьәләне хәл итеү өсөн бына нимә эшләй алаһығыҙ.

**"Нисек проблеманы хәл итеү юлын табырға" күнекмәһе**

- Эргәгеҙгә бер стакан һыу алып, уңайлы итеп ултырығыҙ, көсөргәнештән арынығыҙ. Өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ һәм проблеманы йәки кәрәкмәгән хәл-торошто күҙаллағыҙ.
- Стакандан бер нисә йотом һыу эсегеҙ. Ике бармағығыҙҙы бергә ҡуйығыҙ.
- Уйығыҙҙан ғына: "Һәр йотом һыу менән проблеманы хәл итеү юлы асығыраҡ күренә", - тип ҡабатлағыҙ.
- Һыу эсеүегеҙҙе һәм бер үк ваҡытта проблеманы хәл итеү юлын күреүегеҙҙе уйығыҙҙа ғына күҙ алдына килтерегеҙ.
- Күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ һәм ысынбарлыҡҡа урап ҡайтығыҙ.

**Роберт СТОУН.**

✓ *Ғәфү итеү - көслөләр сифаты. Көсһөҙҙәр бер ваҡытта ла ғәфү итмәй.*
*(Махатма Ганди).*



ҺАЙЛАУҘАР

## МАЛИК МУСАЕВИЧ МУЛЮКОВ -

**кандидат в депутаты Совета ГО г. Уфа**
**по одномандатному избирательному округу №1 (район Дема),**
**также выдвинут по списку от партии "Справедливая Россия" по тому же округу.**

Малик Мулюков родился 2 апреля 1969г. в г.Уфе. Отец Малика Мусаевича, Муса Гайсович Мулюков, долгое время работал главным редактором газеты "Кызыл Тан", мать, Закира Бадртдиновна - заведующая кафедрой иностранных языков Башкирского государственного университета. Сам Малик Мулюков в настоящее время - руководитель информационной службы радиостанции "Европа плюс Уфа".

М.М.Мулюков: "Как человек с активной жизненной позицией, я знаю, что нужно сделать, чтобы изменить жизнь горожан в лучшую сторону. Для этого в Горсовет должны придти волевые, решительные люди, способные противостоять произволу чиновников, и принести реальную пользу городу и его жителям. Хватит выбирать смирных и тихих депутатов-марионеток. Я за то, чтобы власть в городе осуществлялась по закону. Вместе с тысячами уфимцев, я хочу знать, куда тратятся уплаченные нами налоги и насколько эффективно управляют городским имуществом чиновники.

***Кто хочет перемен, тот меня поддержит!"***

Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Мулюкову М.М. в соответствии со ст. 65 Кодекса РБ № 380-з "О выборах".

## ЙОСОПОВ ФӘРИТ ҒАРИФ УЛЫ

**Калинин районының 14-се бер мандатлы һайлау округы**



Күп балалы ғаиләлә үҫтем, юғары белемлемен. Депутатлыҡҡа кандидат булып теркәлгәс, эшһеҙ ҡалдым. Шулай итеп мине туҡтатырға теләнеләр - яңылыштылар. Тормош позициям үҙгәрмәне. Көн һайын урамдарҙа ятраҡан ҡалам халҡының: эшселәрҙең, талиптарҙың, пенсионерҙарҙың, ветерандарҙың йөҙҙәрен күрәм. Уларға ҡиммәтле иномарканың быялалары аша түгел, күҙҙәремде йәшермәй тура ҡарайым; киң кабинеттарҙа ултырмайым һәм үҙемде ябай халыҡтан өҫтөн итеп һанамайым. Ҡаланың һәм Черниковканың проблемалары миңә, битараф булмаған кешегә, яҡын һәм аңлайышлы.

**Минең һайлау алды платформам:** ● Лайыҡлы эш, һәр кем һатып алырлыҡ торлаҡ һәм бушлай медицина; ● Һайлау округында ТКХ-ның көнүҙәк проблемаларын хәл итеү, ихаталарҙы, балалар майҙансыҡтарын төҙөкләндереү, эшһеҙлек, наркоманлыҡ мәсьәләләрен хәл итеү, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарын, ололарҙы, инвалидтарҙы, хеҙмәт ветерандарын яҡлау; ● Бюджет аҡсаһын тотоноуҙы контролләү, коррупцияға ҡаршы көрәш; ● МУП-тарҙың эшен контролләү, уларҙың һәр ҡайһыһы өсөн мотлаҡ сайттар эшләү.

***Таҙалыҡ, намыҫлылыҡ һәм ғәҙеллек өсөн!***

Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Юсупову Ф.Г. в соответствии со ст. 65 Кодекса РБ № 380-з "О выборах".




**ЛДПР: ЗАСТАВИМ ВЛАСТЬ РАБОТАТЬ !**
БАДЕРТДИНОВ Руслан Фанисович
Ваш кандидат в депутаты по одномандатному округу №14

Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Бадертдинову Р.Ф. в соответствии со ст. 65 Кодекса РБ № 380-з "О выборах".



**ЛДПР: ЗАСТАВИМ ВЛАСТЬ РАБОТАТЬ!**

**Ваш кандидат**
**по Орджоникидзевскому району**
**города Уфы**

# МОСЕЙЧУК Станислав Анатольевич

Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Мосейчуку С.А. в соответствии со ст. 65 Кодекса РБ № 380-з "О выборах".



**ЛДПР: ЗАСТАВИМ ВЛАСТЬ РАБОТАТЬ!**

**Ваш кандидат**
**по Демскому району**
**города Уфы**

# РОТОВ Олег Львович

Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Ротову О.Л. в соответствии со ст. 65 Кодекса РБ № 380-з "О выборах".

# КОМАНДА НАШЕГО ГОРОДА



**Сергей Панченко**

**Кандидат в депутаты Совета**
городского округа город Уфа
по одномандатному избирательному округу № 4

Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Панченко С.Н. в соответствии со ст. 65 Кодекса РБ № 380-з "О выборах".

## *КОТЛАЙБЫҘ!*

Баймаҡ районы Иҫке Сибай ауылы биләмәһе хакимиәте башлығы **Шәрипов Вадим Йәүҙәт** улының ошо көндәрҙә тыуған көнө. Уға 28 йәш тула. Йәш кенә көйө иңенә ҙур йөктәр күтәргән ауылдашыбыҙға, дуҫыбыҙға эшендә уңыштар, ғаилә бәхете, балалар ҡыуанысы теләйем. Вадим! Килер көндәр гел шатлыҡтар алып килһен, гел шулай көләс йөҙлө, ихлас, тырыш бул, халҡыбыҙға тоғро хеҙмәт ит, еңгәй менән үҙең һымаҡ балалар тәрбиәлә.

**Ҡотлау менән Рәфил "улың".**

* * *

Ошо көндәрҙә Баймаҡ районы Темәс ауылында йәшәүсе әсәйебеҙ Сәлимә Шөғәйеп ҡыҙының һәм атайыбыҙ Вәкил Рәхимйән улы Ишбулатовтарҙың тыуған көндәре. Иң беренсе сиратта һаулыҡ, ғаилә именлеге, еңел булмаған эштәрендә уңыштар, сабырлыҡ, ошо йәмле донъяла бәхетле ғүмер итеүегеҙҙе теләйбеҙ.

*Атай, әсәй! Булмышығыҙ -*
*Нур сәсеү бит донъяға.*
*Донъябыҙ моңға күмелә*
*Һеҙ, бары һеҙ булғанға!*

**Ҡотлау менән бөтөн туғандары исеменән балалары Илгиз, Айгөл, Иҙел.**

ӘЙҘӘГЕҘ...



# САҢҒЫҒА БАҪАЙЫҠ,

## мотоуҙыш ҡарайыҡ!

**Ошо ял көндәрендә 11-12 февралдә баш ҡалабыҙҙа ҙур спорт саралары уҙғарыла. Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Рәмил Дилмөхәмәтов журналистар менән матбуғат конференцияһында ошо саралар тураһында һөйләне.**

Өфөләләр йыл да иң күп ҡатнашыусыларҙы йәлеп иткән Бөтә Рәсәй саңғы уҙышына сығасаҡ. Быйыл саңғыға 10 мең кеше баҫасаҡ тип көтөлә. Ярыштарҙа профессиональ саңғысылар ҙа, ҡышҡы спорт төрөн һөйөүселәр ҙә ҡатнаша ала, йәш буйынса сикләүҙәр юҡ. Өфөлә спорт ветерандары, ойошма-предприятиелар хеҙмәткәрҙәре, министрлыҡ һәм идаралыҡ етәкселәре, уҡыусылар, студенттар үҙ-ара ярыша. Спорт байрамына билдәле биатлонсы Максим Чудов саҡырылған. Шулай уҡ Олимпия уйындарына инмәгән спорт төрҙәре буйынса комитет вәкилдәре килергә тейеш. Билдәле булыуынса, 2021 йылда Өфө атап үтелгән спорт төрҙәре сиктәрендә донъя чемпионаты уҙғарыуға дәғүә итә. Комитет вәкилдәре ошоға әҙерләнеү юлдарын барлаясаҡ.

Саңғы ярыштары ике көн дауамында ҡаланың бөтә райондарында ла үтә. Үҙәк майҙансыҡ итеп Орджоникидзе районындағы "Биатлон" стадионын һайлағандар. 17 йәшкә тиклемге ҡыҙҙар-малайҙар ике саҡрымға йүгерһә, өлкәндәр өс саҡрым аралыҡта уҙышасаҡ. Шулай уҡ саңғы уҙышында республиканың ҡала-райондары ла ҡатнаша.

Ял көндәрендә "Строитель" стадионында боҙҙа мотоуҙыш буйынса шәхси донъя чемпионатының икенсе финалы уҙасаҡ. Унда 8 илдән 18 спортсы, шул иҫәптән Өфөнән Николай Красников һәм Дмитрий Колтаков ҡатнаша. Ярыштың икенсе көнө Ғабдрахман Ҡадыров Мемориалы итеп тә иғлан ителгән. Һуңғы заезд еңеүсеһе Мемориал еңеүсеһе лә буласаҡ.

Әйткәндәй, быйылғы чемпионаттың беренсе финалы Красногорск ҡалаһында үткән. Уның һөҙөмтәләре буйынса Тольятти спортсыһы Даниил Иванов әлегә беренсе урынға сыҡҡан. Николай Красников һәм Дмитрий Колтаков икенсе, дүртенсе урындарҙа килә. "Ярыштарға яҡшы әҙерлек менән сыҡтыҡ. Тик техник сәбәптәр арҡаһында бер заезды тамамлап булманы. Шуға тәүге урынды яулай алманыҡ, - тип тәьҫораттары менән бүлешә ете тапҡыр донъя чемпионы Николай Красников. - Иванов менән бер заезда осрашҡанда, көстәр бер иш булыуын тойҙом. Шуға көрәшергә була. Туған боҙ, көйәрмәндәр ярҙамында еңербеҙ, тип өмөтләнәм".

Ошо аҙна дауамында Рәсәй йәштәре араһында саңғыла трамплиндан һикереү буйынса Ҡышҡы спартакиаданың финалы ла үтә. 16 төбәктән йөҙҙән ашыу спортсы йыйылған. Ярышта тәүге тапҡыр ҡыҙҙар ҡатнашасаҡ.

**Мәһәҙи МОРАТОВ.**

*✓ Саф йөрәктән тәҡдим ителгәнде саф йөрәк менән ҡабул итергә кәрәк.*
*(Александр Дюма).*



ҺАЙЛАУҘАР




Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Бадикову К.В. в соответствии со ст. 65 Кодекса РБ № 380-з "О выборах".




Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Костюченко М.М. в соответствии со ст. 65 Кодекса РБ № 380-з "О выборах".




Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Куляшову О.И. в соответствии со ст. 65 Кодекса РБ № 380-з "О выборах".




Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Муллаханову М.Х. в соответствии со ст. 65 Кодекса РБ № 380-з "О выборах".




Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Николевой С.В. в соответствии со ст. 65 Кодекса РБ № 380-з "О выборах".




Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Хазивалееву А.Б. в соответствии со ст. 65 Кодекса РБ № 380-з "О выборах".




Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Султанову Р.З. в соответствии со ст. 65 Кодекса РБ № 380-з "О выборах".




Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Ереминой Г.Е. в соответствии со ст. 65 Кодекса РБ № 380-з "О выборах".

**МОЛОДЫМ - КАРЬЕРУ,**
**ПОЖИЛЫМ - ЗАБОТУ.**

**ПОЛЯКОВ О. В. ☑**

Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Полякову О.В. в соответствии со ст. 65 Кодекса РБ № 380-з "О выборах".




Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Анисимову В.В. в соответствии со ст. 65 Кодекса РБ № 380-з "О выборах".

✓ *Шайтандың мөхәббәтте емерeү өсөн уйлап тапҡан иң һәҙәмтәле һәм ышаныслы ысулы - ул мыжыҡлыҡ. Был сара әле үҙ эшен эшләмәй ҡалғаны юҡ. Ул йылан сағыуына тиң. (Дейл Карнеги).*



## БАШ ЭШЛӘТМӘК




**1.** Һәм, бышҡырып,
башын сайҡаны ла
Ялмап алды ваҡ тал япрағын.
Аҙаҡ китте, муйыл толомона
Батырҙы ла сатыр (...)ын.

**2.** Тик намыҫты данға алмаштырмам,
Юҡ, алданмам арзан данына.
Мин янырмын ғәзеллекте яҡлап,
Ҡәләмемде манып (...)ыма.

**3.** Таң йәйәһен күккә һуҙыу була,
Ҡыштырлаша уҡлы ҡамыштар.
Кереш тартып, йөрәгемә ата
Шул уҡтарҙы туған (...)тар...

**4.** Ҡарағайға ҡарап, хайран ҡалам:
Уйҙарыбыҙ беҙҙең - уртаҡтар.
Һәр быуынға ҡояш нурын биреп,
Бик аҡыллы үлгән (...)тар...

**5.** Тырнаҡтарын ҡаҙап күкрәгенә,
Ике башлы йыртҡыс (...)
Быуат-быуат йөрәк ҡанын эскәс,
Нисек ҡойолмаһын зар-һағыш?

**6.** Кеше ғашиҡ бөгөн бар донъяға,
Мөхәббәте һыймай йыһанға.
Йондоҙло тел кәрәк бөгөн уға,
Эй, ҡанат ҡуй, заман, (...)ға!

**7.** Ялҡын йотҡан Бабич ут-дауылда,
Көн тыуырын көтөп ятмаған.
Аҙашһа ла, барыр юлын тапҡан,
Тик намыҫын (...) һатмаған.

**8.** Эй, йәш миләш,
утлы күҙ йәш-тәлгәш,
Нинә шулай көҙләп балҡының?
Ҡалһын, ҡалһын үҙ усыңда ғына
Тик бөрәүгә изге (...)ың!..

**9.** Тик йоҡоһо ҡасҡан алабайҙар
Абалайҙар алыҫ-алыҫта...
Ә йәш үлән шыптыр-шыптыр килеп,
Атылып сыға ҡаулан-(...)тан.

**10.** Тупрағыма тубырсыҡтар яуһа,
Мин донъяға
тағы ҡайтырмын.
Мәңге йәшел бейек
(...)зың
Тамырҙарын тотоп
ятырмын.

**11.** Эс бошорғос талғын сәғәт теле
Нисә ҡабат инде ураны!..
Уйҙарымдың моңһоу ебен һүтеп,
Үкһей тыштa (...) бураны.

**12.** Ҡойолдолар муйыл сәскәләре,
Тик емештә ҡалды май айы...
Инде үҙе сәскә йыйып йөрөй
Шоморт күҙле февраль (...)ы.

**13.** Ташлап китеү ауыр үткәндә,
Тик сыҡмай ҙа булмай ишектән.
Тыуған икән яҡты донъяға,
Мәңге ятмай бала (...)тә.

**14.** Ул ҡояшҡа ҡарап туҡтап ҡалды,
Күрҙем уның хайран булғанын:
Ике ҡулын елкәһенә ҡуйып,
Һемерҙе ул ҡояш (...)зарын.

**15.** Әсәм теле минә - сәсән теле,
Унан башҡа минең халҡым юҡ,
Йөрәгендә халҡы булмағандың
Кеше булырға ла (...)ы юҡ!

**16.** Соғоллоҡта бына тинһеҙ сәсән,
Йоҙ һыҡҡайы - гүйә, урайы,
Мәңгелектең, гүйә, аһын түгә
Ҡулдарына алған (...)ы...

**17.** О Рембрандт! Бөйөк әүлиә һин,
Күрһәң икән Урал (...)ын,
Керһәң ине уның төпкөлөнә,
Кәмһенмәҫ тә ине ҙур даның.

**18.** Ҡырмыҫҡалар,
күпме ҡырмыҫҡалар
Ҡанатланып сыҡҡан иләүҙән.
Мәж килә был ҡырмыҫҡалар яуы,
Балаларын сисеп (...)ҙән...

**19.** Ҡоштар осоп етмәҫ утрауҙарға -
Ҡайҙа ғына батша һөрмәһен,
Утлы тамға өтөр киң маңлайын,
Тик бөгөлмәҫ бығау-(...)һе...

**20.** Йондоҙло
булғандар
Олуғбәк ғалимдар
Уратып уҙғандар
Уларҙы (...)дар...

**21.** Шиғыр юлы йүкә түгел дә бит,
Шиғыр юлы исҡә төштөмө,
Йыр сыҡмаһа, сабаталар үреп,
Фәһем итәм беҙҙең (...)нө.

**22.** Нинә моңло икән таңдағы йыр?
Ярып керҙе ул йыр йөрәккә.
Төнһөҙ упҡындарға осҡан мәлдә
Таяндым мин ошо (...)кә.

**23.** Шул заманым минең -
саф иманым,
Ир булырға ул бит өйрәтте.
Заманым, тип тамаҡ ярмаһам да,
Заман ярып үтте (...)те.

**24.** Һөйәһе лә, һөйөләһе лә килгән
Анлайышһыҙ, сәйер мәл етте...
Эй был сәйер, йөмле яҙ сыуғы
Терелтерлек хатта (...)те!

**25.** Һин тик билдәһеҙ бер ҡатын булып,
Үтеп китһәң, елдәй, көймәндә,
Үҙең менән күпме хазинаны,
Күмер инең, аҡыҡ (...)ндәй...

**26.** Ҡулдарыңдан тотҡан ҡулдар минә
Таяғылай булыр ләхеттән.
Үҙ күҙҙәрем менән күргем килмәй
Ерләнеүен тере (...)тең!..

**27.** Ай-Ураҡты Сүкеш тешәгәнгә
Ерҙә тыуған тынмаҫ хәрәкәт.
Ураҡ менән Сүкеш йөшәгәнгә
Донъя - имен, ерҙә - (...).

**28.** Халҡым теле - минә хаҡлыҡ теле,
Унан башҡа минең илем юҡ;
Илен һөймәҫ кенә телен һөймәҫ,
Иле юҡтың ғына (..)е юҡ!

**Шпаргалка:** Тел. Ҡан. Нур. Хаҡ. Бәхет. Тараҡ. Терәк. Тауыш. Йөрәк. Ботаҡ. Биләү. Илһам. Төрмә. Шағир. Балаҫ. Мәйет. Ялҡын. Төймә. Шешлә. Малай. Залим. Бишек. Урман. Ҡурай. Бәрәкәт. Февраль. Ҡарағош. Ҡарағай.

**Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнә.**

**4-се һандағы кроссворд яуаптары:** 1. Һағыҙаҡ. 2. Маймыл. 3. Ҡалас. 4. Мәҙин. 5. Ирәүән. 6. Эскәмйә. 7. Балапан. 8. Мәҙрәсә. 9. Әсбап. 10. Ҡамыт. 11. Баҡса. 12. Тарих. 13. Ислам. 14. Батша. 15. Сәллә. 16. Манса. 17. Балауыҙ. 18. Мәрйә. 19. Сарафан. 20. Мәхәллә. 21. Тамаҡ. 22.Өшә. 23. Хәйлә. 24. Өмә. 25. Күҙ. 26. Һалма. 27. Бүләк. 28. Солоҡ. 29. Фалиж. 30. Тырма. 31. Томан. 32. Мал. 33. Алтын. 34. Ҡомалаҡ. 35. Афған. 36. Муйын. 37. Сәнәғәт. 38. Ҡором. 39. Әфлисун. 40. Имгәк. 41. Һарыҡ. 42. Матәм. 43. Байрам. 44. Һарай. 45. Сыуаҡ. 46. Мәрмәр. 47. Тарамыш. 48. Сәйәхәт.

## АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәрене әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АЛТЫН ЕРҘӘ ЯТҺА ЛА...

### тут теймәй

Баш ҡәрҙәш булһа ла, мал ҡәрҙәш түгел.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ҡатын-ҡыҙҙың буй еткеhеҙ булып күренеүе - ул уның матурлығын арттырыусы тағы бер бер биҙәнгес әйбер кеүек.

**(Франсуа де Ларошфуко).**

Мөхәббәттә бик тиҙ уныш яулау уның баһаһын кәметә, ә мөхәббәт юлындағы кәртәләр уның баһаһын арттыра.

**(Стендаль).**

Шайтандың мөхәббәтте емерeү өсөн уйлап тапҡан иң һәҙәмтәле һәм ышаныслы ысулы - ул мыжыҡлыҡ. Был сара әле үҙ эшен эшләмәй ҡалғаны юҡ. Ул йылан сағыуына тиң.

**(Дейл Карнеги).**

Ожмахта нимә эшләгәндәрен беҙ белмәйбеҙ. Уның ҡарауы, ожмахта өйләнмәйҙәр һәм кейәүгә сыҡмайҙар икәнен беләбеҙ.

**(Джонатан Свифт).**

Батшалар һәм ҡатындары хыянат иткән ирҙәр бар халыҡтың уларҙың йөҙәнән көлгәнен иң һуңғы булып белә.

**(Наполеон Бонапарт).**

Үҙ тормошоғоҙҙа яһай торған иң ҙур хата - ул гел генә хаталаныуҙан ҡурҡып йәшәү.

**(Эльберт Хаббард).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер әсә Аҡһаҡал янына килә һәм уға шундай һорау бирә:**

**- Хөрмәтле Аҡһаҡал, мин үҙемдең улым тураһында өҙләкһеҙ борсолоу кисерәм. Балам ниндәйҙер бәләгә осрап ҡуймаһын, тигән уй эҙәрлекләй мине. Минә ни эшләргә икән?**

**- Яуап бик ябай: улыңа насарлыҡ теләүҙән туҡта! - ти Аҡһаҡал. - Эш шунда: һинең башыңда уралған уйҙарҙы Йыһан теләк рәүешендә ҡабул итә. Балалар үҙҙәре лә ата-әсәнең уға ҡарата булған теләктәрен, уйлағандарын йәшәү программаһына һала. Шуның өсөн улыңа мәнәсәбәтеңдә үҙгәрт. Уның тураһында тик яҡшыны ғына уйла. Уға юлыңда осраған бар кәртәләрҙе еңеп сығырға һәләтле иң көслө, аҡыллы, лайыҡлы кеше итеп ҡара...**

**Аҡһаҡалдың әйткәндәрен тәрән уйға ҡалып тыңлап торғандан һуң, әсә китә. Уның артынса Аҡһаҡал шулай ти:**

**- Кешенең төп дошмандары - яҡындары шул инде..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттен Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Баш мөхәррир урынбаҫары** 246-03-24
**Бухгалтерия** 246-03-23
**Хәбәрселәр** 252-39-99
Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 10 февраль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.
«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**
Тиражы - 5344
Заказ 500